ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискә Өфө

3-9 июль (майай) 2026

№26 (1221)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Был һүҙҙәрҙең тамыры ҡайҙан?**



6

**Георги башҡорттар тураһында**



7

**Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!**



11

**Моңло ҡурай,**

йырлы ҡурай, дәртле ҡурай...



13

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*"Бәләләр, - тигән аҡыл һәм хикмәт эйәләре, - ямғыр кеүек туҡтауһыҙ яуып ҡына тора, ә шатлыҡтар йәшен кеүек йәшнәп ала ла, юҡҡа ла сыға. Ни өсөн шулай тиһегеҙме? Кешеләрҙең үҙҙәрендә насарлыҡҡа ҡарағанда игелек әҙерәк булған өсөн". Халҡыбыҙҙа игелектең күп булыуын теләһәк, "Мин һиңә игелек ҡылһам, һин миңә тейешһең", - тип түгел, Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн үҙебеҙ күберәк игелек ҡылайыҡ. Шул саҡта зыян кәмер..."*

КӨН ТЕМАҺЫ

# БЕНЗИН ЮҠ, ЛӘКИН БЕНЗИН БАР!



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика властарының АЗС-тарға яғыулыҡ ташыуҙы арттырыуы һәм бөтә профилле предприятиеларҙың көсөргәнешле эшләүе тураһында хәбәр итте, төп бурыс - яғыулыҡ баҙарын тулыландырыу һәм ығы-зығыны туҡтатыу, тип билдәләне.**

- Макроиҡтисади сәбәптәр ҙә, субъектив сәбәптәр ҙә бар. Ләкин АЗС-тарҙа беҙ ҡытлыҡты тоймайбыҙ. Бында логистика менән һорауҙар күп. Яғыулыҡ ҡойоу станциялары структураһы бик "сыбар", беҙҙә ике йөҙҙән ашыу "Башнефть" автозаправкаһы станциялары эшләй, шәхси АЗС-тар ҙа бар. "Башнефть" АЗС-тары булмаған районлар бар, уларҙа иһә шәхси эшҡыуарҙарға таяналар. Ә уларҙың күләме бәләкәй һәм яғыулыҡ һатып алыу мөмкинлеге булмау сәбәпле, тотош райондар бензинһыҙ ҡала - быға юл ҡуйырға ярамай. Бындай минуттарҙа Хөкүмәт тулы көскә эшләргә тейеш. Кемдер, канистрҙар менән һатып алалар, тип, кешеләрҙе тәнҡитләргә, барыһын да уларға япһарырға тырыша - ысынында был улай түгел. Төп бурыс - логистиканы яйға һалыу. Канистрҙар менән бәйле проблема бар, ләкин ул хәл иткес әһәмиәткә эйә түгел. Беҙ ҡарар ҡабул иттек һәм уны үтәүҙе талап итәм - беҙ яғыулыҡты канистрҙарға ҡойоп һатыуҙы тыйҙыҡ. Ажиотажды ла кәметергә кәрәк, ул да ныҡ ҡамасаулай. Нефть эшкәртеү заводтарынан яғыулыҡ ебәреүҙе 1,5 тапҡырға арттырҙыҡ, шуға күрә ығы-зығы баҫылыр тип өмөтләнәбеҙ.

Республика етәксеһе шулай уҡ Башҡортостандың ҡала һәм район башлыҡтарына яғыулыҡты канистрҙарға ҡойоп һатыуҙы тыйыу тураһында күрһәтмәнең һәм АЗС-тарҙа индерелгән нормаларҙың үтәлешен күҙәтеп барырға ҡушты.

### Теманы дауам итеп...

БР Сәнәғәт һәм тышҡы иҡтисади бәйләнештәр министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, июндә яғыулыҡ етештереү күләме йыллыҡ план күрһәткестәре менән бер кимәлдә булды. "Республикала 500-ҙән ашыу яғыулыҡ ҡойоу станцияһы эшләй. Уларҙың күбеһе яғыулыҡ етештереүселәр менән тура бәйләнештә. Июнь айында яғыулыҡ етештереү күләме кәмемәне һәм йыллыҡ план күрһәткестәре менән бер кимәлдә булды. Бөгөнгө хәлде иҫәпкә алып, был яғыулыҡ бөтә ил буйынса тигеҙ бүленә. Һуңғы көндәрҙә айырыуса бензинға һәм дизель яғыулығына ихтыяж артты. Ҡайһы бер осраҡта юғары ихтыяж ажиотажға килтерә, яғыулыҡ ҡойоу станцияларында сират хасил була, хатта алыпһатарлыҡ һәм спекуляция осраҡтарын күҙәтәбеҙ, - тип хәбәр иттеләр БР Сәнәғәт һәм тышҡы иҡтисади бәйләнештәр министрлығынан. - Шуны әйтергә кәрәк, етештереүсе компаниялар "Прогресс", "Точка", UfaOil кеүек заправка станцияларын яғыулыҡ менән тәьмин итмәй. Был ҙур булмаған яғыулыҡ ҡойоу станциялары нефть өлкәһендәге күмәртә баҙарының ҡатнашыусыларынан яғыулыҡ һатып ала. Уларҙың һатыу хаҡы уртаса хаҡтарҙан күпкә юғарыраҡ".

Шулай итеп, республика яғыулыҡ ҡойоу станцияларында яғыулыҡ ҡытлығы юҡ. Етештереүселәрҙең хаҡтары тотороҡло бер кимәлдә һаҡлана һәм контролдә тотола. Бөгөн яғыулыҡты республиканың яғыулыҡ ҡойоу станцияларына бүлгәндә, киләһе факторҙар иҫәпкә алына:

- рациональ территориаль бүлеү, юлда барған һәр водитель теләгән бер станцияла яғыулыҡ ҡойоп алыу мөмкинлегенә эйә;
- яғыулыҡҡа сират булмаһын өсөн торлаҡ йорттар күпләп урынлашҡан ерҙәге заправка станциялары етерлек күләмдә тәьмин ителә.

Хөрмәтле республика халҡы, хәлде аңлап ҡабул итеүегеҙҙе һәм түбәндәге кәңәштәргә ҡолаҡ һалыуығыҙҙы һорайбыҙ:

- машинағыҙға яғыулыҡты кәрәк булғанда ғына ҡойоғоҙ;
- яғыулыҡты транспорт сараһының бағына тура ҡойоғоҙ;
- дәүләт органдарының һәм эре компанияларҙың рәсми мәғлүмәттәренә таянығыҙ.

**Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ әҙерләне.**

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# ҺАЛДАТ ҠАТЫНДАРЫ ЛА...

## Еңеүҙе яҡынайтыу өсөн ең һыҙғанған



**Үҙҙәрен төрлө өлкәлә һынап ҡараған, хатта, ҡатын-ҡыҙ эше түгел, тип иҫәпләнгән һөнәрҙә лә үҙҙәрен бына тигән итеп күрһәткән эшҡыуар ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ етерлек. Таксист булып, оҙон юлдар үткән биш бала әсәһе Розалия ХИСМӘТУЛЛИНА тураһында ла бик күп йылы һүҙҙәр әйтергә булыр ине. Әлбиттә, һәр ғаилә һынау аша үтә. Розалия ла ире Артурҙы МХО-ға оҙатҡандан һуң, ҡул ҡаушырып ултырмай. "Ете ҡыҙ" йәмғәт ойошмаһы менән әүҙем хеҙмәттәшлек итә - МХО-ла йөрөгән яугирҙарҙың ғаиләләренә ярҙам итеүме, гуманитар йөктө ойоштороуҙа ҡатнашыумы - береһенән дә ситтә ҡалмай. Әүҙем тормош позицияһы Розалияға һынауҙарҙы еңел үткәрергә һәм киләсәккә ышаныс менән бағырға көс бирә.**

(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).

12+

ҠЫҪҠАСА

# СОЦИАЛЬ ТҮЛӘҮҘӘР АРТА

**1 июлдән рәсәйҙәрҙең айырым категорияларына социаль түләүҙәр күләме арта.** Тәүге тапҡыр I инвалидлыҡ төркөмө бирелгән кешеләр пенсияға билдәләнгән түләүҙе икеләтә арттырылған килеш аласаҡ (әгәр өҫтәмә быға тиклем билдәләнгән булһа, ҡабаттан түләнмәй). Шулай уҡ 18 йәшкә тиклемге баланы йәки 23 йәшкәсә көндөҙгө студентты үҙ ҡарамағына алған пенсионерҙарға ла өҫтәмә ҡаралған. Был осраҡта пенсияның билдәләнгән өлөшө арттырыла, ә уның күләме тәрбиәгә алынғандарҙың һанына бәйле. Тармаҡта 30 йылдан ашыу эшләгән ауыл эшсәндәре пенсияның билдәләнгән өлөшөнә 25 процент күләмендә өҫтәмә түләүгә дәғүә итә ала. Әгәр ошо өҫтәмә тәғәйенләнмәгән икән, Рәсәйҙең Социаль фондына ғариза яҙырға кәрәк. Июль башына тиклем 80 йәше тулған пенсионерҙарға ғаризаһыҙ автоматик рәүештә өҫтәмә түләнә. Ағымдағы йылда билдәләнгән база түләүе 9 584,69 һум тәшкил итә, 80 йәштән һуң ул ике тапҡырға арта, ә пенсионерҙы ҡараған өсөн 1 413,86 һум күләмендә өҫтәмә аҡса түләнә. Шулай итеп, айлыҡ өҫтәмә яҡынса 11 мең һум тәшкил итәсәк. Айырым төбәктәрҙә сумманың урындағы коэффициенттар менән айырылыуы мөмкин.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров рәйеслегендәге аҙналыҡ оператив кәңәшмәлә республиканың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова хәбәр итеүенсә, 2027 йылда Башҡортостанда "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" федераль проекты буйынса 152 йәмәғәт биләмәһе төҙөкләндереләсәк.** Был маҡсатҡа 1 миллиард һумдан ашыу федераль аҡса йүнәлтеләсәк. Тауыш биреү һөҙөмтәһендә, Өфөнөң Киров районындағы Салауат Юлаев исемендәге майҙан төҙөкләндереү өсөн иң популяр объект булараҡ еңеп сыҡты, уның өсөн 40 меңдән ашыу кеше тауыш бирҙе. Бында йәйәүлеләр юлдарын яңыртыу, йәшелләндереү, яңы бәләкәй архитектура формаларын ҡуйыу, яҡтыртыуҙы яңыртыу һәм фонтанды ремонтлау планлаштырыла. Икенсе урында - 39 меңдән ашыу тауыш йыйған Өфө балалар филармонияһы алдындағы биләмә алды. Лидерҙар исәбендә шулай уҡ Өфө районының Зубово ауылы Ҡарлы урамындағы парк, Нефтекамала Комсомол урамындағы аллея һәм Салауатта Дзержинский урамындағы аллея бар.

✓ **Башҡортостанда рус теленән Берҙәм дәүләт имтиханына йомғаҡ яһалды.** Йәмғеһе 16 164 сығарылыш уҡыусыһы һынау тотҡан. 22 уҡыусының эштәре йөҙ балл менән баһаланған. Был уҙған йылға ҡарағанда ике тапҡырға күберәк. Шулай уҡ 2640 сығарылыш уҡыусыһы, 81 һәм унан юғарыраҡ балл йыйып, юғары әҙерлек кимәлен раҫланы. "Һөҙөмтәләр белем кимәленең ярайһы уҡ юғары булыуын күрһәтте, - тип белдерҙе Башҡортостандың мәғариф министры Илдар Мәүлитбирҙин. - Рус теле - беҙҙең мәҙәниәт, тарих һәм милли үҙенсәлектең нигеҙе. Бындай һөҙөмтәләр - республика мәғариф системаһының дөрөҫ йүнәлештә барыуын, ә балаларыбыҙҙың төплө белем алыуын һәм илдең алдынғы юғары уҡыу йорттарына уҡырға инергә әҙер икәнен дәлилләй". Министр уҡытыусыларға, остаздарға һәм ата-әсәләргә баһалап бөткөһөҙ хеҙмәте, түҙемлеге һәм һәр балаға ышаныс өсөн рәхмәт белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, сығарылыш уҡыусылары һәм педагогтар юғары профессионаллек күрһәтә һәм төбәктә сифатлы белем биреү традицияларын дауам итә.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# МАХСУС ОТРЯД ОЙОШТОРОЛДО

**Уҙған аҙнала Өфө нефть эшкәртеү комплексына украин пилотһыҙ осоу аппараттары һөжүмен "Илдең хәрби армия резервы" (БАРС) территориаль отряды ағзалары кире ҡағырға ярҙам итте.**

"Беҙ "Башнефть" компанияһы менән бергә террористик һөжүмдәргә ҡаршы торабыҙ. Уҙған аҙнала12 пилотһыҙ осоу аппаратын бәреп төшөрҙөк, - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә. - Беҙ "БАРС" отрядын ойоштторҙоҡ, ҡорал менән тәьмин иттек. "БАРС" беренсе алышты ҡабул итте. "БАРС" яугирҙарын, Оборона министрлығы, Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы, Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты һәм предприятиеларҙың именлек хеҙмәттәре вәкилдәрен дәүләт наградаларына тәҡдим итергә кәңәш бирәм. Асылда, улар һуғышта һәм үҙ бурысын үтәй. Был еңел бирелмәй. Берләшеү һәм һәм ошо проблеманы хәл итеү зарур. Уны хәл итеп була", - тине Хәбиров.

Билдәле булыуынса, Башҡортостандың "БАРС" отрядында хәрби тәжрибәгә эйә булған 300 кеше иҫәпләнә. Улар араһында МХО яугирҙары ла лә бар.

# ҺАЙЛАУ АЛДЫНАН...

**Үткән аҙнала Мәскәүҙә "Берҙәм Рәсәй" партияһының XXIII съезы булып үтте. Башҡортостан Башлығы, партияның Башҡортостан төбәк бүлеге етәксеһе Радий Хәбиров республика делегацияһын етәкләне.**

Съезд эшендә Рәсәй Президенты Владимир Путин, "Берҙәм Рәсәй" партияһы рәйесе, Рәсәй Именлек Советы рәйесе урынбаҫары Дмитрий Медведев, партияның юғары етәкселеге, төбәк башлыҡтары, төбәк бүлектәре секретарҙары һәм илдең барлыҡ төбәктәренән һайланған делегаттар ҡатнашты. "Беҙҙең партия съезы ил өсөн яуаплы осорҙа, донъяла ҙур үҙгәрештәр барған ваҡытта уҙа. Рәсәй һәр ваҡыт халҡының берҙәмлеге менән көслө булды һәм еңеүгә өлгәште. Быңа ошо берҙәмлегебеҙ ҡайһы бер дошманға тынғылыҡ бирмәй ҙә инде. Улар илде ҡаҡшатырға теләй. Тик был ниәттәре быға тиклем килеп сыҡманы, бынан һуң да килеп сыҡмаҫ. Бөгөн бөтә халыҡ геройҙарыбыҙға ярҙам итә, армияға һәм флотҡа ышана. "Берҙәм Рәсәй"ҙең төп бурысы - Еңеү өсөн барыһын да эшләү", - тине Владимир Путин пленар ултырышта сығыш яһап.

- Бөгөн беҙ Дәүләт Думаһына һайлау алдынан торған бурыстар тураһында фекер алыштыҡ һәм Дәүләт Думаһының туғыҙынсы саҡырылышына депутатлыҡҡа кандидаттарҙың, шулай уҡ бер мандатлы һайлау округтарына кандидаттарҙың федераль исемлеген раҫланыҡ. Республика өсөн был ҙур әһәмиәткә эйә, сөнки Дәүләт Думаһындағы республика вәкилдәренең күпселеге - "Берҙәм Рәсәй" ағзалары. Беҙ Башҡортостанда алдан тауыш биреүҙе юғары кимәлдә үткәрҙек, унда 320 меңдән артыҡ кеше ҡатнашты. Был - Рәсәйҙә иң юғары күрһәткестәрҙең береһе. Исемлеккә Махсус хәрби операция ҡатнашыусылары ла индерелде. Бөгөн Парламенттың төп бурысы - Президент сәйәсәтенә терәк булыу, Махсус хәрби операцияға ярҙам итеү, санкция баҫымына ҡаршы тороу, илдә ижтимағи-сәйәси тотороҡлоҡто ныҡытыу өсөн ваҡытында һәм һөҙөмтәле закондар ҡабул итеү, - тине Радий Хәбиров.

# ЫҢҒАЙ БАҺАЛАНА

**Республика Мәҙәниәт министрлығының Гуманитар тикшеренеүҙәр үҙәге директоры Марат Мәрҙәнов Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса совет ултырышында төбәктә милләт-ара мөнәсәбәттәрҙең торошо хаҡында мәғлүмәттәр менән уртаҡлашты.**

Һорауҙарға яуап алыу һөҙөмтәләре буйынса респонденттарҙың 92,5 проценты уларҙы ыңғай баһалай. Тағы ла бер тренд - илһөйәрҙәрҙең берләшеүе. Шуныһы мөһим: 18-29 йәшлектәр төркөмөндә үҙҙәрен патриот тип иҫәпләгән граждандарҙың өлөшө юғарыраҡ.

Сит илдәрҙән мәғлүмәт һөжүме күп булыуға ҡарамаҫтан, республикала тотороҡло милләт-ара һәм конфессия-ара мөнәсәбәттәр һаҡлана, тип билдәләне Марат Мәрҙәнов. Был шул иҫәптән Рәсәйҙең 2025 йылға тиклемге Дәүләт милли сәйәсәте стратегияһы положениеларын уңышлы тормошҡа ашырырға мөмкинлек биргән балансл ы дәүләт сәйәсәте һөҙөмтәһе булып тора.

Милләттәр эштәре буйынса федераль агентлыҡ баһаһы буйынса, Башҡортостанда низағлы хәлдәрҙең эҙемтәләрен кәметеү буйынса һөҙөмтәле саралар тормошҡа ашырыла. Республика тәжрибәһе илдең башҡа төбәктәрендә лә таратыла. Башҡортостан Башлығы артабан да ошо өлкәлә ведомство-ара килешеп эшләүгә баҫым яһарға кәрәклеген билдәләне.

- Милләт-ара татыулыҡ - сәйәсәттә, айырыуса әлеге еңел булмаған осорҙа бик нескә төшөнсәләрҙең береһе, - тине Радий Хәбиров. - Башҡортостан - Рәсәйҙең терәк төбәге, шуға күрә хәлде күҙәтеп барыу һәм һәр төрлө янауҙарға ҡаршы тороу буйынса эште дауам итеү мөһим.

# ӘР-РӘХИМ МӘСЕТЕ ТӨҘӨЛӨШӨНДӘ



**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Диниә назараты башланғысы менән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ағзалары, йәмәғәт эшмәкәрҙәре һәм журналистар Әр-Рәхим мәсете төҙөлөшө барышы менән танышты.**

Әле мәсетте тыштан йөҙләү бара. Эштәрҙе "Профмастероф" төҙөлөш компанияһы башҡара. Бинаның байтаҡ өлөшө йөҙләнгән дә инде. "Заманында мәсеттең манаралары грек мәрмәре менән йөҙләнгән ине, был таштың, ваҡыт үтеү менән, аҡ төҫө тоноҡлана, уны ағартыу өсөн өҫтәмә сығымдар талап ителәсәк. Шуға күрә лә бинаның үҙендә аҡ керамогранит ҡулланабыҙ, - тип һөйләне компания етәксеһе Павел Краснов. - Был материал арзанырак һәм, мәрмәрҙән айырмалы, һыуҙы үҙенә ныҡ һеңдермәй, төҫөн юғалтмай".

Мәсеттең эсендә әлегә биҙәү эштәренә тотонмағандар. "Шулай ҙа беренсе ҡатты киләһе Ҡорбан ғәйетенә тапшырырға ниәтләйбеҙ", - ти Павел Краснов.

Әр-Рәхим мәсетенең төп залы икенсе ҡатта урынлашҡан. Унда ла әле эштәр башланмаған. "Алла бойорһа, яҡын киләсәктә, баш ҡалабыҙ Өфөнөң йөҙөк ҡашы булырҙай Әр-Рәхим мәсете тулыһынса төҙөлөп бөтөп, Башҡортостан мосолмандарын ҡыуандырыр!" - тип яҙа Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ағзаһы Азат Ярмуллин үҙенең социаль селтәрҙәрҙәге сәхифәһендә.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Социаль селтәрҙәрҙә таралған, Башҡортостанда яғыулыҡты дәүләт һәм ашығыс хеҙмәттәрҙең транспорты өсөн генә алырға мөмкин, тигән мәғлүмәт дөрөҫлөккә тап килмәй. БСТ каналының махсус брифингы тура эфирында республиканың сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министры Александр Шельдяев ошо турала һөйләне. "Был имеш-мимештәр ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Бөгөн алыҫ райондарҙа ашығыс хеҙмәттәр өсөн яғыулыҡ резервын тотабыҙ, әммә был кәрәк булған өсөн генә. Ләкин беҙ дәүләт структураларын ғына бензин менән тәьмин итәбеҙ тигән нәмә юҡ", - тип билдәләне Шельдяев.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин указы менән Иван Грибов Башҡортостан прокуроры итеп тәғәйенләнде. Быға тиклем ул Владимир өлкәһе прокуроры вазифаһын башҡарған. Иван Грибов 1975 йылда Мари Эль Республикаһында тыуған. Һарытау дәүләт хоҡуҡ академияһын тамамлаған, юридик фәндәр кандидаты. 1997 йылдан прокуратура органдарында эшләй. 2023 йылдың апреленән Владимир өлкәһе прокуратураһын етәкләй. Элек шул уҡ вазифала Псков өлкәһендә эшләгән.

✓Башҡортостанда мәктәп тамамлаған 71 мең уҡыусы аттестат алды. Республиканың мәғариф һәм фән министры Илдар Мәүлетбирҙин билдәләүенсә, Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәләре яҡшы. 183 уҡыусы бер предметтан 100 балл йыйған, ә 9 кеше ике предметтан иң юғары баһа алған. Сығарылыш уҡыусылары 100 балл йыйыу буйынса айырыуса ҙур үҫеште рус теле (22 кеше) һәм профилле математика (14) буйынса күрһәткән. Был уҙған йылға ҡарағанда дүрт тапҡырға тиерлек күберәк. Физиканан 61 бала йөҙ балл йыйған, был 2025 йыл күрһәткестәренән ике тапҡырға юғарыраҡ.

✓Ошо көндәрҙә Архангел районынан яҡташ яугирҙар өсөн утыҙ туғыҙынсы гуманитар ылау алғы һыҙыҡҡа килеп етте. Урындағы эшҡыуарҙар һәм халыҡ көсө менән кәрәк-яраҡтар: генераторҙар, квадроцикл, төҙөлөш материалдары, аҙыҡ-түлек йыйылған, шулай уҡ яҡындарының исемле посылкалар илтеп тапшырылған. Был хаҡта район хакимиәте башлығы Айрат Сәйетғәлин хәбәр итте.

✓Ауырғазы һәм Иглин райондарында "Рәсәй эше"нең яңы модулле кадр үҙәктәре асылды. Хөкүмәттең аҙналыҡ кәңәшмәһе барышында видеоэлемтә аша Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров сарала ҡатнашты һәм яңы объекттарҙы асыуға фатихаһын бирҙе. Әйткәндәй, республикала "Рәсәй эше" модуль кадрҙар үҙәктәренең дөйөм һаны 57-гә етте.

✓ *2030 йылда Өфө халҡының һаны 1,2 миллионға тиклем артасаҡ. Ун мең кешене күҙ алдына килтерегеҙ, уларға яңы торлаҡ, мәктәптәр, дауаханалар, юлдар, уңайлы мөхит һәм башҡалар кәрәк.*



*ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ*



# БАШ ҠАЛА ӨЛГӨ КҮРҺӘТӘ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбров "Башинформ" мәғлүмәт агентлығының махсус хәбәрсеһенә биргән интервьюһында Өфө мэрияһының яңы командаһы һәм яңы ҡала советы алдында торған бурыстар хаҡында һөйләне. Баш ҡала советына һайлау быйыл сентябрҙә үтәсәге билдәләнде.**

"Бында, әлбиттә, проблемалар байтаҡ. Мин әлеге депутаттарға биш йыллыҡ хеҙмәте өсөн рәхмәт әйтәм. Уларға тиҙ арала ҡарарҙар ҡабул итергә тура килде. Мәҫәлән, Өфө үҫешенең яңы генпланы ҡабул ителде, һуңғы тапҡыр ул 2006 йылда яңыртылған булған. Генплан - ҡаланы үҫтереү стратегияһын билдәләгән етди документ. Быға тиклем иғтибарҙан ситтә ҡалған бер күренеште әйтеп үтергә теләйем. Өфө йыл һайын 10 меңгә яҡын кешегә арта. Беҙҙең күҙаллау буйынса, 2030 йылда Өфө халҡының һаны 1,2 миллионға тиклем артасаҡ. Ун мең кешене күҙ алдына килтерегеҙ, уларға яңы торлаҡ, мәктәптәр, дауаханалар, юлдар, уңайлы мөхит һәм башҡалар кәрәк. Шуға күрә, идара итеү командаһы ошо үҫешкә ярашлы эшләргә тейеш. Өфөлә иң ауыр проблема мәктәптәргә бәйле икәнен беләбеҙ. Беҙ уларҙы төҙәйбеҙ. Быйыл тағы ла ҙур өс мәктәптә файҙаланыуға тапшырабыҙ", - тине Радий Хәбиров.

Республика Башлығы Өфөнөң, баш ҡала булараҡ, өфөләр өсөн генә түгел, тотош республика халҡы мәнфәғәтенә үҫешеүен билдәләне. "Балалар Өфөләге юғары уҡыу йорттарында уҡый, халыҡ театрҙарға килә. Бында төбәктең эске продуктының ҙур өлөшө формалаша, беҙҙең нефть-химия заводтары, моторҙар эшләү заводы ошонда урынлашҡан. Өфө нисек алға бара, республика ла шулай үҫешәсәк", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

* * *



Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Шәрипов Өфөнө Рәсәйҙең иң шәп ҡалаһы тип атаны. "Бөгөн беҙ ҡала Советы ултырышында ҡатнаштыҡ. Үткән осорға һығымталар яһалды. Әлбиттә, һуңғы биш йылда бик күп эштәр башҡарылды, улар иң тәүҙә Башҡортостан Башлығы ярҙамында тормошҡа ашырылды. Республикабыҙ етәкселегенең иғтибары, ярҙамы киләсәктә лә туҡтамаҫ, тип уйлайым", - тип билдәләне Рөстәм Динислам улы.

Мәр шулай уҡ йөмәғәт башланғысында ҙур эш башҡарған депутат корпусына рәхмәтен белдерҙе. "Хәҙерге үҫеш темпын нығытырға һәм үҫтерергә кәрәк. Беҙҙең демографик күрһәткестәр ярайһы уҡ яҡшы, юғары, Өфө үҫә. Әлбиттә, идара итеү командаһына халыҡтың теләктәрен үтәү өсөн бөтә көстә һалырға кәрәк буласаҡ. Өфө - илебеҙҙең иң яҡшы ҡалаһы, уны тағы ла яҡшыраҡ итеү өсөн, һис шикһеҙ, барыһын да эшләйәсәкбеҙ!" - тине Рөстәм Шәрипов.

# ТӨП МАЙҘАНСЫҠ БЕҘҘӘ!

**Өфөнөң Көрәш һарайы Рәсәй халыҡтары спартакиадаһының спорт көрәше буйынса ярыштары өсөн төп майҙансыҡҡа әүерелә.**

Республика Башлығы Радий Хәбибов башланғысы менән Өфөлә өс ҙур спорт объекты төҙөлдө: Көрәш һарайы, Фехтование үҙәге, Ишеү слаломы комплексы. "Беҙ был эштең һөҙөмтәләрен күрәбеҙ. Бөгөн был спорт объекттарында меңләгән бала һәм спортсы шөғөлләнә, Бөтә Рәсәй һәм халыҡ-ара ярыштар үткәрелә, Рәсәй йыйылма командалары өсөн күнекмәләр уҙғарыла. Был объекттар балаларға тыуған республикаһынан ситкә китмәйенсә үҫергә һәм юғары һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн мөмкинлек бирә, - тип билдәләне Башҡортостан Премьер-министры урынбаҫары - спорт министры Руслан Хәбибов. - Ике йыл элек Өфөлә тәүге тапҡыр "Рәсәй - спорт державаһы" халыҡ-ара спорт форумы үтте. Был республиканың спорт тормошон тамырынан үҙгәрткән тарихи ваҡиға булды. Июль аҙағынан башлап спорт объекттары йәнә илдең төп ярышын - иң көслө спортсылар араһында үткән Рәсәй халыҡтарының Спартакиадаһын ҡабул итәсәк. Был - республика ике йыл элек башҡарған эшкә иң юғары баһа. Форумдың мираҫы йәшәй, үҫешә, кешеләргә файҙа килтерә..."

Руслан Хәбибов хәбәр итеүенсә, турнир 7-12 сентябрҙә ойошторола. Өфөләге Рәсәй халыҡтары спартакиадаһы 2028 йылғы Олимпия уйындарына һайлап алыу этабы булып торасаҡ.

# БЕҘҘЕҢ БАЛАЛАР!

**Өфөнөң 93-сө лицейы уҡыусыһы Самира Абдрахманова SCO Young Scientists Camp 2026 халыҡ-ара сараһының һайлап алыу турын үтеп, финал этабына саҡырылды.**

5-20 июлдә Ҡырғыҙстанда, Ыҫыҡкүл буйында, йәштәр тәжрибәле остаздар етәкселегендә 4-5 кешенән торған халыҡ-ара командаларҙа реаль тикшереңеү проекттары өҫтөндә эшләйәсәк. Халыҡ-ара йәш ғалимдар лагерында ҡатнашыу өсөн Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзаһы булған биш дәүләттән бөтәһе 70 ҡатнашыусы һайлап алынған, тип хәбәр иттеләр Өфөнөң Мәғариф идаралығынан.

Самира ике йыл рәттән физика һәм астрономия буйынса Бөтә Рәсәй мәктәп уҡыусылары олимпиадаһы финалдарында ҡатнаша, астрономия буйынса Бөтә Рәсәй уҡыусылар олимпиадаһы призёры. Шулай уҡ уның портфолиоһында физика һәм астрономия буйынса бер нисә олимпиаданың дипломдары бар. Уңыштар теләйек уға!

*ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ*

# ӘҘЕРЛЕКЛЕ БУЛЫУ МӨҺИМ



**Башҡортостан Башлығының РФ Милли гвардияһы ғәскәрҙәре менән үҙ-ара эш итеү буйынса кәңәшсеһе Артур Йомағужин һүҙҙәренсә, пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәрен әүҙем тулыландырыу дауам итә.**

"Дроноводтар подразделениеларына булдыҡлы ир-егеттәр яҙыла, уларҙы фронтта көтөп алалар. Әлбиттә, бер теләк кенә аҙ, ниндәйҙер әҙерлек тә кәрәк. Мәҫәлән, урында ориентирҙар буйынса хәрәкәт итә йәки микросхемаларҙы иретеп йәбештерә белеү бик мөһим. Әммә контрактсы Махсус хәрби операция зонаһында БПЛА операторы булып хеҙмәт итергә ныҡлы ҡарар ҡабул иткән икән, уны барыһына ла өйрәтәсәктәр", - ти офицер.

"Ватанға хеҙмәт итеү теләге һәм Тыуған иленә һөйөү тойғоһо булһа, хәрби һөнәргә өйрәтәбеҙ. Хәҙерге быуын компьютерҙарҙы, башҡа гаджеттарҙы нисек ҡулланырға кәрәклеген яҡшы белә. Йәштәрҙең хәтере шәп, күҙҙәре үткер, бармаҡтары йылдам. Шуға ла уларға оҫта дроноводтар булып китеү өсөн сиктәр юҡ.

Шуны билдәләп үтергә кәрәк: подразделениеларҙа Башҡортостандан егеттәр, йәш патриоттар, бик күп. Улар дәртле һәм илгә хеҙмәт итергә әҙерҙәр. Һөйләшкәндә, йыш ҡына: "Миндә ҡурҡыу тойғоһо юҡ, ҡайҙа ебәрһәләр ҙә, ҡуйылған бурысты үтәргә әҙермен", - тигән һүҙҙәр ишетәм. Штурмға барырға әҙер булғандар ҙа күп. Әммә бөгөн БПЛА операторҙары талап ителә. Егеттәрҙе йыйыу һәм туплау бара, улар менән инструкторҙар эшләй, кәрәкле барлыҡ һөнәргә өйрәтәләр. Штурмлаусыларҙың - үҙ бурыстары, дроноводтарҙың - үҙҙәренеке, улар тығыҙ бәйләнештә эшләй. Шуға күрә хәрби бурыстар ҙа һөҙөмтәле хәл ителә. Ундағы хәлдәрҙе белгәнгә күрә, тураһын һөйләйем", - тип һүҙен дауам итә Артур Йомағужин.

Фронт тураһында иҫкә алғанда, ул алғы һыҙыҡта ялан оҫтаханаларында дрондарҙы үҙаллы эшләгән һалдаттар хеҙмәтен юғары баһаланы. Уларҙың оҫталығы БПЛА операторҙарына һәр саҡ ярҙамға килеүен билдәләне.

"Башҡортостанда пилотһыҙ осоусы аппараттар етештереү яйға һалынған. Бының өсөн яугирҙар республика Хөкүмәтенә һәм шәхсән Радий Фәрит улы Хәбировҡа үҙ рәхмәттәрен еткерә. Тыуған яҡтан ышаныслы һәм тикшерелгән пилотһыҙ аппараттар килә. Беҙҙең подразделениеларҙа дрондарҙың нисек эшләүен өйрәнеүсе белгестәр бар. Уларҙың иҫкәрмәләре һәм тәҡдимдәре производствола иҫәпкә алыныуы ҡыуаныслы", - ти ул.

БПЛА подразделениеларында хеҙмәт итеү тураһында тулы мәғлүмәтте башбат.рф сайтында һәм 122 телефоны буйынса алырға мөмкин. Шулай уҡ быны йәшәгән урын буйынса хәрби комиссариатта, Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 156 адресы буйынса урынлашҡан Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пункты аша ла эшләп була.

***Ҡасим ҒӘҘЕЛШИН әҙерләне.***

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Президент Владимир Путин Башҡортостандан өс кешегә Рәсәй Федерацияһының маҡтаулы исемдәрен бирҙе. Улар араһында Мостай Кәрим исемендәге фонд директоры, яҙыусының ҡыҙы Әлфиә Кәримова ла бар. Ул "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре" исеменә лайыҡ.

✓ Дәүләт башлығы указы менән төбәктәргә федераль судьялар һәм квалификация коллегияларында Рәсәй Президенты вәкилдәре тәғәйенләнде. Башҡортостанда республиканың Юғары суды рәйесе урынбаҫары итеп Кирилл Колесников тәғәйенләнде. Алина Әсәҙуллина - Башҡортостандың Юғары суды судьяһы, Алина Ильина - Ишембай ҡала суды судьяһы, Руслан Насиров Стәрлетамаҡ ҡала суды судьяһы вазифаһына билдәләнде. Башҡортостандың Юғары судында белдереүҙәренсә, судьяларҙы даими тәғәйенләү башлыса вәкәләттәр ваҡыты үтеүгә һәм уларҙы вазифала яңынан раҫлау кәрәклеге менән бәйле.

✓ Башҡортостан Башлығының "Ватан көсө" форумын үткәреү тураһында указына тейешле үҙгәрештәр индерелде, быҒаса ул майҙа үткәрелә ине, был юлы ул сентябрҙә була.Форумды ойоштороу операторы итеп Республика Халыҡ ижады үҙәге билдәләнде. Бынан тыш, форумдың ойоштороу комитеты составы үҙгәрҙе. Уға Башҡортостан Башлығының Ижтимағи-сәйәси үҫеш идаралығы начальнигы Илмир Әһлиуллин, Башҡортостандың мәҙәниәт министры вазифаһын башҡарыусы Фәнүр Шәйхисламов, Республика Халыҡ ижады үҙәге директоры Салауат Кирәев, шулай уҡ "Башҡортостан Республикаһының Муниципаль берәмектәр советы" ассоциацияһы идараһы рәйесе вазифаһын башҡарыусы, Асҡын районы хакимиәте башлығы Динис Йосопов инде.

✓ Республика Хөкүмәте вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов билдәләүенсә, 2018-2025 йылдарҙа Башҡортостанда 50 һөт фермаһы төҙөлгән һәм яңыртылған. Улар бөтә тауар һөтөнөң яртыһын етештерә. Һыйырҙар һаны буйынса (317 мең баш) төбәгебеҙ ил буйынса икенсе урынды биләй. 2025 йылда барлығы 1,5 миллион тонна самаһы һөт, шул иҫәптән 781 мең тонна тауар һөтө етештерелгә. 2030 йылға республикала был күрһәткесте 1 миллион тоннаға тиклем еткереү ҡарала, ти тармаҡ етәксеһе.

✓ Башҡортостанда 10-11 июлдә "Баҫыу көнө - 2026" күләмле республика семинары үтә. Урып-йыйыу кампанияһын башлауға старт биргән сараның урыны итеп быйыл да Өфө эргәһендәге Башҡорт дәүләт аграр университетының Уҡыу-ғилми үҙәге биләмәһе билдәләнгән. Семинарҙа ҡатнашыусылар заманса техника өлгөләре менән таныша, уларҙы эш өҫтөндә күрә, төрлө сорттарға һынау үткәрелгән 300-гә яҡын айырым майҙандарҙы ҡарап, заманса агротехнология ҡулланыу алымдарын, урындағы аграрийҙарҙың ҡаҙаныштарын баһалай аласаҡ. "Трактор-шоу", пилотһыҙ техника ярыштары ла була.

ЯИ-КӨФӨ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ



# ЯҺАЛМА ИНТЕЛЛЕКТТЫ НИСЕК ҠУЛЛАНЫРҒА?

**Яһалма интеллект (ЯИ) - кино геройы түгел, ә көндәлек тормоштағы ҡорал. Белгестәр уны ҡулланыуҙың өс төп ысулын атай: мессенджер боттары, ассистент чаттары һәм API. Һәр береһенең көслө һәм көсһөҙ яҡтары бар. Ҡайһыһы һеҙгә тура килә?**

Яһалма интеллект бөгөн һәр кемдең телефонында. Әммә күптәр әле лә уны фантастик робот тип кенә күҙ алдына килтерә. Ысынында иһә, ЯИ - беҙҙең ҡул аҫтыбыҙҙағы инструмент. Уны нисек дөрөҫ ҡулланырға?

***Беренсе юл: Мессенджер чат-боттары - етеҙ, әммә сикләнгән.***

Был - иң ябай һәм таралған вариант. Бындай боттар алдан билдәләнгән сценарий буйынса эшләй. Улар һауа торошон белергә, яңылыҡтар уҡырға йәки заказ бирергә ярҙам итә. Ҡайһы берҙәре хатта рәсемдәр ҙә яһай ала.

**Өҫтөнлөгө:** ҡулланыу еңел, яңы ҡушымталар күсерергә кәрәкмәй. Боттар тәүлек әйләнәһенә эшләй. **Етешһеҙлеге:** улар сценарийҙан ситкә сыға алмай. Әгәр мессенджерҙа техник өҙөклөк булһа, бот та эшләүҙән туҡтай.

Был ысул кафе менюһы, эш ваҡыты кеүек йыш бирелгән һорауҙарға яуап биреү өсөн иң уңайлы.

***Икенсе юл: Ассистент чаттары - шәхси аҡыллы кәңәшсе.***

ChatGPT, YandexGPT, DeepSeek, Алиса АИ, ГигаЧат - был исемдәрҙе ишеткәнегеҙ барҙыр. Нейроселтәрҙәрҙең диалог ассистенттары менән аралашыу өсөн махсус ҡушымта ҡуйырға кәрәк.

**Өҫтөнлөгө:** программалау белеме талап ителмәй. Улар ҡатмарлы һорауҙарға яуап бирә, ижади текстар яҙа, код төҙөй, документтарҙы анализлай. Әңгәмәне оҙаҡ онотмай. Ҡулланыу - бушлай. **Етешһеҙлеге:** ЯИ ҡайһы саҡ "галлюцинацияларға" - булмаған факттарҙы уйлап сығарырға мөмкин. Шуға күрә мөһим мәғлүмәтте тикшереү мотлаҡ. Бынан тыш, һәр һорауҙы ҡулдан яҙып йәки файл йөкләп ҡабаттан һорарға кәрәк. Был ысул текстар яҙыу, мәҡәләләр редакциялау, телдәр өйрәнеү өсөн иң яҡшы ҡорал.

***Өсөнсө юл: API - профессионалдар өсөн ҡеүәт.*** API (Application Programming Interface - ҡушымталарҙы программалаштырыу интерфейсы) - ЯИ-ны үҙ программаңа, сайтыңа йәки хеҙмәтеңә тоташтырыу. Был - эшҡыуарҙар, эшләп сығарыусылар һәм ҙур компаниялар өсөн уңай юл. API аша ЯИ менән бәйләнеш автоматик рәүештә бара. Мәҫәлән, интернет-магазинда тауарҙы һүрәтләү, клиенттарға шәхси тәҡдимдәр ебәреү. Был ысул ҙур күләмдә мәғлүмәт эшкәртеү һәм бизнес-процестарҙы автоматлаштырыу өсөн иң ҡеүәтле ҡорал.

***Белгестәр нимә ти?*** Нейросеть инструменттарын ошондай метафора менән аңлатырға мөмкин: чат-бот - таксиға, ассистент - шәхси водителгә, ә API - үҙ машинаңа тиң. Берәүҙәре өсөн ябай боттар ҙа етерлек, ә профессиональ эш өсөн API-ға күсергә кәрәк.

***Йомғаҡлау:*** Яһалма интеллект менән эшләү ысулын һайлау - маҡсатығыҙға бәйле. Ябай һорауҙар өсөн чат-бот, ижади эш өсөн Ассистент, ә бизнес өсөн API - иң дөрөҫ юл. Ә һеҙ ҡайһы форматты өҫтөн күрәһегеҙ?

**Рөстәм НУРЫЕВ әҙерләне.**

БЫЛ АЙҘА

# ЙӘЙ ҠЫҘЫУЫ - МАЙАЙ



**Йәй үҙәге - майайҙы ҡаршылайбыҙ. Тәмле нәмә күп булмай, тигәндәй, шундай бер йылдам, елдәй етеҙ, ҡыҫҡа, ләкин "ожмах босмағылай" ләззәтле мәл инде ул йәй: башланырға ла өлгөрмәй - әҙәм балаһын көҙгө, ҡышҡы хәстәрлектәр сорнап ала.**

Производство календары буйынса июль "иң эшлекле" ай: был айҙа 23 эш көнө булып, ни бары 8 ял көнө. Сағыштырыу өсөн июнде алып ҡараһаҡ, уның эш көнө - 21, ә ялдары - 9, августа ла эш көнө - 21, ял көндәре - 10. Майайҙың байрамдары ла юҡ, күренекле даталары менән һөнәри көндәре лә әҙ: әйтеүебеҙсә, йәй үҙәгендә байрам, артыҡ ял көндәре ҡайғыһы юҡ - көн аяҙҙа эшләп ҡалырға кәрәк! РБК Life каналы календарь исемлегенә 4 июлде юҡҡа ғына "Байрамдарҙан ял итеү көнө" тип нарыҡламағандыр, күрәһең. Етмәһә, ошо уҡ исемлектә "Баш күтәрмәй эшләүселәр" **(5 июль)** менән "Тырыштар" **(22)** көндәре лә билдәләнә икән.

Көн аяҙҙа, тигәндәй, климатолог Рита Камалова һөйләүенсә, быйылғы йәй һауа торошо тропик климатҡа тартым буласаҡ: көндәр йылы торор, ямғыр йыш яуыр. Бының сәбәбе - һуңғы ваҡытта синоптиктар телмәрендә йыш ҡабатланыусы Эль-Нино күренеше тәьҫире, тип аңлата белгес. Был - Тымыҡ океандың үҙәк һәм көнсығыш өлөштәрендәге тропик киңлектәрҙә һыу өҫтө температураһының ғәҙәттән тыш йылыныуы. Ошо һауа массаһы Урал һәм Волга буйы төбәктәренә йыш ямғырҙар килтереү ихтималлығы бирә.

Уйлап ҡараһаң, тәбиғәт бөтәһен дә үҙе көйләй: йыш ямғырҙар ҡайһы бер ауыл хужалығы эштәренә ҡамасаулаһа ла, йыл башынан республикала 80-ләп ҡоро үлән яныу осрағы һәм 5 урман янғыны теркәлгән. Мәғлүм булыуынса, БР Хөкүмәте иртә яҙҙан уҡ янғынға ҡаршы режим иғлан иткәйне. Шуға ярашлы, ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге һәм айырым һаҡланыусы тәбиғи биләмәләрҙә, юл буйҙарында, йылға һәм күл тирәләрендә, баҡсасылыҡ участкаларында, шулай уҡ ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигондарында сүпсар яндырыу, усаҡ яғыу, һүндерелмәгән көйө шырпы-тәмәке төпсөктәре ташлау, хатта тимер мискәләрҙә һәм мангалдарҙа ла ут тоҡандырыу тыйыла. Был осорҙа ауыл халҡы картуф утай, күмә, колорадо ҡуңыҙҙарын сүпләй йә ағыулай. Был һуңғыһы, әлбиттә, картуф уңышына хәүеф менән янай, аҙыҡтүлек былай ҙа пестицид, нитрат, башҡа төр ағыулы матдәләр менән етерлек "байытылғанын" яҡшы беләбеҙ.

Майайҙа халыҡ бесәнгә төшә, ә ҡала халҡы баҡса участкаларында йәшелсә-емеш үҫтерә. Был бөгөнгө ҡиммәтселек шарттарында ғаилә бюджетына һиҙелерлек өҫтәмә, файҙалы тәбиғи витамин бирә. Фермер һәм кооператив хужалыҡтар ҙа мал аҙығы әҙерләй, уңыш йыйыу осорона техникаһын барлай. 9-11 июлдә республикабыҙҙа "Башҡортостан Республикаһында баҫыу көнө" сараһы иғлан ителде. Унда ауыл хужалығы техникаһы, ватан агротехнологияһы ҡаҙаныштары күргәҙмә-семинары үтәсәк, август-сентябрҙәге уңыш йыйыу эштәренә әҙерлек торошо тикшереләсәк.

Был ай календарындағы күренекле көндәрҙең береһе - Йәштәрҙең тормош һәм һөнәри күнекмәләре көнө. Рәсәй журналистарының береһе яҙып сығыуынса, был сәйер "байрам" хаҡында, ул Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының (БМО) Генеральный Ассамблеяһы тарафынан 12 йыл элек үк иғлан ителеүгә ҡарамаҫтан, әллә ни билдәле лә түгелдер. Был дата БМО-ла эшләүсе Шри-Ланка вәкилдәре тәҡдиме буйынса йәштәр араһында эшһеҙлек проблемаһы айҡанлы борсолоу белдереү сәбәпле булдырылған. Шундай заман килеп етте: электрон технологиялар, яһалма интеллект ҡаҙаныштары йәштәргә һөнәр һайлау һәм мәшғүллек мәсьәләләрендә ниндәйҙер кәртә булып ятты. Уйлап ҡарағанда, был

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Рәсәй Хөкүмәте Өфөләге Евразия ғилми-белем биреү үҙәге Вуз-ара студенттар кампусы төҙөлөшөнә өҫтәмә аҡса бүлде. Финанслау быйыл - 2 млрд, 2027 йылда 1,6 млрд һумға арта. Федераль ярҙам эште планлаштырылған ваҡытта тамамлап, комплексты ваҡытында сафҡа индереү мөмкинлеген бирә.

✓ Бәләбәй ҡалаһында Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам итеү үҙәге асылды. Ул МХО ветерандарына һәм уларҙың ғаиләләренә һәр яҡлап ярҙам күрһәтеү өсөн комплекслы майҙансыҡ буласаҡ. Үҙәктә "Ватанды һаҡлаусылар" фондының социаль координатор кабинеты ла ҡаралған. Иркен конференц-залда эшлекле осрашыуҙар, төрлө саралар үткәреү өсөн шарттар бар. Йылы аралашыуға булышлыҡ иткән мөхит булдырыуға айырыуса баҫым яһалған.

✓ 25-28 июндә Татарстанда көрәш буйынса 15-се донъя чемпионаты һәм беренселеге уҙҙы. Ярыштарҙа донъяның 32 дәүләтенән өс йөҙҙән ашыу атлет ҡатнашты. Турнирҙа ир-егеттәр араһында - 11 комплект, үҫмерҙәр араһында 10 комплект миҙал уйнатылды. Башҡортостан спортсыһы - көрәш буйынса биш тапҡыр донъя чемпионы Артур Зөлҡәрнәев оло еңеү яуланы. Дөйөм алғанда, Артур - билбау көрәше һәм көрәш буйынса 13 тапҡыр донъя беренселектәре еңеүсеһе.

✓ Малайзияның баш ҡалаһы Куала-Лумпурҙа тай боксы буйынса донъя чемпионаты дауам итә. Дөйөм алғанда, миҙгелдең төп ярышында 114 илдән 500-ҙән ашыу спортсы ҡатнаша. Сибай ҡалаһында тыуып үҫкән муай-тай буйынса Рәсәй чемпионы Зарина Исламова Сингапурҙан һәм Гонконгтан спортсыларҙы еңеп, турнирҙың финалына сыҡты. Ике алыш та ваҡытынан алда тамамланды. Тай боксы буйынса донъя чемпионатында Рәсәй данын 13 егет һәм 11 ҡыҙ яҡлай. Йәштәр араһында донъя чемпионатында 20 бала көс һынаша.

✓ "Медиалогия" компанияһы 2026 йылдың I кварталы өсөн Башҡортостан медиаресурстары рейтингын әҙерләгән. Башҡортостандың иң күп өҙөмтә килтереү буйынса 20 киң мәғлүмәт сараһы исемлегендә беренсе урында - "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы. Цитата килтереү индексы - 69,25. Икенсе урында - 63,91 индексы менән Ufa1.ru, өсөнсөлә - Mkset.ru (48,69). Шулай уҡ ун төбәк иҫәбендә Ufatime, Ufa.rbc.ru, БСТ, Комсомольская правда - Уфа, Коммерсантъ - Башкортостан, Gorobzor.ru, "Башкортостан" ДТРК-һы.

✓ Юлсылар Стәрлетамаҡ - Белорет - Магнитогорск юлының 8 саҡрымында ремонт эштәрен тамамлаған. "Яҡын арала трассаның 15,5 километр оҙонлоғондағы участкаһын капиталь ремонтлау планлаштырыла. Артабан был трасса Өфө - Инйәр - Белорет маршрутына альтернатива булып хеҙмәт итәсәк. Уның буйынса Ишембай, Бөрйән, Белорет һәм Әбйәлил районарына ара яҡыная", - тип билдәләй республиканың транспорт һәм юл хужалығы министры Любовь Минакова.

**✓ *Ошо көндәрҙә генә РФ фән һәм юғары белем министры Валерий Фальков, хеҙмәт баҙарының башкөлләй юғары белемгә ихтыяжы юҡ, тип белдерҙе.***



үҙенсәлекле парадокс, әлбиттә. Ошоға бәйле, йәштәр менән ҡаршылыҡлы хәл килеп тыуа. Бер яҡтан, йәштәр мәшғүллеге өсөн киң мөмкинлектәр асыла: эшсе һөнәрҙәре, IT һәм заман технологиялары кадрҙар ҡытлығы кисерһә; икенсе яҡтан, эш биреүселәрҙең 93 проценты йәштәрҙең һөнәри күнекмәләре етерлек кимәлдә булмауын билдәләй. Эш биреүселәр бөгөн һөнәри күнекмәләргә генә ҡарамай, ә шарттарға тиҙ яраҡлаша алыуын, йәш кешенең үҙ фекере булыуын, теге йәки был мәсьәләгә тәнҡит күҙлегенән ҡарау һәләтен нығыраҡ баһалай. Тотош алғанда, йәштәребеҙ үҙенең прагматик йүнәлештә булыуын күрһәтә. Был уларҙың һөнәр һәм эш һайлауҙа төп өс мәсьәләнең береһе булараҡ юғары эш хаҡын беренсе урынға ҡуйыуында күренә. Шуға күрә лә күпселек компаниялар хеҙмәткәрҙәрҙе уҡытыуға һәм оҫталыҡ квалификацияһын күтәреүгә аҡса һалыуҙан бер ҙә ҡурҡмай. Вузда йәштәр күпселек осраҡта инженер һәм медицина йүнәлешен һайлаһа, колледждарҙа IT, төҙөлөш, етештереү, медицина, педагогика һөнәрҙәрен үҙ итә.

Юғарыла билдәләп кителеүенсә, шуныһы ла бар: автоматлаштырыу һәм яһалма интеллект кешене етештереү өлкәһенең көндәлек һәм ялҡытҡыс бурыстарынан ҡыҫырыҡлап сығарыуға йүнәлеш алды: кол-үҙәк операторҙары, ябай бухгалтерҙар, кассирҙар һәм һатыусылар ошо исемлектә. SMM-менеджерҙар, коучтар, нейропсихологтар, пилотһыҙ осоу аппараттары системалары буйынса белгестәр рәсми рәүештә раҫланып, яңы һөнәрҙәр рәтенән урын алды. Мәктәп тамамлаусы йәштәр БДИ һөҙөмтәләре буйынса документтарын теге йәки был уҡыу йортона тапшырғанда ошо мәсьәләләргә иғтибар итер, моғайын. Бәлки, шуныһына ла иғтибар йүнәлтеү кәрәк булыр: ошо көндәрҙә генә РФ фән һәм юғары белем министры Валерий Фальков, хеҙмәт баҙарының башкөлләй юғары белемгә ихтыяжы юҡ, тип белдерҙе. Был һуңғы йылдарҙа сәнәғәт өсөн кадрҙар әҙерләүҙә дәүләт тарафынан урта һөнәри белемде әүҙем күтәрмәләү менән аңлатыла.

Был айҙа Хәрби хәрәкәттәр ветерандары көнө **(1)**, Полиэтилен моҡсайҙарҙан халыҡ-ара баш тартыу көнө **(3)**, Диңгеҙ һәм йылға флоты **(5)**, Ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ, РФ Ҡораллы Көстәренең зенит ракета ғәскәрҙәре **(8)** көндәре, Бөтөн донъя халыҡ һаны **(11)**, Рәсәй почтаһы, Балыҡсы, Граждандар авиацияһы бортпроводниктар **(12)** көндәре, Йәштәрҙең халыҡ-ара тормош һәм һөнәри күнекмәләре көнө **(15)**, Яһалма интеллект **(16)**, Рәсәйҙә дәүләт янғын күҙәтеүе булдырылған **(18)** көндәр, Металлургтар **(19)**, Халыҡ-ара Ай **(20)**, Баҡсасылар (дачниктар) көнө **(23)**, Сауҙа хеҙмәткәрҙәре, РФ Тәфтиш органдары **(25)**, Хәрби-Диңгеҙ Флоты **(26)**, МФЦ (Күп тармаҡлы үҙәк) хеҙмәткәрҙәре **(27)**, Гепатит менән Бөтөн донъя көрәш **(28)**, Халыҡ-ара дуҫлыҡ **(30)** көндәре билдәләнә.

**Майайҙа тыуғандар:**

**7 -** башҡорт сәсәне, йырасы һәм ҡурайсы **Ишмөхәмәт (Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев)** сәсәндең тыуыуына **245 йыл** (1781-1878).

**11 -** ғалим-филолог, педагог-методист, педагогика фәндәре кандидаты, РФ юғары һөнәри белем биреүҙең почетлы хеҙмәткәре, БР халыҡ мәғарифының атҡаҙанған хеҙмәткәре **Вәкил Хажинға - 80 йәш** (1946).

**15 -** йырсы, 1967-1991 йылдарҙа Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры артист-вокалсыһы Рәсәйҙең - атҡаҙанған, БАССР-ҙың халыҡ артисы **Нажиә Аллаяроваға - 90 йәш** (1936).

**17 -** Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, С.Юлаев, "Башкортостан Республикаһы алдында күрһәткән хеҙмәттәре өсөн" ордендары кавалеры **Ноғман Мусиндың** тыуыуына - **95 йыл** (1931-2021).

**19 -** Башҡортостандың халыҡ артисы, Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы солисы **Лилиә Ишемйәроваға - 50 йәш** (1976).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# "КИЕВ РЕЖИМЫН ҠОТҠАРЫУ...

## беҙҙең планға инмәй"

**Үткән аҙнаның һуңғы көнөнә ҡарата Рәсәй Оборона министрлығы хәбәр итеүенсә, "Көнсығыш" төркөм подразделениелары яугирҙары Днепропетровск өлкәһенең Новоскелеватое торлаҡ пунктын яуланы. Был 50 кеше йәшәгән бәләкәй генә ауыл булһа ла, мөһим әһәмиәткә эйә объект ине: тап ошо урындан беҙҙең Ҡораллы көстәргә Украина Ҡораллы көстәренең (ВСУ) мөһим логистика төйөнө булып торған Покровскоеға, шулай уҡ Запорожье сиге тарафындағы Н15 трассаһы буйлап көнбайышҡа юл асыласаҡ.**

Шул уҡ ваҡытта Днепропетровск өлкәһе Богодаровка тораҡ пункты ла азат ителде. 28 июнь төнө РФ Ҡораллы Көстәре Украина территорияһын көслө ракета утына тотто. Киевтағы объекттарға һөжүмдә "Искәндәр" баллистик һәм "Цирконы" ракеталары, шулай уҡ пилотһыҙ осоусы аппараттар файҙаланылды. Ошо уҡ көндәрҙә ВСУ бер юлы үҙенең өс МиГ-29 истребителенән ҡолаҡ ҡаҡты. Тәүҙә беҙҙең идара ителеүсе "Герань-2 сикер" Николаевский өлкәһе Вознесенскиҙағы дошман аэродромына барып етеп, заданиеға осорға әҙерләнгән МиГ-29 истребителен хәрби комплекты менән бергә юҡ итте. Күп тә үтмәй, шул уҡ аэродромда "Герань-4" реактив ракетаһы заправкала тороусы тағы бер МиГ-тың көлөн күккә осорҙо. Аҙағыраҡ дошмандың өсөнсө МиГ-29 истребителенең Полтава өлкәһе күгендә шартлауы мәғлүм булды.

Рәсәйҙең тылдағы объекттарына, шул иҫәптән Мәскәү нефть эшкәртеү заводына һөжүм итеү өсөн Вашингтон Киевҡа разведка мәғлүмәттәре биргән һәм Трамп "шартлау һөҙөмтәләре менән бик ҡәнәғәт булған", тип яҙа Financial Times гәзите. Әйткәндәй, Дональд Трамп Рәсәйгә мөнәсәбәтендә тағы ла тактикаһын үҙгәртә. Мәҫәлән, ул Рәсәй нефтенә ҡаршы санкцияны яңынан ҡайтарырға ниәтләй. Был хаҡта ул Францияла булып үткән G7 саммитында белдергән. АҠШ президентының бындай ҡылығын сәйәсмән Александр Ионов Америка администрацияһының эске проблемалары менән аңлата. Беренсенән, Конгресҡа аралыҡ һайлауҙары яҡынлаша; икенсенән, Иран компанияһы буйынса Трамптың абруйы етди юғалтыуға дусар ителде. 28 июндә АҠШ президенты Тегеранды утты туҡтатыу килешеүен боҙоуҙа ғәйепләп, Иранға ут асты һәм Ислам республикаһының радарҙарын, дрон һәм ракета складтарын шартлатыуҙары хаҡында белдерҙе. Иран армияһы (КСИР) яуап уты асып, Кувейт һәм Бахрейндағы америка хәрби базаларын сәпкә алды.

24 июндә АҠШ Сенаты Иранға ҡарата президент вәкәләттәрен сикләү тураһында резолюция ҡабул иткәйне. 50:48 тауыш менән был документ президентҡа Иран Ислам Республикаһына ҡаршы хәрби хәрәкәттәрҙән Америка ҡораллы көстәрен сығарырға ҡушты һәм Конгресс рөхсәтенән тыш һуғыш башлауҙы тыйҙы. Өҫтәүенә, был мәсьәләлә Трамп фирҡәҙәштәренән дүрт республикасы демократтарға ҡушылды. Хәҙер Трамп теге йәки был илгә һуғыш башлар алдынан ниәтен закон сығарыусылар менән яраштырырға бурыслы.

Һәр хәлдә, Трампҡа "күңелһеҙләнергә" тура килмәйәсәк: әлеге "етәү" саммитында ул Украина конфликты буйынса Рәсәйгә баҫымды көсәйтергә уйлауын һәм Донбасс буйынса былтыр Анкориджда һөйләшелгәнде ҡайтанан ҡарау ихтималлығын белдерҙе. Шуға ҡарамаҫтан, ошо көндәрҙә РФ Президенты Владимир Путин, Ирандағы "ҡыҙыу хәлдәр" баҫылғандан һуң Рәсәй Мәскәүгә АҠШ делегацияһын көтә һәм был осрашыуҙа украин мәсьәләһе буйынса ҡайһы бер проблемалар ҡараласаҡ, тип белдерҙе.

Рәсәйҙең эске баҙарында яғыулыҡ менән килеп тыуған хәл буйынса кәңәшмәлә (28 июнь) Путин илдең эре нефть эшкәртеү заводтарының сикке кимәлдә көсөргәнешле эшләүе, бәләкәй заводтарҙың да эшкә ҡушылыуы, ә зыян күргән предприятиеларҙа ремонт эштәренең тиҙләтелеүе һәм июлдә яғыулыҡ етештереүҙең артасағы, уға хаҡтарҙың иҡтисади нигеҙлеген һаҡлау хаҡында һөйләне. Илдә бензин запасы 1,7 млн тонна - былтырғы кимәлдә, тине Президент, ләкин баҙарҙа сираттар булып тора йә кәрәкле марка табылмай. Иҡтисад белгесе Игорь Юшков әйтеүенсә, Украина һөжүменән һуң зыян күргән нефть эшкәртеү заводтарын ремонтлауҙа кәрәкле ҡорамалдарҙы Рәсәй үҙе лә етештерә, өҫтәмә рәүештә улар Азия илдәренән алына. Илдә яғыулыҡ менән ваҡытлыса ҡытлыҡ хәле ремонт эштәрен теүәлләүҙе тиҙләтеүгә лә бәйле.

28 июндәге интервьюһында Владимир Путин илдәге һәм халыҡ-ара хәлдәр, шулай уҡ Махсус хәрби операция барышы хаҡында мөһим белдереүҙәр менән сығыш яһаны. ВСУ-ның ил эсенә һөжүме һөҙөмтәләрендә килеп тыуған проблемалар артыҡ ныҡ хәүефле түгел, зыян күргән объекттар тергеҙелә бара, тине ул. Владимир Путин шулай уҡ Украина буйынса һөйләшеүҙәр барышына яңы тәҡдимдәр килеүен билдәләне. Атап әйткәндә, ул Украинаның хәрби хәрәкәттәрҙе дүрт төбәк - Херсон һәм Запорожье өлкәләре, шулай уҡ Луганск һәм Донецк Республикалары менән сикләү хаҡындағы тәҡдимен етди фекер түгел, ә хәйлә, тип ҡылыҡһырланы. Әгәр беҙ быға риза булһаҡ, ВСУ-ға үҙ ғәскәрен башҡа өлкәләрҙән алып, ошо дүрт төбәккә күсерергә мөмкинлек кенә бирәсәкбеҙ, ләкин ВСУ-ның ҡотолғоһоҙ рәүештә һалдаттар һаны көрсөгә кисереүе шарттарында был тәҡдим уларҙы ҡотҡармаясаҡ, ә Киев режимын ҡотҡарыу иһә беҙҙең планға инмәй, тине Рәсәй Президенты.

- Белоруссияға украин конфликтына йәлеп ителеү хәүефе янай, ләкин фронт һыҙығының йәйелеүенә юл ҡуймаҫ өсөн Минск үҙенең бөтөн дипломатик мөмкинлектәрен файҙалана һәм Рәсәй - Украина конфликтында аралашсы ролендә ҡалырға тырыша.
- "Европа Рәсәй менән ҙур һуғышҡа иҫәп тота... 7-8 июлдә НАТО-ның Анкарала буласаҡ саммитында Төньяҡ Атлантика альянсының Рәсәй менән конфликт тураһында планы ҡаралыуы ихтимал", - тип яҙа "Известия" гәзите сайты.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә үткән Йәштәр байрамы барышында "Йәшел Башҡортостан" төбәк йәмәғәт ойошмаһы ун йыллыҡ юбилейын билдәләне һәм "10 000 изге орлоҡ" акцияһын үткәрҙе. Ойошма рәйесе Гөлнара Хәмиева билдәләүенсә, үткән тиҫтә йыл эсендә власть органдары, бизнес һәм 250 меңдән ашыу граждан ҡатнашлығында 26 миллион төп ағас ултыртылған, 110 тематик аллея барлыҡҡа килгән, йылға-күлдәргә 587 меңдән ашыу ҡиммәтле балыҡ төрҙәре ебәрелгән.

✓Өфөлә бишенсе саҡырылыш ҡала советының сираттағы 64-се ултырышында яңы урамдарҙың исемдәре раҫланды. Шулай итеп, ҡала урамдарына Павел Качкаев, подводник Афанасьев, Герой Үлмәҫ Шакиров, Герой Анатолий Квашнин исемдәре биреләсәк, Студенттар скверы барлыҡҡа киләсәк. Яңы урам исемдәрен һайлау буйынса ҡарар ҡала халҡының фекерҙәренә таянып ҡабул ителгән.

✓Өфө дәүләт нефть техник университеты Ҡытай нефть университеты һәм Пекин тел һәм мәҙәниәт университеты менән үҙ-ара килешеү тураһындағы өс яҡлы меморандумға ҡул ҡуйҙы, тип хәбәр итәләр баш ҡала вузынан. Һүҙ телде, тарихты һәм мәҙәниәтте тәрән өйрәнеү менән бергә ҡаҙылма байлыҡтар ятҡылыҡтарын разведкалау өлкәһендә белгестәр әҙерләү тураһында бара. Бындай кадрҙар әҙерләү "Бер билбау һәм бер юл" проекты маршруттары буйлап эшләгән компаниялар өсөн бик мөһим.

✓Баш ҡала хеҙмәттәре автомобилселәрҙән айырыуса иғтибарлы булыуҙарын һәм юл билдәләре талаптарын үтәүҙәрен һорай. Өфө хакимиәте мәғлүмәттәре буйынса, 1 июлдән, автобустарҙан тыш, йөк автотранспортының хәрәкәте тыйыла: Затон күперендә (ҡаланан сыҡҡан ерҙә), Дим күперендә (ике йүнәлештә лә). Был күперҙәрҙең торошона бәйле ҡабул ителде.

✓Өфөләге БПЛА һөжүменән зыян күргән Ғафури урамындағы 54-се йортта ремонт эштәрен 31 октябргә тиклем тамамлау планлаштырылған. Был хаҡта республика Хөкүмәтенең аҙналыҡ кәңәшмәһендә баш ҡала хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Шәрипов хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, йортто капиталь ремонтлау буйынса юл картаһы Өфө хакимиәте тарафынан раҫланған. Аҡса ҡала бюджетынан бүленә.

✓Баш ҡалала балалар баҡсаһы өсөн түләү үҙгәрә. Үҙгәрештәр индерелгән документҡа 18 июндә баш ҡала хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Шәрипов ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, 2026 йылдың 1 июленән балалар баҡсаһы өсөн көнөнә 192 һум түләргә кәрәк. Шуны билдәләп үтергә кәрәк: Премьер-министр Андрей Назаровтың ҡарары буйынса, ағымдағы йылда хаҡ һуңғы тапҡыр арттырыла, сөнки республика Хөкүмәте раҫлаған иң юғары түләү билдәләнде.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

## ПЕДАГОГ ҺҮҘЕ



Константин УШИНСКИЙ

# БАЛА ТӘРБИӘҺЕ

### Халыҡ рухы - хазина

Ошоға тиклем ниндәй генә фекерҙәр әйтелмәһен, тарихта халыҡты йәшәтеүсе берҙән-бер сығанаҡ - ул халыҡ рухы. Һәр халыҡҡа тарихта айырым йөкләмә билдәләнгән. Һәм әгәр теге йәки был халыҡ йөкләмәһен үтәү бурысын онота икән - ул йәшәйеш сәхнәһенән китергә тейеш: уның башҡаса кәрәге ҡалмай. Тарих ҡабатланмай. Рухы булмаған халыҡ йәнһеҙ тән, ундай тәндәр, йәшәйеш ҡанундары буйынса үҙенсәлеген һаҡлаған башҡа тәндәр эсендә тарҡалыу һәм юҡ ителеүгә дусар була.

Халыҡ үҙе йәшәгән саҡта тәбиғәт ҡанундарына буйһона, йәшәүҙән туҡтаһа, фән ҡанундарына тороп ҡала. Ә фән бөтә халыҡтарҙы ла бер ҡалыпҡа һалып өйрәнә.

Халыҡ рухы дәүләттең тарихи йәшәйешендә берҙән-бер сығанаҡ икән, тимәк, айырым кешеләр ҙә үҙенең ижтимағи эшмәкәрлеге өсөн көстө ошо сығанаҡтан ала. Шулай булғас, йәмәғәт тәрбиәһе, ижтимағи йәшәйештең иң мөһим шарттарының береһе булараҡ, яңынан-яңы быуындар үҙенән алдағы быуындар менән бәйләнеште халыҡ рухы аша алып барырға тейеш. Һәр кешене йәмғиәт ағзаһы булараҡ тәрбиәләгән саҡта, уны ошо йәмғиәт менән бәйләп торған рухҡа иғтибар итмәү мөмкинме һуң?

Кешелә халыҡ рухы көслөрәк булған һайын ул рух талаптарын ныҡыраҡ аңлай, бөйөк шәхестәрҙең эшмәкәрлеген аңлау өсөн кеше үҙендә лә рух орлоғо йөрөтөргә тейеш.

Кешелә халыҡ рухын үҫтереү һәм ныҡытыу маҡсатын ҡуйған йәмәғәт тәрбиәһе бер үк ваҡытта уның аңын һәм зиһенен дә үҫтерә. Тимәк, айырым кеше генә тәрбиәләнмәй, ә тотош халыҡтың үҙаңы тәрбиә ала һәм йәмғиәт үҫешенә, уның теленә, әҙәбиәтенә, ҡанундарына, бер һүҙ менән әйткәндә, тотош тарихына ҡеүәтле һәм ыңғай йоғонто яһай.

Йәмғиәт тәрбиәһенең төп нигеҙе - ғаилә тәрбиәһе. Сөнки бала ғаиләлә ата-әсәһенең холоҡ-фиғелен үҙләштерә һәм уларҙы артабан камиллаштырыуға нигеҙ ала.

Бындай тәрбиә алған яңы быуындар үҙ халҡының тарихи холоҡ-фиғелен һаҡлай һәм уны артабан үҫтерә.

Тәрбиә эшендә тәрбиәләүселәргә йыш ҡына ғаилә ағзаларынан күскән етешһеҙлектәр менән осрашырға тура килә. Ләкин был тотош халыҡтың булмышында ятҡан холоҡ-фиғелгә ҡағылмай.

Тарихи яҡтан формалашҡан һәр халыҡ - Алла ижадының иң күркәм емештәренең береһе, тәрбиәгә иһә ошо бай һәм саф сығанаҡтан файҙаланырға кәрәк.

**(Дауамы. Башы 24-25-се һандарҙа).**

## ТУҒАН ТЕЛЕМ...

**Туған телебеҙҙә иркенләп һөйләшеп йөрөгән, әммә махсус тел ғилеме өйрәнмәгән яҡташтарыбыҙ араһында көнкүрешебеҙҙә ҡулланған бик күп һүҙебеҙҙең тамырын белмәүселәр аҙым һайын. "Фәлән һүҙ ҡайҙан килеп сыҡҡан?" - тип берәй милләттәшеңдән һораһаң, күп кенә осраҡта "Әллә, белмәйем..." тигән генә яуап ишетәһең. Бына шул юҫыҡта үҙемдең миҫалдарымды килтереп, бер килке әңгәмәләшеп алмаҡ булдым әле. Бәлки, күптәргә былар ҡыҙыҡ та булып тойолор...**

# БЫЛ ҺҮҘҘӘРҘЕҢ ТАМЫРЫ ҠАЙҘАН?

Әйтәйек, ниндәйҙер сәбәп менән (ҡаты әйбергә бәрелеп, йә иһә кемдер семетеп) берәй еребеҙ кинәт кенә ауыртһа, "әлиммм", тип ҡысҡырып ебәрәбеҙ (бәғзеләр бер аҙ урыҫсараҡ "ой" тип әйтә). Ауыртыу мәлендәге ым формаһында ҡулланған "әлим"дең, башҡа бихисап һүҙҙәр һымаҡ уҡ, динебеҙ менән бергә ғәрәпсәнән килеп ингән икәнлеген күптәр белмәй. "Әлим" беҙҙең телгә "ауыртҡа" тип тәржемә ителә. Изге Ҡөрьәндә лә ниндәйҙер бер оло гонаһ өсөн вәғәҙә ителгән ғазапты "ғаҙаабун әлим" ("мучение болезненное") тип телгә алған һүҙбәйләнештәр бар.

Шулай уҡ, оло йәштәге кешеләрҙең барыһы ла тағы бер әйтемде беләләр. Элегерәк берәй наҙан кеше хаҡында: "Ул әлифте таяҡ тип тә белмәй бит", - ти торғайнылар. Хәҙерге ваҡытта бөтөнләйгә уҡый-яҙа белмәгән кеше булмағанғамылыр, һуңғы осорҙар уны әллә ни ишеткәнем юҡ. "Таяҡ" тигән һүҙ һәр кемгә таныш. Ә бына "әлиф"те мәҙрәсәләрҙә, шулай уҡ башҡа уҡыу йорттарында ғәрәп телен махсус уҡығандар, өйрәнгәндәр генә белә. Бында - ғәрәби алфавиттағы иң тәүге "Әлиф" (А, Ә) хәрефе күҙ уңында тотола. Уның ғәрәпсә яҙылышы - "I", ысынлап та, вертикаль хәлдә торған бер таяҡты хәтерләтә. Боронғо мәҙрәсәләрҙә уҡыған шәкерттәребеҙ, енелерәк өйрәнеү маҡсатында ла уны "әлеп - таяҡ" тип хәтерләп ҡалған булһа кәрәк. "Хатта бер хәреф тә белмәй ул", тигән һымағыраҡ мәғәнә биреп, наҙан кешеләргә ҡарата бәғзе бер үткер теллеләр сығарған әйтемдер был, моғайын. Шуны ла әйтеү кәрәк, ата-бабаларыбыҙ бик борондан уҡыу-яҙыуҙы яҡшы белеүе менән айырылып торған, әммә аралырында наҙандар ҙа булғандыр...

Мәктәпкә барғас та, беренсе синыфта уҡый башлаған тәүге китабыбыҙ ни өсөн "Әлифба" тип аталғанын беләмгәндәр ҙә бар. Ғәрәп алфавиты "әлиф", "бә", "тә", "ҫә"... тип башланып китә (һәр хәрефтең айырым уҡылышы бар). Һәр кемдең күңеленә яҡын булған "әлифба" һүҙе боронғо олатай, өләсәйҙәребеҙ өйрәнгән ана шул алфавиттың иң тәүге ике хәрефенән тора ла инде.

"Аҡыл" һүҙенең дә ғәрәптән күскәнлеген беләйек. Беҙҙең телдә үҙгәртелмәй тиерлек һаҡланған был һүҙ урыҫсаға "разум" тип тәржемәләнә. Бынан тыш, ныҡ иҫереп киткән кеше хаҡында "ләйәҡыл" тигән һүҙбәйләнеште йыш ҡулланабыҙ. Ни өсөн мин уны "һүҙбәйләнеш" тип атаным: сөнки ғәрәпсәнән һүҙмә-һүҙ тәржемә иткәндә "лә йәҡыл" - "ул үҙ аҡылында түгел" (урыҫсаһы - "он не соображает") тигәндә аңлата.

Бала саҡтан оло кешеләрҙең кемдер хаҡында "Фәлән әбейҙең ҡиәмәтлек улы (йә ҡыҙы)" тигән һүҙҙәрен ишетеләй торғайным. Хәҙерге йәштәрҙең күбеһе был хаҡта ла белмәүе бар. Динебеҙҙе өйрәнә башлағас, "Ҡиәмәт көнө" тигән төшөнсә менән таныштым. Ҡасандыр мотлаҡ киләсәк был көндө халыҡта Ахырызаман (конец света) тип тә әйтәләр. Был төшөнсә "ҡиям" тигән ғәрәп һүҙенән "аяғөҫтә тороу" тигәндә аңлата. Был фани донъяның мөҙҙәте бөткәс ("фани" - ғәрәпсәнән урыҫ теленә "исчезающий" тип тәржемәләнә), Ер йөҙөндә элек йәшәп киткән барлыҡ кешеләр бер көндә Аллаһы Тәғәлә тарафынан терелтелеп, тороп баҫасаҡ. Әлеге "ҡиәмәтлек ул йә ҡыҙ" менән ана шул "Ҡиәмәт" һүҙе араһында ниндәй бәйләнеш бар икән, тип уйлай торғас, киләһе һығымтаға килеүе лә ауыр түгел. Борон, Ислам ҡанундары буйынса йәшәгән ата-олатайҙарыбыҙ, ауырыу, аслыҡ йә һуғыш һымаҡ һәр төрлө сәбәп арҡаһында үкһеҙ етем ҡалған балаларҙы уллаштырып алыу яғын ҡараған. Ҡараусыһыҙ ҡалған баланы тәрбиләп үҫтергән өсөн оло сауап яҙылып, Ҡиәмәт көнөндә ана шуның әжерен (вознаграждение) Аллаһы Тәғәлә ҡайтарасағын яҡшы белгән боронғолар. Бына шуға күрә лә ата-бабаларыбыҙ үҙҙәренә тәрбиәгә алған сит кешенең балаһын "ҡиәмәтлек" тип атаған булһа кәрәк. Минең Мөхәммәтйән ҡартатайым (әсәйемдең атаһы) егерменсе-утыҙынсы аслыҡ йылдары ата-әсәһеҙ ҡалған бер ҡыҙҙы һәм бер улды ҡарап үҫтергәне хаҡында әсәйемдән ишетеп белә инем. Утыҙ өсөнсө йыл, "батраҡ малай тота" тип кемдендер ошаҡ яҙыуы сәбәпле, хатта төрмәгә китеүҙән дә көскә ҡотолоп ҡалған ҡартатайым. Улы Мостафа һуғышта һәләк булған, ә ҡыҙы Зәбихә инәй менән әсәйем ғүмерҙәренең аҙағына тиклем бер туған апалы-һеңлеле һымаҡ берәһен яҡын күреп, ҡатнашып йөшәнеләр. Хәҙерге тормоштан айырмалы, сит баланы бағыусыларға, әлбиттә, ул саҡта бер ниндәй ҙә түләү ҡаралмаған. Дин юлында булған боронғо ата-бабаларыбыҙ бындай изге эштәрҙе Аллаһы Тәғәлә ризалығын алыу маҡсатында эшләгән, үҙҙәренең Ҡиәмәт көнөн хәстәрләгән, тип аңлау кәрәктер.




"Әхирәт" тигән төшөнсә лә халыҡыбыҙҙа киң таралған. Башлыса ҡатын- ҡыҙҙар ҡуллана был һүҙҙе. Ир-ат араһында әллә ни таралмаған. Шулай ҙа бала сағымда бәғзе бер малайҙарҙың үҙенең дуҫын "әхирәт" тип атағанын ишеткәнем булды. Ислам динендә "Ахирәт" төшөнсәһе - Ҡиәмәт көнөнән һуң башланасаҡ ахырғы (аҙаҡҡы), йәғни, мәңгелек тормош тигәнде аңлата. Башҡортса - урыҫса һүҙлектә әлеге "әхирәт" һүҙе "задушевная подруга, до конца жизни, навечно" тип тәржемәләнә. Әлеге лә баяғы бала саҡта, йәш ваҡыттарҙа бер-береһенә тоғролоҡ вәғәҙә итеп йөрөгән яҡын дуҫтарҙың - "Ахирәткә тиклем" айырылмаҫҡа вәғәҙәләшеп, әшнәләшеп йөрөгән боронғолар ҡулланған ғәрәп һүҙе инде был да, әлбиттә...

Телебеҙҙән төшөп ҡалып, онотола башлаған тағы бер төшөнсә - "йәмәғәт" һүҙе. Был ғәрәп һүҙенең урыҫ телендә "общество" тип яңғырағанын һәммәбеҙ белә, ҡуллана ла. Әммә, ир - ҡатының, ҡатын - ирен тап ана шулай тип атауын һуңғы йылдар ифрат та һирәк ишетәбеҙ. Ысынлап та, ҡатын йә ир нисек бөтөнләй йәмәғәт булып киткән икән? Ошо төшөнсәне лә халҡыбыҙҙың борондан дин юлында булғанлығы, мотлаҡ намаҙ уҡығанлығы менән аңлатыу кәрәктер. Бәйғәмбәребеҙҙең (с.ғ.с.) "Йәмәғәт менән уҡылған намаҙ яңғыҙ уҡығанға ҡарағанда егерме ете тапҡырға сауаплыраҡ", тигән риүәйәте бар. Намаҙҙа имамдан тыш тағы бер кеше була икән - ул йәмәғәт менән уҡығанға һанала. Милләттәштәребеҙ ҡасандыр өйҙәрендә үҙҙәренең хәләл ефеттәре менән бергә (йәмәғәте менән!) ошо ғибәҙәт төрөн аткарып, Раббыбыҙҙан оло сауап өмөт итеп йәшәгән, тип аңлайыҡ быныһын да...

Һиһәйәт, күптәребеҙ яратмаған бер һүҙ - "араҡы". Был атама ғәрәпсәнән - "араҡа" тигән ҡылымдан килеп сыҡҡан булһа кәрәк ("түгеү, түгергә" тип тәржемә ителә). Бик боронғо ата-бабаларыбыҙҙың хәмергә ҡырҡа кире ҡарашта булыуы менән бәйлелер был, тип һанайым. Мөхәммәт (с.ғ.с.) өммәтендә, йәғни мосолман булып ғүмер иткән ҡартатайҙарыбыҙҙың ҡарталары әҙәм балаларын тилертә, алйотландыра торған шайтан эсемлеген тап ана шулай "түгә торған нәмә", тип һанағандыр, тип фаразлайым. Ҡөрьән Кәрим индерелә башлағас, күпмелер ваҡыттан Аллаһы Тәғәлә Үҙенең илсеһе Мөхәммәт с.ғ.с аша хәмерҙе ҡәтғи тыйыусы аятты ла төшөргән. Бынан алда ғәрәптәр араһында эскелек тигән нәмә лә таралған була. Әммә әлеге аятты ишетеү менән Бәйғәмбәрҙең с.ғ.с. замандаштары - иман килтереүселәр, йәғни мосолмандар барыһы ла өйҙәрендә булған иҫерткес эсемлектәрҙе тышҡа сығарып, түгә башлаған. Хатта ҡала урамдарында шарап йылғалары барлыҡҡа килгәнлеге хаҡында бер уҡығайным. Әйткәндәй, "Беҙ - Мөхәммәт өммәтенән", тибеҙ. Барыбыҙ ҙа киң ҡулланған "өмә" һүҙе лә ана шул "өммәт"тән (халыҡ, төркөм) килеп сыҡҡан да инде. Кешеләр күмәкләшеп башҡарған эште "өмә" тип атайбыҙ, шәмбе көнө өмәләр яһайбыҙ.

Бына ошо һанап киткән һүҙҙәребеҙҙе, һүҙбәйләнештәребеҙҙе милләттәштәремә тәфсирләп биреүҙе кәрәк тип таптым ("тәфсир" ғәр. - толкование).

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

✓ **Һәр бер олоҫта башҡорттарҙың үҙҙәренең араһынан бер йә бер нисә старшина һайлап ҡуйыла. Һәр старшинаға Ырымбур губернаһы канцелярияһынан писарь тәғәйенләнә.**



ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ГЕОРГИ БАШҠОРТТАР ТУРАҺЫНДА

**Башта автор тураһында белешмә. И.Г. Георги 1729 йылда Трептов ҡалаһы янындағы ҙур булмаған Ваххгольцхаген ҡаласығында, протестант динле рухани ғаиләһендә тыуған. Штеттин ҡалаһындағы урта мәктәпте тамамлағас, үҫмер егет Упсаль университетында химия, медицина, минерология, ботаника, география фәндәрен тәрәндән өйрәнә. Университетты тамамлағандан һуң, үҙенең тыуған ҡалаһына фармацевт булып ҡайта. 1770 йылда Георгиҙы Петербург Фәндәр академияһына академик экспедицияларҙа ҡатнашырға саҡыралар. Ул И.П. Фальк менән берлектә, бер нисә йыл буйы Рәсәй төбәктәре буйлап халыҡтарҙың тарихын, мәҙәниәтен өйрәнергә ғилми экспедицияға сыға. Башҡортостанда ла булырға тура килә. Башҡорт халҡын ентекләп өйрәнгәндән һуң, Георги, үҙенең ғилми эштәре араһына "Башҡорттар" исемле очеркын да индерә.**

"Башҡорттар үҙҙәренә шундай исем бирһә, нуғайҙар ҙа уларҙы башҡорт тип атаған. Үҙҙәренең аңлатыуынса, был исем ҡортсо (бал ҡорто атамаһынан), ә нуғайҙар баш бүре һүҙенән килеп сыҡҡан, тип иҫбатлай. Ҡырғыҙҙар уларҙы истәк, йә булмаһа, үтәк тигән. Улар үҙҙәрен нуғай тоҡомонан тип иҫәпләй; ҡайһы бер яҙыусылар башҡорттарҙы боронғо булғарҙарҙан килеп сыҡҡан тип тә раҫлай. Әбүл Ғази Булғарияны Дәште Ҡыпсаҡ тип атай. Ҡыпсаҡ олоҫо Башҡортостанда хәҙер ҙә бар, ул иң ҙуры.

Тыштан ҡарағанда, улар татарҙарға *(төркиҙәргә - **Тәрж. иҫк.**)* бигүк оҡшап етмәгәндәр. Ҡарттар йәшәгән ерҙәрен Башҡорт, йә Пашҡатыр ере тип атай, был боронғо Булғар еренең бер өлөшө. Боронғо заманда улар үҙҙәренең хандары етәкселегендә Көньяҡ Себер буйҙарын унын сиктәренә тиклем гиҙеп йөрөгән. Ләкин, Себер хандары уларҙы ҡыҫырыҡлағанға күрә, хәҙерге ерҙәренә килеп етеп, унан Волга һәм Урал йылғалары буйҙарына тиклем таралып, Ҡаҙан ханлығы аҫтында йәшәй башлаған.

Хәҙерге Башҡортостан Урал тауҙарының көньяғын, Ағиҙел буйҙарын, Кама, Волга менән Урал йылғаһы арауығын биләй, тимәк, уға Ырымбур губернаһының көнбайышында Өфө һәм көнсығышта Исәт провинциялары инә. Был таулы һәм уңдырышлы тигеҙлектәре булған ерҙәрҙә урмандар, балыҡлы йылға-күлдәр күп. Ул электән Ҡаҙан, Өфө, Себер һәм Нуғай даруғаһына бүленгән. *(Георгиҙың Өфө - Уфская даруғаһы яңылыш бирелгән, унын урынына Уса - Осинская даруғаһы булырға тейеш - **Тәрж. иҫк.**).* Рус дәүләте батшаһы Иван Васильевич Ҡаҙан батшалығын ҡыйратҡандан һуң, башҡорттар үҙ теләктәре менән Рәсәйгә буйһонды: унан һуң ҡырғыҙҙарҙан *(ҡаҙаҡтарҙан. - **Тәрж. иҫк.**)* һаҡланыу өсөн Өфө ҡалаһын төҙөргә ҡушылды.



Ул саҡта башҡорттар көсһөҙ ине, әммә улар тиҙҙән рәтләнеп китте һәм үҙҙәренең йәмғиәтенә фин һәм татар сығышлы кешеләрҙе лә ҡабул итеп, ярайһы уҡ көсәйә бирҙе, һуңғылары типтәр тип нарыҡланды. Ошонан һуң улар йыш ҡына Рәсәй дәүләтенә ҡаршы баш күтәрҙе, бигерәк тә 1676, 1708, 1735 йылдарҙа. Ихтилалдар ваҡытында улар бик үҫал булдылар, тирә-яҡтағы урындарҙы тар-мар иттеләр. Дәүләт тарафынан уларға ҡаршы күрелгән саралар һәләкәтле булды, уларҙың хәле бик нык хөртәйҙе. Шуға ҡарамаҫтан, иркен ерҙәре күп булыуы сәбәпле һәм йәшәү рәүештәренә ярашлы, улар тиҙ арала яҡшыраҡ йәшәй башланы.

1741 йылда, был халыҡтың баш күтәреүе баҫтырылғас, Башҡортостан сиктәрендә һәм унын эске өлөшөндә ҙур булмаған ҡәлғәләр төҙөлә, уларҙың ҡоймалары һәм диуарҙары ағастан ғына булһа ла, атлы башҡорт һөжүмдәрен кире ҡағыу мөмкинлеген бирә. 1774 йылғы һуңғы болғаныш шайкаһында ҡатнашып, үҙҙәренә насар мөнәсәбәт һәм бәхетһеҙлек килтерһәләр ҙә, яуыздарҙы юҡ иткәс, барыбер баш һалырға мәжбүр булдылар.

Һәр бер олоҫта башҡорттарҙың үҙҙәренең араһынан бер йә бер нисә старшина һайлап ҡуйыла. Һәр старшинаға Ырымбур губернаһы канцелярияһынан писарь тәғәйенләнә, ғәҙәттә, ул мишәрҙәрҙән була, ул указдарҙы һәм башҡа нәмәләрҙе уҡып ишеттәрә һәм аңлата, уларҙың үтәлеүен күҙәтә. Барыһы 34 олоҫ булып, 1770 йылда 27 000 ғаилә теркәлгән. *(Санкт-Петербургта 2007 йылда баҫылған китапта бер ни тиклем үҙгәртелгән мәғлүмәт бирелгән: "Байтаҡ уҡ ваҡыттарҙан бирле уларҙың хандары юҡ; болалар осоронда дворяндары ҡырылып бөткән. Улар хәҙер Рәсәй подданныйҙары булып тора. Нуғай һәм себер башҡорттарына бүленәләр. Тәүгеләре Өфө наместничествоһында, һуңғылары Уралда, Исәт провинцияһында йәшәй. Олоҫтарға бүленгәндәр, улар аймаҡтарҙан тора. Һәр олоҫтоң үҙ старшинаһы һайлап ҡуйыла, хөкүмәт уларға писарь беркетә, ул үҙенә күрә прокурор ролен дә үтәй. 1770 йылда нуғай башҡорттарының 23 882 ғаиләһе булһа, себер башҡорттарының һаны кәмерәк. Уларҙан башҡа Пермь наместничествоһында 1000 тирәһе башҡорт ғаиләһе бар").*

Башҡорттар йөҙгә татарҙарға оҡшай, ләкин, башлыса, яҫыраҡ йөҙлөләр. Кәүҙәгә лә Ҡаҙан татарҙарынан йыуаныраҡ һәм мыҡтыраҡтар. Күбеһенең ҡолаҡтары ҙур, күҙҙәре бәләкәй, ирҙәренең яртыһынан күберәгенең һаҡалдары һары. ***Улар тәбиғәт тарафынан иҫ киткес аҡылға эйә, әммә уны ҡуллана белмәйҙәр. Уларға шулай уҡ үҙһүҙлелек, саялыҡ, ышанмаусанлыҡ, ҡырыҫлыҡ та хас. Шул яғы менән ҡурҡыныс был халыҡ...***

Телдәре татар теле кеүек үк *(бында төрки тел хаҡында әйтелә. - **Тәрж. иҫк.**)*, әммә ул ҡаҙанлылар теленә бигүк оҡшамаған. Улар, мосолмандар булараҡ, уҡый беләләр һәм мәктәптәре бар, әммә бының ошо ҡырыҫ халыҡҡа әллә ни файҙаһы юҡ; уҡыу илке-һалҡы алып барыла, сөнки улар уҡытыусыларын да, руханиҙарын да үҙҙәре араһынан һайлап ҡуя.

Һәр ғаиләгә йән башына ҡарап һалынған һалым тәүҙә бәләкәй күләмдә аҡсалата булһа, улар шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер кимәлдә бал, кәрәҙ һәм башҡа кәрәк-яраҡ йыйып тапшырып торорға тейеш була. 1741 йылда баш күтәреүҙәр баҫтырылғас, башҡорттарға ла, казактар кеүек, ил сигендә хеҙмәт итеү, походтарҙа ҡатнашыу, хеҙмәткә үҙ аттары, кейем-һалымы, ҡорал кәрәк-яраҡтары менән барыу ҡаралған; башҡа бөтә нәмәләр буйынса уларға казактарға ҡараған кеүек мөнәсәбәт була, сөнки тыныс ваҡытта уларҙан хәрби хеҙмәткә кеше күп йәлеп ителмәй, ә өйҙәрендә йәшәгәндәр йән башына 40 тин аҡса түләй. Тоҙ хаҡында яңы ҡарарҙар ҡабул ителгәс, улар тоҙ һалымынан азат ителә, әммә элекке кеүек тоҙҙо үҙҙәренең күлдәренән бушлай түгел, ә ҡаҙнанан һатып алырға тейеш була.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Сергей РУДЕНКО

# БАШҠОРТТАР

## Йорт производствоһы



Башҡорттарҙа ағас һауыт-һаба менән бер рәттән туҙ һауыт та осрай. Әммә ағас һауыт-һаба башҡорттарҙың көнкүрешендә айырым урын биләп, бөтөн ерҙә лә киң таралһа, туҙ һауыттар һирәк ҡулланыла. Туҙ көйөҙ һәм төйөҙ **(һүрәт, а, б)** төбө һәм яҡтары ат ялы менән тоташтырып тегелгән дүрткел йәки түңәрәк төйөҙ формаһын тәшкил итә, еләк-емеш йыйыу, ҡул эштәре, ваҡ-төйәк һаҡлау өсөн файҙаланыла.

Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарында осраған туҙ ҡомған айырым иғтибарға лайыҡ. Уны төбө һәм ҡапҡасы ағастан эшләнгән ғәҙәти туҙ төйөҙгә ике морон һәм тотҡа ҡуйып яһайҙар. Ул Урта Азияла тәһәрәт алыу өсөн киң таралған еҙ һәм тимер ҡомған урынына ҡулланылған.

Һауыт-һаба эшләүҙән бигерәк, ваҡытлыса торлаҡ ҡыйығын ябыу һәм нигеҙҙә дегет ҡайнатыу өсөн ҡулланылған туҙҙы ҡыйғаҡ ярҙамында һыҙырғандар.



Ҡайын туҙынан тыш, башҡорттар төрлө нәмәләр эшләү өсөн тал һәм йүкә ҡайырыһын файҙаланған. Йүкәнән улар сабата үргән, төрлө тырыздар һәм биштәрҙәр эшләгән. Бик йыш иген сәсеү өсөн дүрткел төплө, ике яҡтан ҡолағы булған тырыз төрө; аҙыҡ-түлек һаҡлау өсөн рустарҙың өҫтө ҡапҡас менән ябылмалы кәшүле **(һүрәт)**; кәрәк-яраҡты йөрөтөү өсөн биштәр ҡулланылған **(һүрәт)**.

Ҡайырыһынан таҙартылған күгәмә ҡабығы ваҡытлы торлаҡ ҡыйығын ябыуҙан тыш, бал ҡорто күсен ябыу, ҡорот һәм башҡа аҙыҡ-түлекте һаҡлау өсөн тубал эшләүҙә файҙаланылған. Ҡайһы берҙә был алаптар бик ҙур ҙа, тәрән дә булмаған, төрлө формала эшләнгән. Ҡайһы берҙә йәйенке һәм бик ҙурҙарында он һаҡлағандар, ҡорот һәм башҡа һөт ризыҡтары әҙерләү өсөн эремсек йыйғандар.



Һалабаш алыу өсөн йүкә ҡайырыһын ай ярым тирәһе иҫке үҙәндә (үле йылғала) ебеткәндәр, һуңынан унан йүкә алғандар, ә ҡалған күгәмә ҡабығын ҡыйыҡ ябыу һәм ситән тотоу өсөн файҙаланғандар **(һүрәт)**. Һалабаштан башҡорттар, бигерәк тә Көньяҡ Уралдың көнбайышында йәшәүселәр, аттарға ышлыя һәм йүгән үргәндәр, ҡаптар яһағандар һәм септә һуҡҡандар.

Башҡорттарҙың көнкүреш хужалығында йүкә ҡайырыһы һәм унан эшләнгән әйберҙәрҙең ниндәй роль уйнауын башҡорттарҙың үҙ аҫаба ерҙәренә сит кешеләрҙе индергәндә "йүкә һуйыу" хоҡуғы айырым билдәләнелеүенән сығып та һығымта яһарға мөмкин.

**(Дауамы бар).**

***✓ Етенсе класта уҡығанда тарихтан уҡытҡан директорыбыҙ Ғәлимйән Ишбулатов: "Ҙурайғас, һеҙ Башҡортостан өсөн нимә эшләр инегеҙ?"- тигән һорау бирҙе. Мин: "Биш бала табыр инем", - тип яуап бирҙем.***

# ҺАЛДАТ

## Еңеүҙе яҡынайтыу өсөн



(Башы 1-се биттә).

**Розалия, иң башта гәзит уҡыусыларҙы үҙең тыуып-үҫкән яҡтар менән таныштырһаң ине.**

- Мин Бөрйән районы Ҡурғашлы ауылы ҡыҙы. Бәләкәй генә ауыл булһа ла, Ҡурғашлы элек гөрләп торҙо, унда урман хужалығы үҫешкәйне. Икмәк бешереү цехы, МТС, ашхана, яғыулыҡ-майлау колонкаһы, балалар баҡсаһы, мәктәп - йәшәү өсөн бөтөн шарттар ҙа бар ине. Беҙҙә махсус-һөнәри техник училище ла булды хатта. Эш менән мәшғүлдәр һаны ете йөҙгә етә ине заманында. Ситтән килеп тә эшләнеләр. Бына шундай ҡайнап торған ауылда тыуып-үҫтем мин.

Туғыҙынсы класты тамамлағас, Өфөгә Республика иҡтисад лицейына уҡырға килдем. Баштараҡ ауыр булды, әлбиттә, һағынып илай ҙа торғайным. Атай-әсәй, туғандарға туҡтауһыҙ хаттар яҙам. Яҙған хат ярты ай бара, яуап ярты айҙан ғына килеп етә. Холҡомда сәмселлек тигән сифат көслө минең, ауыр саҡтарҙа ла "Мин бында уҡырға тип килдем, түҙ!" тип бойороҡ бирә инем үҙемә. Атай-әсәйҙең дә ышанысын аҡларға кәрәк ине.

Бала саҡтан китаптар уҡырға яраттым. Лицейҙы тамамлағас, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының филология факультетына уҡырға индем. Бында мине уҡытыусы һөнәренә булған һөйөүем алып килде, әлбиттә. Элек беҙ бит уҡытыусыларҙы шундай юғары бер кимәлгә күтәреп, ныҡ хөрмәт итеп ҡарай инек. Бөтә ерҙә лә төплө белем биргән, кәрәк саҡта кәңәш менән ярҙам иткән ысын уҡытыусылар уҡытты. Шуға ла был һөнәр хыял булып бөрөләнгәндер инде күңелдә.

**Студент йылдары шулай уҡ күңелдә онотолмаҫ эҙ ҡалдыра. Күптәр өсөн ул артабанғы тормош юлына фатиха бирә. Шулай түгелме ни?**

- Миңә университетта алты йыл уҡырға тура килде. Тәүге йылды уҡырға инә алманым да, рабфакҡа барҙым. Ул саҡта рабфакта уҡығандарға ла ятаҡтан урын һәм стипендия бирәләр ине - шундай бәхетле дәүергә эләгеп ҡалдыҡ беҙ. Бөтөн имтихандарҙы ла "биш"кә биргәс, мине факультетҡа автоматик рәүештә ҡабул ителәр. 1-2 курстарҙа студент отрядтарына ойошоп, Подымаловала ике йыл картуф уңышы йыйырға йөрөнөк. Әлеге кеҫә телефонлы йәштәрҙән айырмалы, беҙ әҙерәк совет заманының матур йолаларына ла эләгеп ҡалдыҡ шулай. Матур, тием, сөнки йәштәрҙе берләштерә торған бер үҙәк һымаҡ була торғайны ул студент отрядтары. Биш йыл буйы төркөмдөң старостаһы ла булдым әле. Был да мине алдыңа алғанды мотлаҡ башҡарып сығырға тигән яуаплылыҡҡа өйрәткәндер, моғайын.

**Буласаҡ ирегеҙ Артур Хисмәтуллин менән тәү осрашҡан мәл ҡасан булды? Уның менән дә тап университетта уҡыған саҡта танышаһығыҙ бит инде?**

- Артур - Баймаҡ егете. Ғаиләләрендә иң өлкән бала. Уның менән Өфөлә таныштыҡ. Танышыу ҙа осраҡлы ғына килеп сыҡты. Ул саҡта кеҫә телефондары бар ине инде. Артур миңә үҙенең телефон һандарын әйтте лә, ярым шаяртып: "Минең матурым" тип яҙып ҡуй", - тигән булды. Тоттом да "Минең матурым" тип яҙып ҡуйҙым һәм бөгөнгө көнгә тиклем ул шулай Матурым булып йөрөй. Оҙаҡ дуҫлашып йөрөмәнек, осрашыуҙарға ваҡыт яғы тар, уҡый инем бит. Ғәҙәттә, телефондан ғына һөйләшә торғайныҡ. Ул: "Нимә эшләйһең?" - тип һорай. Мин: "Китап уҡып ултырам", - тип яуап бирәм. Аралашыуҙарыбыҙ башлыса шундайыраҡ диалогтарға ҡорола торғайны. Бер йылдан өйләнешергә ҡарар иттек. Беренсе Эткол ауылының килене булып киттем. Беҙҙең яҡтарҙа, шөкөр, йолалар еренә еткереп атҡарыла: Артурҙың ата-әсәһе һоратырға килде, башта никах уҡыттыҡ, шунан айырым туй эшләнек; һандыҡ, ҡаралдылар төйәп, кейәү йортона килен итеп төшөрҙөләр, "Һыу юлы күрһәтеү" һымаҡ йолаларҙы ла теүәл үтәнеләр...

Бер йылдан улыбыҙ тыуҙы. Башта фатир ҡуртымланыҡ. БДПИ-ны тамамлап, аспирантураға уҡырға ингәйнем, ятаҡтан урын бирҙеләр. Мин электән фольклор, бигерәк тә башҡорт йырҙарындағы мөхәббәт темаһы менән ҡыҙыҡһына инем. Шуға ла аспирантуралағы етәксем филология фәндәре докторы, ғалим Әхмәт Сөләймәнов булды. Аспирантурала уҡыу менән бер рәттән, БДПУ-ның филология факультетында лаборант булып эшләп тә йөрөнөм. Унан бер-бер артлы ике ҡыҙыбыҙ тыуҙы.

Ун йыллап йәшәнек беҙ дөйөм ятаҡта. Унда - үҙе бер ҡыҙыҡ тормош. Ятаҡта торған кешеләр бөтәһе лә ябай, бербереһенә һәр саҡ ярҙам итергә әҙер торалар. Балалы кешеләр өсөн ятаҡ бигерәк тә уңайлы. Балаларым студенттар менән уйнайҙар, ярҙам кәрәкһә, улар ихлас ярҙамлашалар. Ниндәйҙер эш менән китергә тура килһә, студенттар баланы ҡарап ҡалалар. Ҙур бер ғаилә һымаҡ аралашып, ҡайнап йәшәйһең инде. Айырыуса башҡортса һөйләшергә яратҡан Азамат улыбыҙға яҡшы булды. "Бына был ағай башҡорт, бына был апай башҡорт", ти ҙә, шулар менән рәхәтләнеш гәпләшә, йә уларҙы бүлмәгә саҡыра, йә үҙе уларға барып инә. Шуға ла балаларым аралашыусан булып үҫтеләр.

Бер мәл эштә ҡыҫҡартыуҙар башланды. Мин дә, водитель булып эшләп йөрөгән ерҙән Артур ҙа эштән киттек. Шунан Артур таксист булып эшләй башланы ла, тәүәккәлләп, үҙенең исеменә ИП асты. Мин ул мәлдә ике ҡыҙым тәрбиәләнгән балалар баҡсаһына эшкә күскәйнем.

Әйткәндәй, университетта өсөнсө курста уҡығанда уҡ әле водителлеккә уҡып, танытма алғайным. Бер ял көндө таксист булып эшләп ҡараным һәм балалар баҡсаһында эшләгән бер айлыҡ эш хаҡын ошо бер тапҡырҙа алып ҡайттым. Был миңә оҡшап ҡалды һәм мин дә таксист булып эш башланым.

**Таксист булып эшләүе ауыр түгелме? Юлда ниндәй генә хәлдәргә тарымайһың да ниндәй генә кешеләр менән осрашмайһың, тигәндәй.**

- Миңә был эш оҡшай. Яратам руль артында йөрөргә. Машинаның тауышынан уҡ уның төҙөкмө-юҡмы икәнен беләм, һөйрәйме-юҡмы икәнен аңғарам. Үҙем ремонтҡа алып барам. ИП асҡас, беҙҙең машиналар күбәйеп китте бит инде. Водитель итеп егеттәрҙе эшкә алдыҡ, ә машиналарҙы ремонтҡа барыбер үҙем алып йөрөтәм.

эҙләнем. Ниһайәт, хәҙер бына өс йыл инде Өфөлә йәшәйбеҙ. Булгакта өй алғандан һуң тағы ике ҡыҙыбыҙ - Асия менән Айһылыу донъяға килде. Балалар бәләкәс булһа ла, алмашлап таксиҙа эшләнек - Артур ҡайта, мин сығып китәм - бына шулай.

Ҙур ғаилә минең хыялым ине. Үҙебеҙҙең ғаиләлә беҙ өс бала - ағайым, ҡустым һәм мин генә инем. Бәләкәй саҡта ултырғыс түшәктәрен ҡурсаҡ итеп төрөп, дуҫ ҡыҙҙар менән уйнағанда: "Их, минең дә апайым йә һеңлем булһа ине", - тип теләй инем. Етенсе класта уҡығанда тарихтан уҡытҡан директорыбыҙ Ғәлимйән Ишбулатов: "Ҙурайғас, һеҙ Башҡортостан өсөн нимә эшләр инегеҙ?"- тигән һорау бирҙе. Мин: "Биш бала табыр инем", - тип яуап бирҙем. Ошолай тип әйткәнем өсөн ул миңә "бишле" ҡуйғайны. Тимәк, ул хыялым ярылып ятмаһа ла, бәләкәйҙән үк күңелдә йәшәгән. Эйе, ҡыҙҙарым күп булһын ине, тип хыяллана торғайным. Аллаға шөкөр, шуға ла дүрт ҡыҙ, бер малайым бар. Әле бәләкәс ҡыҙҙарым балалар баҡсаһына йөрөй.

Аҡсаның тәмен белеүҙә түгел эш, аҡсаң булғас, һин, тимәк, күберәк эш атҡара, хыялдарыңды тиҙерәк тормошҡа ашыра алаһың. Булгак ауылынан өй һатып алып, шунда күсенгәс, балаларҙы шул ауыл мәктәбенә уҡырға биргәйнем. Тик улар был ауылды үҙ итмәне, сөнки унда төрлө милләт балалары уҡый. Ә минең балаларым үҙебеҙҙең тел мөхитендә тәрбиәләнә, туған телдә һөйләшә бит инде. Азаматыбыҙ беренсе кластан алып Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһында уҡыны. Әминә лә шунда беренсе класҡа барҙы. Балаларымды ике йыл ярым Булгактан Өфөгә йөрөтөп уҡыттым. Шул арала үҙем Өфөлә фатир

Артур ҙа, мин үҙем дә шулай бер ҡасан да эшһеҙ торманыҡ. Шуға ла иркен йәшәй алдыҡ, тип әйтә алам. Үҙебеҙҙән бер нәмәне лә ҡыҙғанманыҡ. Ҡунаҡҡа саҡырһалар, ҡунаҡҡа йөрөнөк, үҙебеҙ ҡунаҡҡа саҡырҙыҡ. Башҡортостан буйлап сәйәхәт иттек, тәбиғәткә сыҡтыҡ. Концерт-тамашаларға ла йөрөнөк. Аҡса юҡ, тип, үҙҙәренән ҡыҫып ултырған кешеләр ҙә була бит. Беҙ тулы ҡанлы тормош менән йәшәнек.

**Кейәүгә сығыуығыҙҙы атай-әсәйегеҙ нисек ҡабул иткәйне?**

- Һоратырға килгәс, үҙ-ара нимә һөйләшкәндәрҙер, мин унылын белмәйем. Әсәйемдең: "Ярай, беренсе һоратырға килгән кеше Аллаһтан була", - тигәнен хәтерләйем. Атай-әсәйем Артурҙы хөрмәт итеп торалар. Мин әсәйемә үҙебеҙҙең ғаиләгә бәйле хәлдәрҙе, килеп тыуған ауырлыҡтарҙы, һөйләмәйем. Артур менән үҙебеҙ ултырып һөйләшәбеҙ. Кеше бит, ғәҙәттә, үҙ проблемаһын йә әхирәтенә, йә әсәһенә һөйләй. Ә мин ирем менән уртаҡлашам, кәңәшләшәбеҙ, бөтәһен дә бергәләп хәл итәбеҙ.

**Башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләү, ошо мөхитте һаҡлау һеҙҙең ғаиләлә төп талап булып тора, шулаймы?**

- Ултырып ҡына: "Һин башҡортса өйрән, һин уны белергә тейешһең", - тип әйтеү балаға тамсы ла тәьҫир итмәй. Иң тәүҙә атай-әсәй үҙе башҡортса һөйләшергә тейеш. Беҙ балалар бәләкәй саҡта телевизорҙы ситкә алып ҡуйҙыҡ, сөнки ул саҡта бик йәмһеҙ, ҡурҡыныс йәнһүрәттәр килеп сыҡҡайны. Өйҙә һәр саҡ "Юлдаш" радиоһы һөйләп торҙо. Юлда барғанда ла башҡортса ғына музыка тыңлайбыҙ. Шунлыҡтандыр, Азамат та, Азалия ла ретро йырҙарҙы яратып үҫтеләр. Бөтөн белгән ретро йырҙарын дуҫтарына, класташтарына ла өйрәттеләр. Ғөмүмән, күрәһегеҙҙер, йәштәр араһында хәҙер ретро йырҙар модаға инеп китте бит.

Беҙ ятаҡта йәшәгәндә Зөлфәт Ишбаев: "Азамат башҡортса матур һөйләй", - тип, уны "Тамыр" студияһына тапшырыуҙарға алып йөрөнө. Азалия ла "Тамыр"ҙа өс йәшенән эшләй башланы. Әле лә эшләй. Әминәбеҙ унда дүрт йәшенән йөрөй. Биш кенә йәшендә "Башҡортостан" концерт залында "Тамыр" концертын алып барыусы булды. Балаларым "Тамыр"ҙа нығындылар. Шундай мөхит, мәктәптә башҡортса уҡыу, тәрбиә - бөтәһе лә йәш быуындың башҡорт телен белеп, башҡорт рухлы булып үҫеүендә мөһим роль уйнай. Беҙҙең Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһында шундай мөхит урынлаштырылған да инде, тәртип яғы бик һәйбәт. Шуға ла баш ҡаланың башҡорт ғаиләләрендә тәрбиәләнгән балалар ошо гимназияла уҡырға атлығып тора.

Әйттем бит, 8-9 йыл беҙ телевизор ҡараманыҡ. Быйыл ҙур экранлы телевизор бүләк иткәйнеләр, уны ла анда-бын-

✓ *Күҙҙәренән күренеп тора: егеттәр тормош ҡәҙерен, туған ер ҡәҙерен белергә өйрәнгән. Шуға ла Башҡортостандан барған һәр кемгә, күстәнәстәргә, сәләмдәргә бик шаттар.*



# ҠАТЫНДАРЫ ЛА...

**ең һыҙғанған**



*Розалия биш балаһы менән.*

да ғына тоҡандырып алабыҙ. Асия менән Айһылыу бер-бер артлы тыуҙылар, икәү булғастар, улар гел бергә уйнайҙар, уларға күңелле. Урамдан уйнап инәләр, ҡул йыуалар, ашап алалар, унан инде яратҡан шөғөлдәре менән булышалар - пазл йыйырға, һүрәт төшөрөргә тотоналар. Тағы ла шул: мин балалар менән өлкәндәр һымаҡ һөйләшәм, яратҡанда ғына сөсөлдәп алам да, унан һуң үҙемдең өлкән кеше талаптарына ҡайтам. Беҙгә килгән кешеләр, ғәҙәттә: "Һиндә биш бала икәне һиҙелмәй ҙә ул", - тип әйтәләр. Ысынлап та, өй эсендә бер кем дә тауышланмай, нимәлер талап итеп дауламай, мыжымай, һәр береһенең үҙ эше бар. Мин балаларҙы: "Бөтөн проблемаларҙы ла хәл итеп була, һәр ауырлыҡтан сығыу юлы бар", - тип өйрәтәм. Азамат улыбыҙ ҙа үҙаллы егет булып үҫте. Беҙ эштә саҡта һеңлеләрен үҙе кейендереп, мәктәпкә йә балалар баҡсаһына, йә "Тамыр"ға үҙе алып бара. Балаларҙы театрға спектаклдәргә йөрөтәм. Башҡортостан буйлап сәйәт итеү - шулай уҡ иң яратҡан мәлдәребеҙ.

**Таксист булып эшләгәс, кем менән генә осрашмайһың да, ниндәй генә хәлдәргә шаһит булмайһыңдыр. Иҫтә ҡалған ваҡиғалар ҙа байтаҡтыр?**

- Мин бишенсегә ауырлы булғанда ла рулдә инем. Ауырға ҡалғанымды әле генә белгәнмен, мөҙҙәте бәләкәй генә. Сибайҙан Айһылыу исемле ағинәй миңә ултырып, Өфөгә юлланды. Һөйләшеп киләбеҙ. Бына бер саҡ ул минең йөҙөмә тура ҡарап: "Бишенсегә ҡыҙың булһа, исемен Айһылыу тип ҡуш. Айһылыу тигән исем утта янмай, һыуҙа батмай", - тине. Минең бик ныҡ аптырауым әле булһа иҫтә. Бына шулай, бишенсегә оҙон керпекле, ҡап-ҡара күҙле һылыу ҡыҙыбыҙ тыуып, уға Айһылыу исеме бик таман ғына булды ла ҡуйҙы.

Эйе, юлда төрлө кешеләр тап була, "Таксист ҡатындың машинаһына ултырмайым!" тигәндәр ҙә, ихласлап, һөйләшеп һүҙе бөтмәгән кешеләр ҙә була. Һөйләшеп барып, юлды ҡыҫҡартайым, күңеллерәк тә булһын, тип һүҙ ҡушһаң, өңшәйеп, яуап бирмәгәндәр ҙә осрай. Йәштәр йыш ҡына: "Апай, һеҙ уҡытыусымы?" - тип тә һорайҙар ине. "Эйе, уҡытыусылыҡҡа уҡыным, тик уҡытманым, шулай ҙа тормошта мин уҡытыусымын", - тием. "Ҡатын-ҡыҙ башың менән юлда йөрөргә ҡурҡмайһыңмы?" - тип һорағандар ҙа бар. Юҡ, ҡурҡмайым. Юлда йөрөгәндә бер үк ерҙәрҙе төрлө миҙгелдә үтеп китәһең, һәр миҙгел һине үҙ төҫө менән оҙата бара. Көҙ ағастар сағыу төҫтә, шул урындан яҙ үтәһең, ағастар инде һоро-моро булып ултыра; яҙ шарлап һыу аға, шунан ул урындан көҙ ҙә үтәһең, инде һыу кәмегән, һайыҡҡан була... Һәр миҙгел үҙ төҫөн, үҙ матурлығын бүләк итә. Тәбиғәттең төрлө ваҡытына һоҡланам. Белорет тауҙары буйлап үтеү үҙе бер мөғжизә бит. Бер урында сағандар күп, икенсе урында имәндәр ҡаршылай. Малдар көтөүҙән ҡайта, аттар сабышып үтә, яҡында ғына башын текә тотоп болан баҫып тора, ағастар араһында тейене, төлкөһө күҙгә салына. Ямғырмы, йәйғормо, томанмы, һәр мәлдең үҙ матурлығы, шуға тәбиғәт күренештәрен гел фотоға төшөрөп йөрөйөм. Унан һуң, юлда бит кешеләр менән дә танышаһың.

Таксист булыуымды балалар ҙа аңлап ҡабул иттеләр. Артур ҙа ҡыуана ине, сөнки берәүҙең дә ҡатыны ире менән йәнәш йөрөп, таксист ролен үтәмәй. Хатта ҡайһы бер егеттәрҙең: "Их, минең ҡатыным да, өйҙә генә ятҡансы, шулай машина менән сығып, аҡса эшләһәсе", - тип, ярым шаяртып әйткәндәрен дә ишеткәнем булды.

**Һеҙҙең ирегеҙ Артур инде өс йыл МХО-ла. Уның Махсус хәрби операцияға юл алыуы нисегерәк булды?**

- Мобилизация ваҡытында МХО-ға киткән егеттәр араһында Артурҙың туғандары ла, таныштары ла бар ине. Бер мәл Артур: "Мин дә барам", - тип ысҡындырҙы. Ул саҡта мин: "Юҡ, бармай тораһың, ваҡытың әле килеп етмәгән", - тинем. Күпмелер ваҡыттан бер туған ҡустымдың контракт төҙөгәнен ишеттек, ул хәрби кеше ине. Был хәбәрҙе ишеткәс, Артур ҙа дәртләнде, уны тыйып тоторлоҡ түгел ине инде. Балалар менән ултырып һөйләштек тә: "Ярай, беҙҙең атай даланлы кеше, барып ҡайтһын", - тип ризалаштыҡ. Бына хәҙер өс йылдан ашыу инде ул Махсус хәрби операцияла. Ошо арала оло ҡайғы ла кисерҙек: ҡустым, рота командиры Шәрәфетдинов Руслан Әмин улы ике йыл элек МХО-ла һәләк булды.

**МХО һеҙҙең тормошоғоҙға үҙгәрештәр индергән. Үҙегеҙ ҙә "Ете ҡыҙ" йәмғәт ойошмаһы менән ул яҡтарҙа булып ҡайттығыҙ. Хатта бер тапҡыр ғына түгел, бер нисә тапҡыр...**

- Беренсе, икенсе сәйәхәтемде үҙемдең һәләк булған ҡустымдың яҡты иҫтәлегенә бағышланым. Ул йөрөгән яҡтарҙы барып күргем килде. Ҡустым тураһындағы хәтер йәшәһен, тинем.

Ул яҡтар үҙенә тартып тора. Быйыл шулай өс тапҡыр Донецк, Луганск яҡтарына барып килдек. Элекке һуғыш ваҡытында ла агитбригадалар йөрөгән бит, тыуған яҡтарынан сәләм алып килеп, рухи көс өҫтәгән. Шуның кеүек, беҙҙең сәйәхәт ваҡытында артистар ҙа була. Улар госпиталдә егеттәр алдында ҡурай уйнай, үҙебеҙҙең йырҙарҙы башҡара, шиғырҙар уҡый - бына шундай йылы осрашыуҙар бүләк итәләр. Беҙҙең менән сәнғәт оҫталары Айгиз Ханов, Илнур Һибәтуллин, Гөлсөм Бикбулатова, артабан Зәйнетдин, Альбина Килдейәрова, Эльмира Юлдашевалар барғайны. Барып төшәһең, яугирҙарыбыҙ беҙҙе киң йылмайып сәләмләй. Алып барған күстәнәстәрҙе ҡыуанып ҡабул итәләр һәм рәхмәт әйтәләр. Беҙҙе унда әллә ниндәй ҡунаҡхана йә башҡа уңайлыҡтар көтөп тормай. Окоп шәмдәрен яндырып, блиндаждарҙа йәшәйбеҙ, һалдат ашаған ризыҡты ашайбыҙ. Шул окоп шәмдәре менән тимер мейестәрҙә блиндаждарҙы йылытабыҙ, тимер һауытта һыу йылытып эсәбеҙ. Юл мажараларына ла тарыйһың, ҡыҙыҡ ваҡыттар ҙа була...

Күҙҙәренән күренеп тора: егеттәр тормош ҡәҙерен, туған ер ҡәҙерен белергә өйрәнгән. Шуға ла Башҡортостандан барған һәр кемгә, күстәнәстәргә, сәләмдәргә бик шаттар. Хатта балалар яҙған хаттарҙы ла ҡәҙерләп асып, күҙҙәренә йәш алып уҡырға тартынмайҙар. Шәхсән минең унда барыуымды Артурым көтөп ала, "Еңел булып ҡала һин килеп китһәң", ти. Бына шулай, ил күргәнде күрәбеҙ, ауырлыҡтарҙы күҙгә элмәҫкә, уларҙы тормош кәртәһенә әйләндермәҫкә тырышабыҙ. Унда барып ҡайтҡас, үҙебеҙҙең йәшәйешкә шөкөр итәбеҙ. Луганск яҡтарындағы емерек өйҙәрҙе күргәндән һуң, әлбиттә, тормошто ныҒыраҡ баһаларға өйрәнәһең.

"Ете ҡыҙ" йәмғәт ойошмаһы менән хеҙмәттәшлек итә башлағас, тормошом да үҙгәреп киткәндәй булды. Ойошманың ҡыҙҙары ихлас, ышаныслы, бер-беребеҙгә яҡшы мөнәсәбәттәбеҙ, бер-беребеҙгә кәңәш-төңәш итәбеҙ. Гуманитар ярҙам, концерт бригадалары менән МХО биләмәләренә барыуҙан тыш, бында, үҙебеҙҙә лә сараларыбыҙ байтаҡ: МХО-ла йөрөгән яугирҙарҙың ғаиләләре менән осрашабыҙ, уларҙың балалары менән төрлө уйын-конкурстар үткәрәбеҙ, ҡарттар йортона барабыҙ, аллеяларҙа ағастар ултыртабыҙ. Был йәмғәт эшендә мин үҙемде таптым, тип әйтәм. Был, әлбиттә, түләүһеҙ эш, кирәһенсә, үҙеңдең сығымдарың, үҙеңдең күңел яҡтыһы менән уртаҡлашаһың. Был минең үҙемә оло ҡәнәғәтләнеү бирә.

**Һеҙ "Башҡорт ғаиләһе" конкурсында ла ҡатнаштығыҙ түгелме?**

- Эйе, былтыр Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы үткәргән "Өлгөлө ғаилә" республика конкурсына балаларҙың эштәрен ебәреп, "МХО ғаиләһе" номинацияһында еңдек. Бүләкләү тантанаһы Стәрлетамаҡ ҡалаһында үтте. Шулай уҡ Башҡортостан юлдаш каналы үткәргән "Минең атайым" конкурсында еңеүгә өлгәштек. Бүләк - балалар бүлмәһен ремонтлау ине. Әле беҙҙең фатирҙа шул эштәр атҡарыла.

Ғөмүмән, ҡайҙа ғына йөрөһәк тә, МХО ғаиләһе тип ҙур хөрмәт менән ҡарайҙар. Артурҙың бергә эшләгән һөнәрҙәштәре, дуҫтары, шулай уҡ "Киске Өфө" гәзите коллективы (Артур редакцияла оҙаҡ ҡына ваҡыт водитель һәм фотохәбәрсе булып эшләгәйне) айырыуса иғтибарлылар, һәр ваҡыт хәлен һорашып торалар. Бына ошондай мөнәсәбәт күңелгә йылылыҡ өҫтәй.

Үҙемдең тормошом, эшләгән эштәрем менән ҡәнәғәтмен. Аллаға шөкөр, ирем һәр яҡлап мине күтәрмәләп тора. Бер ҡасан да "юҡ" тип әйтмәй, кирәһенсә, бөтөн башланғыстарыма ҡеүәт кенә өҫтәй. Үҙебеҙ тапҡан мал-мөлкәт, үҙебеҙ яратып башҡарған эш, үҙебеҙ теләп кенә, көтөп кенә алған аҡыллы, тәрбиәле балаларыбыҙ бар. Атай-әсәйҙәребеҙ ярҙам итеп тора. Дуҫтарыбыҙ күп. Былар бөтәһе лә үҙенде бәхетле тойорға һәм алға ышаныс менән ҡарап йәшәргә ярҙам итә лә инде. Донъялар тынысланып, атайҙар тыуған яҡтарға иҫән-имен әйләнеп ҡайтһа, бәхеттәребеҙ түңәрәкләнер, Алла бойорһа, тим. Шул көндәрҙе өҙөлөп көтәбеҙ, доғалар бағышлайбыҙ. Еңеү яуланасағына һис шигебеҙ юҡ!

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ Өсөнсө улының ҡара ҡағыҙын алған әсә мал һарайына инеп, үкереп иланы. Ярай әле, балалары күрмәне. Бына Бибинур ҙа өләсәһененең яуабына ышанды... "Беҙҙең атай ҡайта", тип әҙерәк өмөтләнеп йәшәһен балаҡайҙары.***



*Баймаҡ районы Ҡолсора ауылы ваҡиғаларына нигеҙләнеп яҙылды. Шул хәлдәрҙе һөйләгән Бибинур апайға рәхмәт еткерәм.*

Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА

# ИР ҺҮҘЕ

Хикәйә

Ҡул арбаһын һөйрәгән әбей, уға йәбешкән ҡыҙыҡай ҡыуыштар теҙелгән урынға яҡынлаштылар. Бына ҡаршыларына өлкән генә әбей килеп сыҡты. Бибинур күргән башҡорт әбейҙәренә оҡшамаған ул. Төҫө лә, кейеме лә башҡа. Етмәһә, әллә нисек тишерҙәй итеп ҡарай. Бибинур өләсәһенә һыйынды.

- Кем булаһығыҙ? Аҙаштығыҙмы?

- Күп йөрөгән күп тел белә, тиҙәр. Хаҡтыр, мишәрсә һупалайһығыҙ, - тине Ғәйниямал әбей.

- Мин был яҡта йәшәп киткән кеше. Күп йылдар үткәс, тағы килеп әйләндем, - сиған әбейе ҡыуыштарға күрһәтте. - Табор менән. Беҙҙең табор көнбайышҡа юл алды. Унда элек йәшәгән ерҙәребеҙ азат ителгән. Һин дә минең самалыһың, күпте күргән әбейһең. Юлығыҙ оҙон булһа, үҙебеҙ менән алып китә алабыҙ.

Сиған ҡарсығы үҙенә текләгән һымаҡ тойолғас, Бибинур йәһәтләп өләсәһененең итәгенә уралды.

- Баймаҡҡа ғына беҙҙең юл. Баламдың атаһы фронттан ҡайтып килә.

- Ауылда көтөргә кәрәк!

- Күп көттөм! Үҙем ҡаршы алам.

- Беҙҙән, сиғандарҙан, ҡурҡмайһыңмы?

- Һеҙ ҙә әҙәм балалары, беҙ ҙә. Әҙерәк хәл алабыҙ ҙа, ары китәбеҙ.

Өләсәһенә һыйынып ултырған ҡыҙ әкренләп кенә ойоно һәм ҡул арбаһында уянып китте.

- Өләсәй, беҙ ҡайҙа?

- Кире ағайың янына. Беҙҙе көтә-көтә көтөк булғандыр.

- Өләсәй, аттары тирәһенән үттем. Урлик юҡ шул, - тине уларҙы ҡаршы алған Әхмәҙиә төшөнкө генә.

- Шунда, балам, - тине өләсәһе ышаныслы тауыш менән.

Әхмәҙиә уфтанды, яуап урынына баш сайҡаны.

- Ниңә, бер ат та һиңә бышҡырманымы ни? - тип һораны Ғәйниямал әбей.

- Ниңә бышҡыра инде...

- Бер ҡара ат бышҡырҙымы, тием?

- Һиҫкәндеме, бышҡырҙымы, әллә... Шунан мин йәһәтләп боҫа һалдым, тегеләр һиҙеп ҡалмаһын тип.

- Тап шул ҡара тигәнең Урлик инде. Ҡараға буяп та ҡуйғандар, нишаналар.

- Шулмы! - тип ҡысҡырып ебәрҙе Әхмәҙиә. - Һуң, уның бит ҡойроғо...

- Ҡырҡҡандар.

- Ҡайҙан беләһең?

- Шул тирәнән үҙем үтеп киттем. Байҡап барҙым. Сиған аттары ике аяҡҡа тышаулы, ә быныҡ өс аяғы бәйҙә. Бөгөн сиғандарҙың туйы бара. Ә улар ғәләмәт байрам итергә ярата. Бөтөн ир-ат шунда ҡайнаясаҡ. Урликты бөгөн генә алып ҡасып була. Тик һаҡ бул, Әхмәҙиә. Улар уяу, сос. Ат тип, йәндәрен бирә торған халыҡ.

- Ә беҙ, өләсәй? - тип һораны Бибинур.

- Беҙ ҡайтыу яғына ыңғайлайбыҙ. Ағайың Урликка менһә, беҙҙән дә иртәрәк ҡайтып төшөр. Үҙе беҙҙе ҡаршы алып торор.

Ғәйниямал әбей менән Бибинур ҡайтыуға юл алдылар.

Күпме көтһәләр ҙә, Әхмәҙиә күренмәне. Шул рәүешле, ике көн үтеп китте. Нимә булды, нишләп тотҡарланды ағаһы? Бибинур ауыл осонан күҙен алманы.

Ә бөгөн ҡыҙыҡай аттар бағып йөрөгән өләсәһененең һығылыпһығылып илағанын күрҙе. Зәйнәп апай ғына эргәһендә ине, Ғәйниямал инәйҙе йыуатып, ул эргәһендә тегеләй ҙә, былай ҙа өйөрөлдө. Өләсәй илағанын балаларына күрһәтмәҫкә тырыша, шуға мал һарайына инеп, йәшеренеп кенә буҙлай. Үкһегән тауышты һаҡколаҡ Бибинур барыбер ишетә, тик ишетмәмеш була. Әйтергә ярамай, өләсәй бит тап уларҙан ҡасып илай. Ишетмәйҙәр-күрмәйҙәр, тип уйлай бирһен әйҙә.

Өләсәйҙе илатмаҫҡа кәрәк. Тиҙерәк ҡайтһын ине ағаһы! Бер заман ҡыҙыҡай йән көсөнә һөрән һалды:

- Өләсәй, ағайым ҡайтып килә!

- Раббым-Аллам!.. - Ғәйниямал әбей йәштәр етеҙлеге менән урынынан һикереп торҙо.

Юл ыңғайы хәл белергә һуғылған Шәрифулла ҡарт та ҡыҙыҡай күрһәткән яҡҡа һоноло. Ниндәй ят атты менеп алған Әхмәҙиә? Ҡарт, аптырауҙанмы, әллә үҙ күҙенә үҙе ышанманымы, артҡараҡ сигенде, шөбһәле ҡарашын Ғәйниямал әбейгә төбәне.

- Шәрифулла ағай, Урлик сиғандар ҡулында, тип әйткәйнем бит.

- Нимә, ошолай сихырлағандармы?

- Әллә ниндәй төҫкә индереп сихырлаһындар, Урлик таныулы! Беҙгә тоғро! Ана, ҡалай талпына!- Ғәйниямал әбей ҡуш усын яҙҙы. - Эй, Хоҙайым, был балам иҫән!

Һарай эргәһенә килеп еткән һыбайлы хәлһеҙ генә йылмайҙы.

-Урлик ҡайтты...

- Хәлең нисек, улым? - тип борсолоп өндәште өләсәй.

- Мине Урлик өйгә алып барып ҡуйһын.

- Бар-бар, - тине бригадир. - Бүреләр ҙә туҡ, һарыҡтар ҙа иҫән. Бетерә шырлығында йөрөгән, тиербеҙ.

- Балам, нишләп төҫөң ҡасҡан? - тип алға атланы әбей.

Әхмәҙиә, өләсәһенә яуап бирмәйенсә, Орликты өй яғына борҙо.

Өләсәй һағая төштө.

- Ҡана, ҡайтып киләйем.

Ғәйниямал әбей өйгә ингәндә, Әхмәҙиә урындыҡта ята ине. Өләсәй улына эйелде, яурынына һаҡ ҡына ҡағылды.

- Балам, был кем эше? Кем атты?

- Өләсәй, һин мине терелтерһең бит...

- Терелтәм, балам. Ҡулбашыңа тейгән. Ҡаның күп аҡҡан... Юҡ-юҡ, ҡыбырлама, оҙаҡламай хәл инер, - Өләсәй йәһәтләп үләндәр ҡайната башланы.

- Өләсәй, мин Урликты алып ҡайттым, - тине хәлһеҙ тауыш менән Әхмәҙиә.

- Алып ҡайттың, улым. Шулай булырын белә инем мин.

- Мин һатлыҡ түгелмен.

- Беҙҙә ундай кешеләр юҡ. Һин батыр, атайың һымаҡ. Ул ныҡ ҡыуаныр ине.

- Нишләп ине?

Өләсәй тертләне, тамаҡ ҡырып алды.

- Әле эргәбеҙҙә түгел бит.

- Түгел шул.

- Бибинур, анау сепрәкте алып бир миңә. Яҡыныраҡ килтер сеүәтәне, - тине Ғәйниямал бойороусан тауыш менән. Бибинур өләсәһе әйткән нәмәләрҙе алып биреп торҙо.

- Өләсәйеңдең ҡулы көслө. Һауығырһың, улым, - тине Ғәйниямал әбей доғаларын уҡый-уҡый.

Бер ни тиклем ваҡыттан һуң, Әхмәҙиәгә төҫ ингәндәй булғас, Ғәйниямал әбей тел осондағы һорауын бирҙе.

- Тотолдоңмо әллә, улым?

- Юҡ. Сиғандар атты һаттылар икенсе кешеләргә, - тине Әхмәҙиә.

-Уйламаған-көтмәгән бәләгә тарығаныңды һиҙҙем, улым...

Ысынлап та, һаҡколаҡ Әхмәҙиә төнгә тиклем сиғандарҙың аттарын ҡарауыллап ятты. Урманда үҫкән бала боҫа ла, эҙ йәшерә лә белә инде ул - сиғандар үҫмерҙең барлығын һиҙмәне лә, тойманы ла. Орликты алып китер йәтеш мәл сыҡты, тип, урынынан ҡалҡынырға ғына иткәйне, ниндәйҙер шәүләләр яҡынлашҡанын шәйләп, кире боҫто. Сиғандар, йәнә ике һыбайлы күренде... Тегеләре аттарынан төштөләр ҙә, малайҙың эргәһенә үк килеп баҫып, ҡыҙып-ҡыҙып нимә тураһындалыр гәп һатырға керештеләр. Ә һөйләшеүҙәре урысса ине. Ул телде бер аҙ аңлай Әхмәҙиә. Сиғандар тап ошо кешеләргә ат һатырға тейештәр икән. Сиғандар икенсе аттарҙы күрһәтһәләр ҙә, тегеләр һис ризалашманы, Орликты ғына алырға иттеләр. Бәхәсләшеп, ғауғалашып алғандан һуң, атты эйәрҙәренә бәйләп, тағып алып киттеләр.

- Мин арттарынан барҙым. Йәйәү булғас, хәлем бөттө. Барыбер тороп ҡалманым. Шунан тегеләр йылға буйында туҡтанылар. Мин инде бүтән ҡыуып етә алмаҫымды белә инем, хәҙер алып китәм, йәки минең баш төрмәлә серей, тинем. Тәүәккәлләнем. Тышауын ысҡындырып, Урликҡа менеп ултырыуым булды, бурҙарҙың берәһе яман итеп ҡысҡырҙып ебәрҙе, уғаса булмай, кемеһелер атты. Көйҙөрөп кенә үтте... Ярай, башыма теймәне бит. Урлик аңланымы, тағы ла шәберәк сабырға тотондо. Ҡыуып етә алманылар.

- Үлемдән ҡалғанһың бит, балам.

- Урлик уларҙан ҡотолорға тырышты. Урлик Урлик бит инде ул!

- Туҡта, тик кенә ят, ҡоромаҡыр!

- Өләсәй, Урликты таҙартырға кәрәк. Милсейә килһә, был Урлик түгел, тиерҙәр.

- Үҙем. Буяуын сығарам, бер табы ла ҡалмаҫ. Һин әлегә ҡыбырлама, ишетһен ҡолағың!

Ағаһының йоҡоға талғанын күргән Бибинур өләсәһенә эйәрҙе.

- Өләсәй, нишләп һин бая иланың? Ағайым ҡайтмаҫ, тип ҡурҡтыңмы?

- Былай ғына иланым.

- Былай ғына?..- тип ышанмағандай ҡабатлап һораны ҡыҙыҡай.

- Атаҡ, ҡарт кеше лә ҡай саҡ илап ала ул.

Бибинур өләсәһенең һүрән генә яуабына риза булмай, йәнә төпсөштө:

- Ә Зәйнәп апай нимәгә килгәйне?

- Бушталйун бит ул. Килеп йөрөй. Эше шул.

- Килмәһә лә була инде! Ул кеше илата.

- Ҡыуандыра ла белә. Хаттар әпкилә. Тереләрҙән...

- Ә-ә-ә-ә... Эйе, шулай, ҡыуандыра! Беҙҙе лә гел ҡыуандырһын! Атайымдан хат әпкилһен! Уға ағайым тураһында яҙырға кәрәк. Ағайым үҙе яҙыр. Ул яҙа белә - Бибинур өләсәһенә ҡараны, һағайҙы. -Тағын илайһыңмы әллә?

- Шатлыҡтан да илайҙар, балам. Әхмәҙиәм ҡайтты бит. Иҫән-һау. Һин, бар, уның эргәһендәрәк бул. Үлән сәйе әҙерләнем бит, шуны бирерһең.

- Эйе шул. Мин киттем, өләсәй.

- Бар!

Ғәйниямал әбей, әүеҫлеккә барып еткәс, итәге менән битен һөртөп алды. Бибинурының күҙе үткер шул. Бөтөн нәмәне күрә, бөтөн нәмәгә иғтибар итә, белгеһе, асыҡлағыһы килә. Зирәк бала... "Зәйнәп апай нимәгә килгәйне?" тип төпсөнөпмө-төпсөшә. Әбей Бибинурҙың өйгә ингәнен ҡарап торҙо, шунан түшелдерегендә ятҡан ҡағыҙҙы һыйпаштырҙы.

Эйе, килеп китте бушталйун ҡатын. Һәр саҡ ғәйепле ҡарашлы Зәйнәп уға: "Мөхәмәҙиә батырҙарса һәләк булды",- тигән ҡайғылы хәбәр алып килде. Өсөнсө улының ҡара ҡағыҙын алған әсә мал һарайына инеп, үкереп иланы. Ярай әле, балалары күрмәне. Бына Бибинур ҙа өләсәһененең яуабына ышанды... "Беҙҙең атай ҡайта", тип әҙерәк өмөтләнеп йәшәһен балаҡайҙары. Һауыҡһын Әхмәҙиә. Әлегә был алама хәбәр тураһында ул берәүгә лә әйтмәйәсәк. Ҡарт әсә күҙ йәштәрен һөртә-һөртә ҡайын туҙын ҡайната башланы. "Исмаһам, ошо аттарҙы дауалау, һауыҡтырыу хаҡына бер улым иҫән ҡайтһасы!"

Береһе лә ҡайтмаясаҡ. Ләкин ҡапҡа шығырлаған һайын, айырыуса, таңдарын һәм кистәрен, Ғәйниямал өләсәй Бибинурға өмөт менән шулай тиер булған, ғөмүмән, донъянан киткәнсе йыш ҡабатлаған һүҙҙәре шул булыр ҡарт әсәнең:

"Ҡапҡа шығырланы. Әллә Абдрафиҡ ҡайтып килә инде!" "Ғиндулла ағайың түгелме икән, ҡапҡа шығырлай?" "Мөхәмәҙиәнең аяҡ тауышын ишеттем һымаҡ. Сығып ҡара әле, атайың түгелме!"

Ҡапҡа шығырлауы - ҡарт әсәнең һүнмәҫ өмөтө ул.

* * *

Әхмәҙиә егет ҡорона инде. Армияға алыныр алдынан өләсәһенә ейәндең йыуатыу һүҙе шулайыраҡ яңғыраны.

- Өләсәй, беҙҙең өй иҫкерҙе. Әрменән әйләнеп ҡайтыу менән яңы өй һалырмын. Ҡапҡаны булһа ла яңыртып китәйемме әллә?

-Һалырһың, балам, һалырһың. Тик ҡапҡаға теймә инде. Шул йырлап асылһа, өс улымдың береһе килеп инер төҫлө.

- Ҡапҡаға теймәйбеҙ, өләсәй, - тип һүҙгә ҡушылды Иштуған да. - Йырлы ҡапҡа һинеке. Торһон, ивет, ағай?

- Шулай тиһеңме, улым, - тине өләсәй кинйәһененең һүҙен хуплағандай.

- Ир һүҙе, өләсәй! - тине Иштуған ағаһына ҡарап алғандан һуң.

Ғәйниямал әбейҙең йөҙөндәге йыйырсыҡтары яҙылып киткәндәй булды.

- Нимә, ир һүҙе, тинеңме? Эй-й-й, бәләкәсенә тиклем ҡалайтып һүҙ биреп тора. Аллаға шөкөр, бына улдарым ир етте бит, күҙ алдында! Шөкөр! Инде был донъяла үкенестәрем әҙерәк булыр. Ир һүҙендә торһа, илдә именлек була. Һеҙ бит ул минең өмөт ҡапҡаларым!

**(Аҙағы. Башы 23-25-се һандарҙа).**

✓ Буласаҡ студенттар камил шәхес булып үҫешер өсөн юғары белем кәрәклеген аңлаһындар ине. Ваҡытында шундай һығымтаға килмәгән 50-60 йәшлектәр бөгөн юғары белемгә ынтыла.



БЕЛЕМ УСАҒЫ

# БАШҠОРТТАРЫМ, УҠЫУ КӘРӘК!

**Өфө фән һәм технологиялар университеты филиалы - Сибай институты директоры Илдар Сәлихйән улы ХӘМИТОВ менән йылдағыса юғары уҡыу йортоноң хәстәрҙәре тураһында һөйләштек. Төрлө үҙгәрештәрҙең күп булыуы насар түгел, әлбиттә. Тик, күңел йән тыныслығы көҫәгәндә, ваҡыт тиҙлеге хафаландыра ла кеүек. Заманы шундай: артта ҡалырға ярамай.**



– Быйылғы уҡыу йылы Сибай институты өсөн бик үҙенсәлекле - беҙгә 35 йыл тулды! Тәү ҡарамаҡҡа, ҙур ваҡиға ла түгел һымаҡ, әммә был сараны байрамса үткәрергә булдыҡ, сөнки 35 йыл эсендә беҙҙә 30 меңдән ашыу студент юғары белем алды. Уларҙың күпселеге Урал арьяғы райондарында хеҙмәт итә, төрлө өлкәләрҙә эшләй. Республикабыҙҙа, Рәсәй кимәлендә лә беҙҙең элекке студенттарҙы осратырға мөмкин. Әлбиттә, осрашыуға бөтәһен дә саҡыра алмаһыҡ, шулай ҙа күбеһе килде. Улар араһында төрлө министр урынбаҫарҙары, район хакимиәте башлаҡтары, эшҡыуарҙар күп булды: кемдәргә хәбәр барып етте, кемдәр ишетте - шуларҙы ҡаршы алдыҡ. Элекке студенттарыбыҙ йәшлек йылдарын иҫкә төшөрһөн, тип, сараны үҙебеҙҙең конференция залында үткәрҙек. Байрам күңелле үтте, бик күп йылы рәхмәт һүҙҙәре ишеттек, теләктәрен ҡабул иттек. Тимәк, институт асылған көнөнән алып төп маҡсаттарына ирешә, үҙенә генә хас йолаларын дауам итә. Был сара киләсәктәге юбилейҙарға ынтылыш бирәсәк.

Институт тормошонда йыл да төрлө үҙгәрештәр булып тора. Ҡабул итеү комиссияһына документтарҙы хәҙер мөмкин тиклем Дәүләт хеҙмәттәре аша ҡабул итәбеҙ. Абитуриенттар документтарын институтҡа шәхсән үҙҙәре килеп тә тапшыра ала. Былтыр институттың сайты аша тапшырырға була ине, быйылдан тик Дәүләт хеҙмәттәре аша һәм шәхсән рәүештә ҡабул ителә.

Колледж тамамлағандар өсөн дә үҙгәрештәр бар. Беҙҙең институтҡа уҡырға инергә теләгәндәр, һайлаған профилдәрен үҙгәртмәһәләр, уҡыуға институттың имтихандарын биреп инә ала. Икенсе профилде үҙ итһәләр, улар Берҙәм дәүләт имтихандары тапшырырға тейештәр. Был мәғлүмәтте белмәй ҡалғандар һуңланылар, сөнки улар беренсе февралгә тиклем мәғариф идараһыҡтары аша яҙылып, дәүләт имтихандары тапшырырға тейеш ине. Был турала Указ былтыр уҡ булды. Дөрөҫөн әйткәндә, колледж студенттары был яңылыҡҡа иғтибар итмәнеләр. Былтыр колледж бөткәндәрҙән БДИ һөҙөмтәләрен һораманыҡ, сөнки ҡабул итеү шарттары элеккесә ине. Быйыл Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәһе булмаһа, икенсе профиль һайлаған колледж тамалаусыларҙы институтҡа ҡабул итә алмайбыҙ.

Бер уйлаһаң, колледж тамамлаусы тәүге һайлаған һөнәре буйынса уҡыуын дауам итһә, насар ҙа түгел һымаҡ, ләкин күптәр яңы йүнәлештәге диплом алырға тырыша. Беҙ иһә ундайҙарҙың һәр береһе менән индивидуаль һөйләшеп, баланың мөмкинлектәрен иҫәпкә алып, ундайлы юлдар тәҡдим итәбеҙ. Был яңылыҡтың бер ҡурҡынысы ла юҡ, хәл ителә торған мәсьәлә.

Әле Башҡорт дәүләт медицина университеты менән берлектә эшләй башланыҡ, бер төркөм студенттар быйыл беренсе курсын беҙҙә тамамлай, имтихандарын тапшырып бөткәс, икенсе курсҡа Өфөгә күсәләр. Йәйгеһен медуниверситет үҙе яңы төркөм йыйып, беҙгә ебәрәсәк. Студенттарҙы һайлауҙа беҙҙең ҡатнашлыҡ юҡ, улар үҙ теләктәре буйынса Сибай институтында уҡый башлаясаҡ. Был проект бик үҙенсәлекле булмаҡсы, башланғыс дауам итер, үҫешер, тип өмөт итәбеҙ. Урал арьяғы дауаханаларында табибтар етешмәүен иҫәпкә алып, проектты республика Башлығы Радий Фәрит улы үҙе тәҡдим иткәйне.

Ысынлап та, Урал арьяғы район башлыҡтары беҙгә был һорау буйынса йыш мөрәжәғәт итәләр, табибтар ситкә китмәһен өсөн улар уҡыуҙарын бында башларға тейеш. Табибтар ғына түгел, бөгөнгө көндә уҡытыусыларға, юристарға ихтыяж ҙур. Беҙ төрлө профилдәге белгестәр әҙерләйбеҙ, тик уҡытыусылар, уҡыусылар үҙҙәре был йүнәлештә әүҙемлек күрһәтмәйҙәр. Мәсьәлән, сығарылыш класындағы уҡыусыларҙың тик яртыһы ғына, ғәҙәттә, ике дәүләт имтиханын һайлай. Ә бер имтихан менән генә юғары уҡыу йортона уҡырға алмайҙар, мотлаҡ ике дәүләт имтиханын тапшырырға кәрәк. Беҙ, мәсьәлән, лицензияға ярашлы, өсөнсө, өҫтәмә имтихан алып, абитуриентты институтҡа ҡабул итә алабыҙ. Беҙгә мәктәптәр менән бергәләп эшләргә кәрәк. Әле беҙгә Әбйәлил районынан дүрт мәктәп директоры килеп, килешеү төҙөнө. Беҙ уларға квалификация күтәреү курстары менән ярҙам итәбеҙ, улар беҙгә балалар ебәрәләр. Киләсәктә башҡа мәктәптәр менән дә шундай килешеүҙәр төҙөйбөҙ: мәктәптәргә беҙҙән уҡытыусылар кәрәк, ә беҙгә - уҡыусылар кәрәк.

Балаларға иң төп теләгем, кәңәшем шул: ҡабул итеү комиссияһына документтарҙы онлайн тапшырған хәлдә лә, улар институтҡа шәхсән үҙҙәре килеп, юғары уҡыу йорто менән танышһындар. Был күп ваҡыт талап итмәй - килһендәр, күрһендәр, фекер туплаһындар. Институтта уларҙы халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәре - Рәми Ғарипов, Шәйехзада Бабич, Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәб Биишева, Мөхәмәтша Буранғолов, Мифтахетдин Аҡмулла, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, Кинйә Арыҫланов, Хөсәйен Әхмәтов, Исмәғил Тасимов, Зәйнулла Рәсүлов, Әхмәтзәки Вәлиди-Туған, Харис Йосоповтарҙың бюстары ҡаршы алыр. Буласаҡ студенттар камил шәхес булып үҫешер өсөн юғары белем кәрәклеген аңлаһындар ине. Ваҡытында шундай һығымтаға килмәгән 50-60 йәшлектәр бөгөн юғары белемгә ынтыла, карьера буйынса үҫешер өсөн юғары белем кәрәклеген ундайҙар әле саҡ төшөнгән. Мифтахетдин Аҡмулланың "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!" ораны һәр ваҡытта ла актуаль булып ҡала шул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Директор менән һөйләшкәндә Рәсүл Ғамзатовтың "Үткәндәргә алтатарҙан атһаң, киләсәк һинә туптан атыр", тигән мәғәнәле һүҙҙәре иҫкә төштө. Һағыныулы тыныс үткәндәребеҙ барҙа, ҙур тиҙлектә елгән киләсәк албырғата ла, хафаландыра ла. Ни тиһәң дә, уҡыу кәрәк!**

Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.

ӘЙТӘГҮР!

# ӘЙҘӘ, ЯЛ ИТӘЙЕК!

**Һорау: "Йәй мәле - ял мәле бит инде. Ошо мәлдә кем нисек үткәрә икән?"**

***Әнисә ИБРАҺИМОВА, Дәүләкән районы, уҡытыусы:*** Ниһайәт, сығарылыш уҡыусыларына ғына түгел, мәктәптең бөтөн педагогтар коллективы өсөн дә көсөргәнешле, тулҡынландырғыс имтихандар осоро имен генә үтеп тә китте һәм беҙгә лә ял итеп алыу форсаты тыуҙы. Мин быйылғы отпускамды айырыуса көтөп алдым, сөнки ҡыш аҙағы - яҙ башында грипп менән ныҡ ҡына сырхап алырға тура килде. Үкенескә, уның эҙемтәләре йәйгә тиклем һуҙылды: хәлһеҙлек, йүтәл өйәнәге, баш ауыртыу кеүек билдәләр юҡ-юҡта үҙен һиҙҙерә тора, шуға күрә дауалаусы табип кәңәшенә ҡолаҡ һалып, быйыл диңгеҙ тарафтарынан баш тартырға һәм үҙебеҙҙең Башҡортостан санаторийҙарының береһен һайларға булдым. Тәүҙә был ниәт башҡа ла инеп сыҡмай ине, бәхеткә, минең хәл-әхүәл менән хәбәрҙар булған әхирәтем үҙе йәшәгән ҡалағы ана шундай ял-дауаланыу учреждениеһына путевка һатып алып, тыуған көнөмә бүләк иткәс, ҡыуанып риза булдым. Ҡайҙа, тиһегеҙме? Шул инде: үҙебеҙҙең ҡунаҡсыл, киң күңелле халҡы менән дан тотҡан Баймаҡ, Сибай яҡтарына юлланам! Әхирәтем менән Сибай ҡалаһынан ситтәрәк урынлашҡан "Урал арьяғы шифаханаһы"нда ял итәсәкбеҙ. Ял менән бергә бында һауыҡтырыу саралары ла бик шәп ойошторолған, тип маҡтай әхирәтем, сөнки ул ике йыл элек ошо шифаханала булып, бик ҡәнәғәт ҡалған. Тик ул минә бер аҙна алдараҡ килергә ҡушты: үҙенең Баймаҡ районындағы тыуған ауылында булып, Талҡаҫ күлен, Ғәҙелша шарлауығын күрһәтергә теләй. Һәм иң мөһиме - Мөжәүир хәҙрәттең тыуған ауылында булып, уның ҡәберенә зыярат ҡылырға тигән изге ниәтебеҙҙе башҡарыу теләге лә бар. Бындай мөғжизә бүләк иткәне өсөн әхирәтемә мең рәхмәтләмен. Биш көндән юлға сығам!

***Илдар ӘХМӘТШИН, Стәрлетамаҡ ҡалаһы, эшҡыуар:*** Быйыл йәйге ялды тулыһынса балаларыбыҙға арнарға хәл иттек, юғиһә, йыл да ауылға, ҡартатай менән өләсәйҙәренә ҡайтарып ҡуя инек. Эйе, ауылда саф һауа, таҙа ризыҡ - ҡалаһың һөрөмлө һауаһынан һуң ай буйы ял күҙгә күренерлек файҙа бирә, әлбиттә. Икенсенән, ҡартатай менән өләсәйгә баҡса уташып, йәшелсә-емеш тиреп, нығынып ҡайта балалар. Быйыл ҡыҙыбыҙ Айгөлгә - 12, улыбыҙ Маратҡа 9 йәш тулды. Ауылда ни тиклем генә һәйбәт булмаһын, хәҙер уларҙы бер төрлөлөк ялҡытып та китә. Улар төрлө ерҙәрҙә булырға, сәйәхәт ҡылырға теләйҙәр. Унан бит ҡартатай менән өләсәйҙәргә лә ял кәрәк, ләкин улар өсөн иң яҡшы ял, әлбиттә, яратҡан ейән-ейәнсәрҙәренең яндарында булыуы. Ошоға тиклем өс йыл рәттән отпускамды файҙалана алмағанлыҡтан, балалар әсәләре менән ауылда ла ял иттеләр, "Ҡарағай" шифаханаһында ла булдылар, Торатауға ла барып ҡайттылар. Быйыл, ниһайәт, ғаиләм менән диңгеҙ буйында бергәләп ял итергә форсат тыуҙы: Төркиәнең Антальялағы курортына ике аҙналыҡ путевка алдыҡ. Балаларҙы сыныҡтырыу өсөн диңгеҙ һыуы менән һауаһы бик файҙалы, ә Төркиәнең Урта диңгеҙ һыуы тап ана шундай сифаттарға эйә: шифалы тоҙҙар һәм фитонцидтар менән туйындырылған диңгеҙ һауаһы тын юлдары системаһын таҙарта, тире ауыруҙарын дауалай. Улыбыҙ дерматит менән яфалана, уға диңгеҙ һауаһы-һыуы килешер, тип өмөт итәбеҙ.

***Тимур МУСИН, Өфө ҡалаһы, юрист:*** Беҙҙә "өс таған" тип йөрөтәләр һәм был, ысынлап та, шулай: мәктәптә уҡыған йылдарҙан бергәбеҙ. Дуҫтарымдың береһе - программист Рөстәм, икенсеһе - Рәмил һөнәрселек колледжында уҡыта, мастер. Беҙгә 25-әр йәш, әле башлы-күҙле булып өлгөрмәгәнбеҙ, шуға күрә, кем белә, бәлки, ғаилә хәлдәре үҙгәреп тә китер - беҙ быйыл йәйге ялыбыҙҙың бер аҙнаһын бергәләп, палатка ҡороп, тәбиғәт ҡосағында ысын мәғәнәһендә буйҙаҡтарса ял итергә булдыҡ. Бының өсөн Марат дуҫыбыҙ беҙҙе үҙенең тыуған районы Учалыға барырға күндереҙе: бында беҙ Өргөн күле буйында һыу инеп, балыҡ ҡармаҡлап, ҡырҙа ятып ял итергә ниәтләнек. Башҡортостандың легендар күлдәренең береһе булған Өргөн хаҡында бик күп ишеткәнем бар, әлбиттә, ләкин, күпте ишеткәнсе, бер тапҡыр барып күреүең - үҙе бер ғүмер, ти Марат. Уның һөйләүенсә, Өргөн - үҙенсәлекле тәбиғәт ҡомартҡыһы, уның дөйөм майҙаны 9,2 кв.км һәм ул республикабыҙҙың тәбиғәт хазиналары Ҡандраҡүл, Асылыкүл менән Сыбарҡүлдән ҡала ҙурлығы буйынса дүртенсе урында тора. Был һыу яҡтылығының майҙанын урыны менән урман, ташлы-ҡырсынлы дала һәм һаҙлыҡ уратып алған. Тәбиғи, бындай урынды һәр төрлө йәнлектәр, ҡош-ҡорт төйәк иткән. Ә балыҡтың кәм тигәндә тиҫтәләп төрө үрсей икән Өргөндә! Ошондай тәбиғәт ынйылары - күл һәм йылғалары, тау-ҡаялары, мәмерйәләре булған Башҡортостанда ял - үҙе бер мөғжизә. Таиланды ла, Төркиәһе лә ары торһон!

Фирүзә ИШБИРҘИНА яҙып алды.

✓ *БалаHың уҡыуҙан ситләшеүе, шикле дуҫтары барлыҡҡа килеүе, һеҙҙең алда телефон шылтыратыуҙарына яуап бирмәҫкә тырышыуы, етди һөйләшеүҙәрҙән ҡасыуы, алдаша башлауы - ата-әсә өсөн етди сигналдар.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠЫҘҘЫРЫЛҒАН РИЗЫҠ ТӘМЛЕ, ЛӘКИН...

■ Чипсы, ҡыҙҙырылған тауыҡ, балыҡ, картуф, шулай уҡ майҙа бешкән бәлештәр простата яман шешенә килтереүе ихтимал. Тышы кетерләп торған тәмле тауыҡ ҡанаттары менән боттары популяр ризыҡтар. Ғалимдар асыҡлауынса, бындай аш-һыу ир-егеттәр өсөн айырыуса хәүефле. Майҙағы канцероген матдәләр - альдегидтар, гетероциклик аминдар яман шешкә килтерә.

■ Өлкәнәйә барған һайын кешенең мускул массаһы кәмей. Ғалимдар был күнелһеҙ күренештең сәбәбен асыҡлаған. Улар мускул көсһеҙләгәнә килтергән аҡһым өлгәнөн тапҡан. ATF4 аҡһымы мускул аҡһымы синтезын ҡыҫҡартып, һәлдә мускулдары генына тәьҫир итә. Белгестәр ATF4 әүҙемлеген баҫыусы ике тәбиғи компоненты асыҡлаған - уларҙың береһе алмала, икенсеһе йәшел помидорҙарҙа. Ҡарт кешеләр мускулдарҙың көсһеҙләгә менән яфалана. Алмалағы урсол кислотаһы менән йәшел помидорҙағы томатидин был процесты туҡтатып тора ала, ти тикшеренеүселәр.

■ Ҡайнар какао ҡарттарҙың хәтерен яҡшырта, ти ғалимдар. Улар был эффектты какао составындағы флавоноидтарға япһара. Экспериментта уртаса 73 йәште тәшкил иткән бер төркөм ҡатнашҡан. Уларҙың өстән бер өлөшө баш мейеһе ҡан әйләнеше боҙолоуы менән яфаланған. Тейешле тикшеренеүҙәрҙә үткәндән һуң, улар бер ай буйына көн һайын 2 стакан ҡайнар какао эскән. Аҙаҡтан асыҡланыуынса, баш мейеһенең ҡан әйләнеше 8 процентҡа яҡшырған. Какао ҡартайыу һөҙөмтәһендә мейелә барған кире процестарҙы яйлата, неврологик тайпылыштар хәүефен түбәнәйтә.

■ Ғалимдар мәғлүмәттәренә ярашлы, иртәнге күнекмәләр ябығыуҙың һөҙөмтәһен 20 процентҡа күтәрә. Тик күнегеүҙәр ас ҡарынға башҡарылырға тейеш. Тикшеренеүҙәрҙә 12 ир-егет ҡатнашҡан, уларҙың бер өлөшө спорт менән ас көйөнә, бер өлөшө иртәнге аштан һуң шөғөлләнгән. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, иртән спорт менән шөғөлләнеүселәрҙең көн дауамында калориялы ризыҡ ашарға теләге булмай, улар асығып та бармай. Ә бына ас көйөнсә спортзалға йүнәлеүселәр уларға ҡарағанда 20 процентҡа калорияларҙы күберәк яндыра.

■ Шәкәрҙе артыҡ ҡулланыу иммунитетты ҡаҡшата. 100 грамм шәкәр ҙә (шул иҫәптән фруктоза менән глюкоза ла) ҡандың аҡ тәнсәләренең зыянлы микроорганизмдар менән көрәшеү һәләтен түбәнәйтә. Шәкәр ашағандан һуң ике сәғәт эсендә иммунитет яртылаш ҡына эшләй, ә өс сәғәттән һуң ул эшмәкәрлеген бөтөнләй туҡтата. Был ваҡыт эсендә организм хәлһеҙләнә. Инфекциялы ауырыуҙар менән яфаланыусыларға бөтөнләй татлы ризыҡтар ашарға ярамай. Шулай уҡ һуттар ҙа зарарлы, сөнки уларҙың составында глюкоза бар.

■ Кино ҡарағанда уның күңелдең иң нескә ҡылдарына сирткән урындарында илап алырға була. Етмәһә, был файҙалы ла, ти Нидерланд ғалимдары. Ғалимдар илата торған драмаларҙы "бәхеткә юл" тип атап йөрөтә, бындай киноны ҡарағандан һуң кешеләр үҙҙәрен күпкә уңышлыраҡ тоя, имеш. Эксперимент барышында 60 тамашасы "Тормош матур" һәм "Хатико" фильмдарын ҡараған. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, сеанста илаған кешеләр кино тамамлаҡас та үҙҙәрен шундай бәхетле тойған, был кисерештәр тағы бер сәғәт тирәһе уларҙы ташламаған. Әйткәндәй, был ир-егеттәргә лә ҡағыла. Бәхетиһәң, сер химияла йәшеренгән - бындай хис-тойғолар окситоцин тигән матдә бүленеп сығыуға булышлыҡ итә, тап ул бәхет һәм шатлыҡ тойғоһон бирә лә инде.

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА



# ЯҠЫН КЕШЕҢ НАРКОМАНМЫ?

**Үткән аҙнала Халыҡ-ара наркоманияға һәм наркотиктарҙың законһыҙ әйләнешенә ҡаршы көрәш көнө билдәләнде. Был дата наркотиктарҙың ни тиклем хәүефле булыуын һәм яҡындарыңды үлемесле афәттән аралау зарурлығын иҫкәртеү маҡсатында булдырылған.**

## Улар барҙар әле

Статистика буйынса, Башҡортостанда наркотиктар менән мауыҡҡан кешеләр һаны йылдан-йыл кәмей бара. Әгәр 2010 йылда 5,7 мең кеше наркология хеҙмәтендә иҫәптә торһа, 2025 йылда - 3,4 мең. Әммә наркомания проблемаһы киҫкен ҡала, сөнки статистика табип ярҙамы һорап рәсми мөрәжәғәт иткән һәм иҫәпкә баҫҡан кешеләр һанынан сығып төҙөлә, ә наркоманияға бәйлелек менән яфаланыусыларҙың һаны күберәк булыуы ихтимал. Бөтә Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге мәғлүмәттәре буйынса, рәсәйҙәрҙең 11 проценты үҙ мөхитендә наркотик ҡулланыусы кешеләрҙең булыуы хаҡында һөйләй, был - һуңғы һигеҙ йылдағы иң юғары күрһәткес.

## Үҫмерлек осоро

Наркотиктар ҡулланыу хәүефе иң тәү сиратта үҫмерҙәргә янай. Үҫмерлек - бала үҙе менән ниндәй үҙгәрештәр барғанын аңламаған көсөргәнешле осор. Мәктәптәге һәр төрлө уңышһыҙлыҡты йәки ата-әсә менән аңлаша алмауҙы ул ныҡ ауыр кисерә, һөҙөмтәлә унда ысынбарлыҡтан ҡасыу теләге тыуа. Наркотик, психоактив матдәләр ҡулланыу йәнәтенән таратылған ялған мәғлүмәт тә үҙ ролен уйнай: йәнәһе, "ваҡыты-ваҡыты менән ҡабул итергә мөмкин, ҡурҡыныс бер нәмә лә булмаясаҡ, теләгән ваҡытта ташлап була". Ләкин наркотик ҡыҫҡа ваҡыт эсендә кеше психикаһын үҙенә буйһондора һәм унда яңы доза әҙләүгә бәйлелек барлыҡҡа килә.

## Билдәләре ниндәй?

Наркомания енесенә, йәше, социаль статусына ҡарамай, һәр кемгә ҡағыла ала. Яңы синтетик матдәләр барлыҡҡа килә, улар сағыштырмаса арзан булғанға күрә, тиҙ тарала. Наркотиктар баш мейеһе күҙәнәктәрен емерә, шәхестең деградацияһына килтерә, хатта ағыуҙан баш тартҡандан һуң да организмға зыянды бөтөрөп булмай. Яҡыныңа иғтибар ғына бәлә-ҡазаны ваҡытында туҡтата ала.

Баланың уҡыуҙан ситләшеүе, шикле дуҫтары барлыҡҡа килеүе, һеҙҙең алда телефон шылтыратыуҙарына яуап бирмәҫкә тырышыуы, етди һөйләшеүҙәрҙән ҡасыуы, алдаша башлауы - ата-әсә өсөн етди сигналдар. Буштан-бушҡа асыулана, кәйефе йыш үҙгәрә. Мәҫәлән, бер нисә сәғәт эсендә ул күңелле хәлдә йөрөп, ҡапыл вайымһыҙ, битарафҡа әйләнеүе ихтимал. Хәрәкәттәре, телмәре боҙола. Кеше тәртип, ваҡытында ашау тураһында онота йәки туҡтауһыҙ ашай. Өйҙән аҡса, ҡиммәтле әйберҙәр юғала башлай.

## Әҙемтәләре

Наркотиктар бөтә тормошто емерә: һаулыҡ, ғаилә мөнәсәбәттәре, карьера. Инфекциялар, шул иҫәптән ВИЧ һәм гепатит хәүефе арта. Наркомандар шприцтар аша дауалап булмаҫлыҡ сирҙәр йоҡтороу хәүефен белә, әммә был уларҙы туҡтатмай.

Былтыр наркотиктар менән ағыуланыуҙан 126 кеше һәләк булған. Улар араһында 15 йәштән 29 йәшкә тиклемгеләр - 13 кеше, 30 - 49 йәштәгеләр - 102, 50 йәштән өлкәндәр - 11. Һәләк булғандарҙың күбеһе - 72 кеше - Өфөнән. Шулай уҡ Стәрлетамаҡ, Нефтекама, Туймазы, Салауат, Октябрьский һәм республиканың башҡа ҡалалары һәм районларынан ҡорбандар бар.

## Балаларҙы йәлеп итәләр

Наркотиктар уларҙы ҡулланырға уйламағандарға ла ҡағылырға мөмкин. Хоҡуҡ һаҡсылары наркобизнесҡа йәлеп ителгән балалар һанының артыуын ҙур хәүеф тип билдәләй. Эске эштәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 2025 йылда полиция хеҙмәткәрҙәре 37 бәлиғ булмаған наркокурьерҙы ҡулға алған. Уларҙың күбеһе - бығаса закон менән проблемалары булмаған, интернетта эш тураһында иғлан табып, аҡса эшләргә теләгән ябай балалар. Ҡулға алынғандарҙың береһе һөйләүенсә, ул яңы велосипедҡа аҡса йыйырға теләгән һәм ҡар таҙартыу тураһында иғлан күргән. Әлбиттә, бер ниндәй ҡар тураһында ла һүҙ бармай. Үҫмер "эш биреүсе"нең ҡушыуы буйынса, "тауарҙы" әйткән урындан алып, кәрәкле урындарға һалырға тейеш була. Ул быны наркотик менән бәйле икәнен шунда уҡ аңлай, әммә "еңел аҡса" алыу мөмкинлеге аҡылды еңә. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, наркотиктар таратҡан өсөн үҫмерҙәргә ҡаты яза, хатта ғүмерлеккә төрмәгә ултыртыу янай.

## Психолог кәңәше

Баланың наркотик ҡулланыуы билдәле булдымы? Нимә эшләргә? Балалар психологы Наталья Дербеко шундай кәңәштәрен еткерә:

- Был - һәр ата-әсә өсөн ауыр хәл. Беренсе реакция йыш ҡына эмоциональ була: аптырау, асыу, ҡурҡыу, ғәйеп тойғоһо йәки кисекмәҫтән язалау теләге. Әммә һеҙҙең тап ошо мәлдәге аҙымығыҙға баланың киләсәге һәм уның менән артабанғы мөнәсәбәттәрегеҙ бәйле.

● Әрләмәгеҙ һәм ҡысҡырмағыҙ. Агрессия яуап агрессияһы йәки үҙ-үҙенә бикләнеү тыуҙыра. Үҫмер һеҙгә ышанмаясаҡ һәм дөрөҫлөктө тағы ла нығыраҡ йәшерәсәк.

● Физик яза ҡулланмағыҙ. Был - бөтөнләй һөҙөмтәһеҙ һәм емергес алым. Ул тик ситләшеүҙе көсәйтә һәм протестың хәүефлерәк алымдарына этәреүе ихтимал.

● Ғәйепләмәгеҙ һәм нотоҡ уҡымағыҙ. "Мин бит һиңә әйттем!", "Һин беҙҙе оятҡа ҡалдырҙың" йәки "Һинең киләсәгең юҡ" тигән һүҙҙәр - файҙаһыҙ. Бала былай ҙа психологик йәһәттән ҡатмарлы хәлдә, ә ғәйепләү уның яңғыҙлыҡ һәм нимә эшләргә белмәү тойғоһон көсәйтә генә.

● Проблеманы иғтибарһыҙ ҡалдырмағыҙ. Бер нәмә лә булмаған кеүек ҡыланыу - баланың үҙ-үҙен һәләк итеүенә өнһөҙ ризалыҡ биреүгә тиң.

● "Һатып алырға" тырышмағыҙ. Наркотиктарҙан баш тартҡан өсөн ҡиммәтле бүләктәр вәғәҙә итеү оҙаҡ эшләмәй һәм проблеманың асылын хәл итмәй.

## Ярҙам һорап кемгә мөрәжәғәт итергә?

● ***Балалар йәки ғаилә психологы, психотерапевт.*** Белгес ғаиләгә мөнәсәбәттәрҙе яйға һалырға, ғәйеп һәм үпкә тойғоларын өйрәнергә, бәйлелектең төп сәбәптәрен табырға ярҙам итәсәк.

● ***Нарколог.*** Табип баланың һаулығын, бәйлелек дәрәжәһен баһалай һәм дауалау планын тәҡдим итә (детоксикация, терапия).

● ***Ата-әсәләргә ярҙам.*** Наркотикка бәйле кешеләрҙең туғандары өсөн ярҙам төркөмдәре бар (мәҫәлән, "12 аҙым" программаһы). Шул уҡ хәлдә кисергән кешеләр менән аралашыу үҙеңде яңғыҙ тоймаҫҡа һәм ғәмәли кәңәштәр алырға мөмкинлек бирә. Һауығыу - оҙайлы процесс, өҙөклөктәр булыу ихтималлығын ҡабул итегеҙ. Мораль йәһәттән спринтҡа түгел, марафонға әҙерләнегеҙ. Иң мөһиме - күңелегеҙҙе төшөрмәгеҙ.

Балалар һәм ата-әсәләр өсөн ышаныс телефоны: 800 2000 122 (йәки 124).

✓ *Ҡурай, Уралдан тыш, Алтай, Саян тауҙарында һәм Якутияла ла үҫә, ә музыка ҡоралы булараҡ тик башҡорттарҙа ғына таралған. Был, әлбиттә, быуаттар төпкөлөнә киткән ғәжәп бер сер.*



ИРӘНДЕК ҮҪЕМЛЕКТӘРЕ

# МОҢЛО ҠУРАЙ, ЙЫРЛЫ ҠУРАЙ, ДӘРТЛЕ ҠУРАЙ...

*Урал ғына тауҙың, ай, башында,*
*Урай-урай үҫкән бер ҡурай.*
*Шул ҡурайҙы алып бер тартты-ниһәң,*
*Ҡайғы-хәсрәт баҫыла бер талай.*
*(Башҡорт халыҡ йырынан)*

**Башҡорт халҡының беҙҙең заманға килеп еткән төп музыка ҡоралдарының береһе булып ҡурай һанала. Уның тураһында һүҙ сыҡҡанда, әлбиттә, иң беренсе булып бына ошо музыка ҡоралы тураһында фекер йөрөтөргә күнеккәнбеҙ.**

Ҡурай тураһындағы легендала бер яуыз хандың мөгөҙө булыуы һәм был сер халыҡҡа таралмаһын өсөн ҡылған яуызлыҡтары арҡаһында бөтә халыҡтың ыҙа сигеүе бәйән ителә. Осраҡлы рәүештә тере ҡалған бер йәш егет алыҫҡа, бейек тауҙар араһына, алып барып ташлана. Хандың фекеренсә, ул аслыҡҡа һәм яңғыҙлыҡҡа сыҙай алмайынса, тиҙ арала һәләк булырға тейеш була. Әммә был егеттең тәрлө үләндәр, тамырҙар менән туҡланырға һәм ҡорт тишкән үлән һабағынан көй сығарырға өйрәнеп китеүе уның ғүмерен оҙайта, хатта тора-бара үҙенең ауылдаштары, ата-әсәһе менән осраштыра. Шунан алып был үҫемлекте лә, көй сығарып уйнарлыҡ музыка ҡоралын да ҡурай тип атай башлағандар...

Ғалимдар раҫлауынса, был хәлгә 18 - 19 быуат үткән булырға тейеш. Һәр хәлдә, халҡыбыҙға киң билдәле булған "Сыңрау торна" көйө, мәҫәлән, мең йылдар элек ижад ителгән һәм шунан бирле ҡурайҙа башҡарылып килә, тип фараз итергә нигеҙ бар. Хәҙер ошо музыка ҡоралында уйнау оҫталығы буйынса күп һанлы конкурстар, байгеләр (мәҫәлән, Йомабай Иҫәнбаев, Ғата Сөләймәнов, Кәрим Диаров һәм Әҙһәм Исҡужин иҫтәлектәренә арналған) үткәрелә. Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙа үткәрелеүсе ҡурай байрамдары был музыка ҡоралына өрәяны һулыш һәм яҙмыш бирҙе тип әйтергә була. Атаҡлы ҡурайсылар Азат Айытҡолов, Ишморат Илбәков, Ришат Рәхимов, Юлай Гәйнетдинов, Нурғәли Кәйекбирҙин, Мөхәмәт Түләбаев ҡурай сәнғәтен өрәяңы бейеклеккә күтәрҙе.

Ә инде виртуоз ҡурайсы Роберт Юлдашев ҡурайҙы, симфоник оркестрға һәм "Виртуозы Москвы" ансамбленә ҡушылып уйнап, бөтөн донъяға билдәле итте. 2009 йылда Париж ҡалаһында Башҡортостандың ЮНЕСКО-лағы презентацияһы "Курай магияһы" исеме аҫтында үтеүе үҙе үк күп нәмә тураһында һөйләй.

***Ҡурай (Реброплодник уральский - Pleurospermum uralense Hoffm)*** - үҫемлектәрҙең сатыр сәскәлеләр ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үлән үҫемлек. Был үҫемлекте белмәгән һәм күрмәгән ҡайһы бер кешеләр уны ҡамыш тип атап ныҡ яңылышалар. Ҡурайҙың русса исеме уның орлоҡтарының ҡырлы булыуынан алынған. Бынан тыш, ҡурайҙың һабаҡтары ла ҡырлы-ҡырлы. Бейеклеге 120 - 170 см. Ҡурай Урал тауының төньяғынан көньяҡ сиктәренә тиклем үҫә. Әйтергә кәрәк, ҡурай, Уралдан тыш, Алтай, Саян тауҙарында һәм Якутияла ла үҫә, ә музыка ҡоралы булараҡ тик башҡорттарҙа ғына таралған. Был, әлбиттә, быуаттар төпкөлөнә киткән ғәжәп бер сер. Бәлки, бер ваҡыт тарихсылар, философтар был йәһәттән үҙҙәренең фекерҙәрен әйтерҙәр тип ышаныңғы килә!



Ҡурай



Ихатала үҫкән ҡурай

Ҡурай ҡайын урманы һәм ҡатнаш урмандарҙа ҡуйы үлән араһында үҫә. Бигерәк тә дымға байыраҡ үҙәк урындарҙы хуп күрә. Уйнар өсөн ҡурайҙы тау үҙәгенең башындараҡ үҫкәнен бысаҡ менән ҡырҡып алалар. Бындай урындарҙа ул йоҡараҡ, ә кипкәс, яңғырауыҡлыраҡ була. Танылған ҡурайсыбыҙ Ишмулла ағай Дилмөхәмәтов йыл һайын ҡурайҙарҙы Хәйбулла районының Әбеш ауылы янындағы "Айыу ҡоҙоғо" тип аталған урында йыйыр булған. "Һәр ваҡыт орлоҡтарын сәсеп ҡалдырам, икенсе йыл да үҫһендәр", - тип һөйләгәне һәм башҡаларға ла шулай эшләргә кәңәш итеүе һаман да хәтерҙә.

Ҡурайҙы сәсеп үҫтерергә теләүселәр ҙә юҡ түгел һуңғы йылдарҙа, әммә әлегә һөҙөмтәһеҙ. Шулай ҙа минең Сибай ҡалаһындағы ихатамда ҡурайҙың үҫеп сығыуы бөтмәҫ ҡыуаныслы әйләнде. Күрәһең, сәселеп ҡалған орлоҡтар 7 - 8 йыл үткәс кенә шытым биргәндер.

Ҡурай күпләп үҫкән урындарҙы, ғалимдар һәм ҡурайсы-музыканттар тәҡдиме менән нигеҙләп, заказник сифатында дәүләт тарафынан һаҡлау сараһын күреү маҡсатҡа ярашлыраҡ булыр ине.

Быға тиклем ҡурайҙы тик музыка ҡоралы йәһәтенән файҙаландыҡ, маҡтаныҡ, хатта уға Баймаҡ районы Төркмән ауылы янындағы Туғажман тауында һәм тағы ла бер нисә районда һәйкәл дә ҡуйылды. Данлыҡлы ҡурайсы Рәмил Ғәйзуллин 2001 йылда ҡурайҙы төп башҡарыусы музыкаль уйнау ҡоралы итеп, Башҡорт халыҡ инструменттары оркестры төҙәп, бөтә республика халҡын ҡыуандарҙы һәм музыка һөйөүселәрҙе, белгестәрҙе һоҡландырҙы. Оркестрҙың тәрлө конкурстарҙа тик юғары баһаға лайыҡ булыуы һөйөндөрә. Хәҙер республика Хөкүмәте ҡарамағында ҡурайсылар ансамбле булыуы, республиканың дәүләт флагында һәм гербында ҡурайҙың һүрәте булыуы был үҫемлекккә ҡарата һөйөү һәм ихтирам тойғоһон уята.

Ҡурайҙың дарыу үҫемлеге булараҡ ҡулланылышы нисек? Себер ғалимдары үткәргән химик анализдар күрһәтеүенсә, ҡурай үҫемлегенең өҫкө өлөшөндә һәм тамырҙарында кумарин, шул иҫәптән императорин, флавоноидтар, аскорбин кислотаһы, эфир майҙары, сапонин барлығы асыҡланды.

Себер халыҡ медицинаһында (ул унда күпләп үҫә) ҡурай үләнен үпкә ауырыуҙарынан, шул уҡ ваҡытта туберкулездан да ҡулланалар. Теш һыҙлағанда, һөйәк һынған осраҡтарҙа тамырҙарын төнәтмә яһап эсәләр.

**Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН,**
**биология фәндәре докторы, профессор.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



## КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

### Һандуғас, былбыл

**(Обыкновенный соловей)**



Турғай һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған тағы бер төркөм - һандуғастар ваҡ ҡына, һомғол буйлы ҡоштар. Ҡойроғон гел ҡыбырлатып ала, ултырған саҡта ҡанаттарын саҡ ҡына аҫҡа һәлендереп ултыра. Урманда, ҡыуаҡлы әрәмәләрҙә оя ҡора. Йырсы ҡош, һайраған саҡта, ғәҙәттә, ҡыуаҡҡа йәки ағас олонона йәшенерәк һайрай.

Һандуғас, былбыл иһә турғайҙан саҡ ҡына ҙурыраҡ, өҫкө яғы көрәнерәк-һоро, аҫҡы яғы көрәнерәк-көлһыу. Ҡойроғо оҙон, осо йоморайып тора, арҡаһы менән бер төҫтә. Йыры - ҡабатланып торған һыҙғырыу һәм сутылдауҙарҙан тора. Көньяҡ Урал шарттарында йәшәгән һандуғастың йыры, беҙҙең күҙәтеүҙәр буйынса, 5 бүлөгдән тора, йәғни йырының һәр элементы 5 тапҡыр ҡабатлана. Урман йырсылары араһында тауышының көсө буйынса һандуғасҡа етеүсе юҡтыр, моғайын. Шулай булһа ла, республика халҡы һандуғастың һайрауын башҡа моңло итеп һайраусы ҡоштарҙан айырмай. Алағанат турғайҙы, баҡса килейеген, утҡойроҡто һандуғас тиеүселәр бар. Һандуғас йырлауҙан туҡтағас (оя-ғаиләк ороу мәшәҡәттәре тамамланғас), түбән тауыш менән "фюить-трр" тип саҡыра, ошонан уны танырға була.

Яҡты урмандарҙа, йылға үҙәндәрендә, баҡсаларҙа, парктарҙа оялай, дымлы, һыулы урындарҙы ярата. Ергә ҡорған ояһын ҡороған япраҡтарҙан, һаламдан, сыбыҡтан яһай, йөн түшәй. Йомортҡаһы 4-6 була, йәшкелт йәки һорғолт төҫтә.

Республиканың бөтөн ерендә лә бар, Өфө платоһының һәм Көньяҡ Уралдың ырыҫлы урмандарын ғына үҙ итмәй. Һандуғас унда бик һирәк осрай. Өфөнөң парктарында оя ҡорол йәшәүсе ғәҙәти ҡош. Мәҫәлән, Якутов исемендәге паркта һандуғас бар. Көньяҡ Уралдың әрәмәләрендә, Урал аръяғында һандуғастың һаны айырыуса күп.

### Ҡыҙыл муйын һандуғас

**(Соловей-красношейка)**



Ябай һандуғасҡа оҡшаған, тик ҡорһағы, ҡашы, муйынының ике яғы аҡ, түше, башының ике яғы һоро, тамағы ата ҡоштоҡо - ҡыҙыл, инә ҡоштоҡо аҡ йәки алһыу.

Пермь өлкәһендә оя ҡороп йәшәй. Беҙҙә иһә көҙөн күреп ҡалырға мөмкин. Бигерәк тә Өфө тирәһендә уларҙы тап итеү мөмкинлеге ҙур.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**



## 6 ИЮЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.30, 1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.40 "Время покажет". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Минута тишины". [16+]
23.55 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 16.30 Вести.
9.30 Вести. Местное время.
9.55 О самом главном. [12+]
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 3.10 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Галка". [16+]
0.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Второе зрение". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15 Навигатор истории. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "Асыш". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Формула здоровья. [12+]**
**17.15 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус.яз). [12+]**
**18.00 Д/с "Разноцветная планета". [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Здоровый смысл". [16+]**
**21.00 Специальный репортаж. [16+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.15 Х/ф "Ван Гоги". [16+]**
**2.00 Спектакль "Откройте, милиция!" [12+]**
**3.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 7 ИЮЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.40 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Минута тишины". [16+]
23.55, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30 Вести.
9.30 Вести. Местное время.
9.55 О самом главном. [12+]
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 3.10 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Галка". [16+]
0.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Второе зрение". [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.00, 3.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**16.45 Республика LIVE. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Моя планета - Башҡортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]**
**21.00 Креативный код. [12+]**
**22.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**23.45 На своей земле. [12+]**
**0.00 Х/ф "Блокбастер". [16+]**
**1.45 Спектакль "Убей меня голубчик". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 8 ИЮЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.40 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Минута тишины". [16+]
23.55 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30 Вести.
9.30 Вести. Местное время.
9.55 О самом главном. [12+]
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 3.10 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 Д/ф "Семья семей". [12+]
21.30 Т/с "Галка". [16+]
0.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Второе зрение". [12+]**
**11.00 Специальный репортаж. [16+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Гора новостей. [12+]**
**15.45 "Экологично". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**16.45 Детей много не бывает. [6+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**18.00 Дуҫтар. [16+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 День семьи, любви и верности в г.Бирск. [12+]**
**21.00 Материнство и детство. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2026". [12+]**
**0.00 Х/ф "Тень". [16+]**
**1.45 Спектакль "Желтоволосая". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 9 ИЮЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.40 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.45, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Минута тишины". [16+]
23.55, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30 Вести.
9.30 Вести. Местное время.
9.55 О самом главном. [12+]
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 3.10 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Галка". [16+]
0.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Второе зрение". [12+]**
**11.00 Д/ф "Взгляд с высоты. Природа Горного Алтая". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15 Дознание. [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 "Сулпылар". [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Навигатор истории. [12+]**
**16.15 Полезные новости. [12+]**
**16.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.00 Д/ф "Взгляд с высоты. Доминанты Санкт-Петербурга". [6+]**
**17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**18.00 "Йома". [6+]**
**19.00 Телецентр.**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Материнство и детство. [12+]**
**20.30 Формула здоровья. [12+]**
**20.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Грешник". [12+]**
**1.45 Спектакль "Таштугай". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 10 ИЮЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 18.40 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.20, 14.15 "Время покажет". [16+]
16.15 Давай поженимся! [16+]
17.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Минута тишины". [16+]
22.45 Юбилейный концерт группы "Рондо". [12+]
0.35 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00 Вести.
9.30 Вести. Местное время.
9.55 О самом главном. [12+]
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе! Народный кастинг". [12+]
23.55 Х/ф "Любовь по найму". [12+]
3.20 Х/ф "Мама выходит замуж". [12+]

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Второе зрение". [12+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**11.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**15.30 Детей много не бывает. [6+]**
**16.00 Хазина. [6+]**
**16.45 Дознание. [16+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45, 3.45 На своей земле. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Дуҫтар. [16+]**
**23.30 "Ҡурай-шоу". [12+]**
**0.00 Х/ф "Любовь без правил". [16+]**
**1.45 Спектакль "Лунные вечера Айсылу". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 11 ИЮЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Я сегодня обеты молчанья нарушу". К 80-летию со дня рождения Валентины Толкуновой. [12+]
11.10 "Вспомнить всё". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.05 Т/с "Арбатские тайны". [16+]
17.00 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "День семьи, любви и верности". Праздничный концерт. [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
22.50 Д/ф "Я сегодня обеты молчанья нарушу". [12+]
23.35 Бокс. М. Гассиев (Россия) - Т. Йока (Франция). Бой за титул чемпиона мира WBA. Прямая трансляция из Москвы.
0.50 Х/ф "Белые ночи почтальона Алексея Тряпицына". [16+]
2.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Муж моей мечты". [16+]
0.40 Х/ф "Никто кроме нас". [12+]
4.10 Х/ф "Обратный билет". [12+]

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15, 19.00 Материнство и детство. [12+]**
**8.30 На своей земле. [12+]**
**8.45 Хазина о хазине. [6+]**
**9.15 Сәләм представляет… [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.45 МузКәрәҙ. [6+]**
**11.15 "Ҡурсаҡ". [6+]**
**11.30 Атайсал. [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**12.30 Навигатор истории. [12+]**
**12.45 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.45 Д/ф Олотау йыйыны. Башкирский вайб. [12+]**
**18.15 Полезные новости. [12+]**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2026". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 "Башҡорт йыры-2026". [12+]**
**0.45 Х/ф "Пассажир из Сан-Франциско". [16+]**
**2.45 Спектакль "Потерянная любовь". [12+]**
**4.30 Автограф. [12+]**
**5.00 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

## 12 ИЮЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/с "Победа". [16+]
13.10 Т/с "Арбатские тайны". [16+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 Т/с Премьера. "Скрытые мотивы". [16+]
21.00 "Время".
23.00 "Большая игра". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.55, 2.15 Х/ф "Любовь на сене". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
12.30 Вести. Местное время.
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.03 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15 Формула здоровья. [12+]**
**8.30 "Ҡурай даны". [12+]**
**8.45 Күстәнәс. [12+]**
**9.15 "Мама". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.45 Тирмәкәй. [6+]**
**11.00 "Городок АЮЯ". [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 "Ат уйнатып". [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 Ап-асык. [12+]**
**14.00 Все песни о прекрасном… [12+]**
**14.45 Дорога к храму. [6+]**
**15.15 Честно говоря. [12+]**
**16.00 Д/с "Трудности перевода". [12+]**
**17.00 Республика LIVE. [12+]**
**17.45 Д/с "Герои". [12+]**
**18.15 Спектакль "Караул, тещу украли!". [12+]**
**19.45 Әлләсе. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.) [12+]**
**22.15 Подтекст: инструкции к себе. [12+]**
**23.00 Концерт Залии Ганиатуллиной. [12+]**
**0.30 Х/ф "Pro любовь". [18+]**
**2.30 Спектакль "Банкрот или Свои люди - сочтемся". [12+]**
**4.15 На своей земле. [12+]**
**4.30 Колесо времени. [12+]**
**5.30 Дуҫтар. [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1448 һижри йыл.*

| Июль (Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (21) дүшәмбе | 3:18 | 4:47 | 13:30 | 19:03 | 21:53 | 23:23 |
| 7 (22) шишәмбе | 3:19 | 4:48 | 13:30 | 19:03 | 21:53 | 23:23 |
| 8 (23) шаршамбы | 3:20 | 4:49 | 13:30 | 19:02 | 21:52 | 23:22 |
| 9 (24) кесе йома | 3:22 | 4:50 | 13:30 | 19:02 | 21:51 | 23:21 |
| 10 (25) йома | 3:23 | 4:52 | 13:30 | 19:02 | 21:50 | 23:20 |
| 11 (26) шәмбе | 3:24 | 4:53 | 13:30 | 19:01 | 21:49 | 23:19 |
| 12 (27) йәкшәмбе | 3:25 | 4:54 | 13:30 | 19:01 | 21:48 | 23:18 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

✓ *Янғын ваҡытында еүеш туҡыма аша тын алығыҙ, шкафҡа йәки карауат аҫтына йәшенмәгеҙ, урамға сығығыҙ, лифт менән файҙаланмағыҙ, тәҙрәләрҙе һәм ишектәрҙе асмағыҙ.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЙЫРҘАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**25-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Сәғәт. Ағиҙел. Ҡарамалы. Ҡолмой. Яурын. Яуым. Атеизм. Исем. Яғылбай. Айыт. Емеш. Тажи. Егерме. Ҡанат. Бажов. Әй. Тәкә. Сарыҡ. Әләм. Алҡа.

**Вертикаль буйынса:** Янъял. Ҡырҡбыуын. Нәүбәттә. Арба. Йәнбәк. Маяҡ. Әлифба. Иблис. Ике. Алма. Ыумас. Жанр. Талаҡ. Ысыҡ. Ҡарамышева. Агент. Мари. Йөкмәтке.

*ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!*



# МӨҺИМ ҠАҒИҘӘЛӘР

**Башҡортостанда йыл башынан янғындарҙа 112 кеше һәләк булған, уларҙың 4-һе - балалар. Был хаҡта Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының республика буйынса баш идаралығы хәбәр итә.**

Ведомствола республикала йәшәүселәрҙе янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен үтәргә саҡыралар. "Балаларҙы өйҙә яңғыҙын ҡалдырмағыҙ. Янғын сыҡҡан осраҡта шунда уҡ 01 йәки 112 номерҙары буйынса янғын хеҙмәтенә шылтыратығыҙ. Аныҡ адресты һәм янғын тураһында тулыраҡ мәғлүмәтте әйтегеҙ. Янғын ваҡытында еүеш туҡыма аша тын алығыҙ, шкафҡа йәки карауат аҫтына йәшенмәгеҙ, урамға сығығыҙ, лифт менән файҙаланмағыҙ, тәҙрәләрҙе һәм ишектәрҙе асмағыҙ. Һауа ағымы ялҡынды көсәйтә генә", -тип билдәләнеләр Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығында.

Әйткәндәй, Белоретта 30 июнь иртәһе ишле ғаилә өсөн фажиғә менән тамамлана яҙған. Башҡортостан буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, Пугачев тыҡрығында урынлашҡан шәхси йортта күп балалы ғаилә: ата-әсә һәм уларҙың дүрт балаһы йоҡлап ятҡан. Әсә сәйер шау-шыуға уянып, тупһаға сыҡҡан һәм һарайҙың янғанын күргән. Ут кәртә-ҡура аша йортҡа күскән. Ҡатын тиҙ генә ирен һәм балаларын уятҡан. Өй эсенә төтөн тулған, шул мәлдә янғынды иҫкәртеү ҡоролмаһы эшләп киткән. Ата-әсә балаларын алып, урамға йүгереп сыҡҡан. Ваҡиға урынына Рәсәйҙең Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы һәм Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты янғын һүндереүселәре килеп еткән. Янғын һүндерелгән. Бер кем дә зыян күрмәгән. Хәҙер ғаилә хәүефһеҙ урында, улар өләсәйҙәрендә йәшәп торасаҡ.

*ИҒТИБАР!*

# ХӘҮЕФ БАР, ОНОТМА!

**Башҡортостанда БПЛА хәүефе хаҡындағы мәғлүмәттәр менән ҡайҙа танышырға?**

Башҡортостанда, илдең башҡа төбәктәрендәге кеүек үк, пилотһыҙ һәм ракета хәүефе тураһында хәбәрҙәр даими ебәрелә. Әммә ҡайһы саҡта серверҙар техник мәсьәләләр һәм мәғлүмәттең ҙур күләмдә булыуы арҡаһында уны еткереп өлгөрә алмай, сигналдың тотҡарланыуы ихтимал.

Был мәсьәләне хәл итеү юлы республикала йәшәүсе һәр кешенең - кеҫәһендә. "Башинформ" агентлығы пилот хәүефе хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе ваҡытында белеү һәм ашығыс ярҙам хеҙмәттәре менән еңел генә бәйләнешкә сығыу өсөн ҡулланма әҙерләне.

Башҡортостан халҡы һәм республика ҡунаҡтары "112 - Ашығыс ярҙам" һәм "Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы" мобиль ҡушымталары менән файҙалана ала. Шулай уҡ интернет сикләнгән ваҡытта ла профилле министрлыҡтарҙың һәм ведомстволарҙың МАХ-тағы рәсми каналдары эшләй икәне билдәле. "Бының өсөн QR-кодты сканерлау ҙа етә, ҡушымта асыла, ул хәүеф иғлан ителгәндә һеҙҙе тиҙ арала иҫкәртә. Ғөмүмән, Рәсәйҙең Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының бөтә ашығыс мәғлүмәттәре менән дә танышырға мөмкин буласаҡ", - тип кәңәш иткәйне быға тиклем республика халҡына Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.

"112 - Ашығыс ярҙам" ҡушымтаһы шулай уҡ ракета һәм пилотһыҙ хәүеф тураһында йә уны бөтөрөү хаҡында push-белдереүҙәр ебәрә. Тағы ла сервис ғәҙәттән тыш хәл килеп сыҡҡанда кешенең исем-шәрифен һәм телефон номерын ашығыс ярҙам хеҙмәттәренә автоматик рәүештә ебәрә ала (ҡушымтаны күсереп алғанда шәхси мәғлүмәттәрҙе теркәү ҙә етә). Әгәр телефон хужаһы аҙашһа, ҡушымта шулай уҡ автоматик рәүештә һеҙҙең ҡайҙа икәнегеҙҙе асыҡлай. Был ҡотҡарыусыларға тиҙерәк ярҙамға килергә мөмкинлек бирәсәк. Белгестәр хәлде шунда уҡ баһалай алһын өсөн ваҡиға урынынан төшөрөлгән кадрҙарҙы беркетергә мөмкин. Тағы ла яҡындарҙың телефон һандарын яҙырға кәңәш ителә.

"Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы" ҡушымтаһының төп үҙенсәлеге шунда, ул кешегә ғәҙәттән тыш хәл килеп сыҡҡан осраҡта ни эшләргә, үҙенде нисек тоторға кәрәклеген күрһәтә. Программаға ҡуйылған МАХ ҡушымтаһының һанлы ярҙамсыһы барлыҡ һорауҙарға яуап бирәсәк, ә махсус бүлектә хәүефһеҙлек буйынса белемдәрҙе тикшерергә мөмкин.




Граждандарға шулай уҡ белдереүҙәр традицион смс-хәбәрҙәр аша таратыла. Был ысул күптәр өсөн ғәҙәти кеүек тойолһа ла, күп осраҡта махсус ҡушымталар аша хәбәрҙәр халыҡҡа тиҙерәк барып етә. Был мөмкинлектәрҙең барыһына ла эйә булыу өсөн смартфондарҙың AppStore, GooglePlay йәки Rustore кеүек рәсми онлайн магазиндарында "112 - ашығыс ярҙам" һәм "Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы" ҡушымталарын телефонға күсереп алыу ғына кәрәк. Икенсе ысул - махсус QR-кодты сканерларға һәм республиканың рәсми ресурстарында баҫылған мәғлүмәттәрҙе ҡарап барырға мөмкин.

**Иван ВАВИЛОВ.**

*МӘҘӘНИ МАЙҘАН*

# МИҘГЕЛ МАТУР ТАМАМЛАНДЫ



**М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры тантаналы шарттарҙа үҙенең 106-сы ижад миҙгелен япты. Йыл буйы башҡарылған эштәргә йомғаҡ яһалыуы менән иҫтәлекле көн үҙенең ҡунаҡтарына ысынлап та онотолмаҫ байрам кәйефе бүләк итте.**

Театр коллективы, һәр йылдағыса, тамашасыһы менән тығыҙ бәйләнештә булды - быйыл улар хөкөмөнә алты премьера сығарҙы. Мостай Кәримдең "Ай тотолған төндә" пьесаһы буйынса постановканы Айрат Абушахманов тәҡдим итте, Сәид Әхмәттең "Фармат ханым" пьесаһын Уланмырҙа Ҡарыпбаев сәхнәләштерҙе, Хәй Вәхиттең "Кейәүҙәр" пьесаһы һәм Алексей Симуковтың "Аҡ ҡанатлы хыялым" әҫәре буйынса эшләнгән постановкаларҙың режиссеры - Фирғәт Ғарипов. Бөгөнгө заман проблемаларын яҡтыртыуы менән әһәмиәтле булған "Кеше булып ҡалырға" постановкаһын Елена Коллегова һәм Хөрмәтулла Үтәшев сәхнәгә сығарҙы. Илсур Ҡаҙаҡбаев сәхнәләштергән "Киске табын" (Мостай Кәрим) спектакле шулай уҡ тамашасы күңелен яуланы.

Бынан тыш, үткән миҙгелдә театр Халыҡ-ара һәм Рәсәй кимәлендәге төрлө фестивалдәрҙә әүҙем ҡатнашып, мәҙәниәтебеҙҙе пропагандалауҙа ҙур өлөш индерҙе, үҙе лә бер нисә үҙенсәлекле проект менән сығыш яһаны. Мәҫәлән, Санкт-Петербургта үткән "Александринский" фестивалендә "Бөйрәкәй" (Айрат Абушахманов) һәм "Дядя Ваня" (Степан Пектеев) спектаклдәре менән сығыш яһаны. "Яратам тип әйтергә өлгөрмәнем" спектакле "Театр яҙы" X Республика конкурс-фестивалендә Гран-приға лайыҡ булды, "Алтын битлек" Рәсәй милли театрҙар премияһының Лонг-битенә индерелде. Театр директоры Зиннур Сөләймәнов әйтеүенсә, 2027 йылда ла ике ҙур сара - "Театр яҙы" һәм "Туғанлыҡ" фестивалдәре көтөлә.

Театр үҙенең матур йолаларына тоғро ҡалып, быйыл да миҙгелде премьера - Х. Вәхит әҫәре буйынса Фирғәт Ғарипов сәхнәләштергән "Кейәүҙәр" исемле сағыу музыкаль комедия менән тамамланы. Алҡыштар менән оҙатылған 106-сы бай ижад миҙгелен һағынып иҫләргә генә ҡалды. Шулай ҙа хушлашмайбыҙ. Алдағы миҙгелдә лә яңы хистәр менән байытыр, яҡты кисерештәр бүләк итер сәғәттәрҙе беҙ әле үк һағынып көтәбеҙ.

**Фәрзәнә ФӘТИХОВА.**

# АФАРИН, ТИБЕҘ!

**Башҡортостан Хөкүмәтендә ижади коллектив етәкселәрен һәм педагогтарҙы бүләкләү тантанаһы уҙҙы. Наградалар юғары һөнәрилек һәм Өфөлә үткән III Бөтә Рәсәй балалар фольклориадаһында ҡатнашҡан өсөн тапшырылды.**

Тәрбиәләнеүселәре Башҡортостанды Рәсәй кимәлендә лайыҡлы күрһәткән остаздар республика етәксеһе Радий Хәбиров ҡулынан рәхмәт хаттары алды: Ә.Исҡужин исемендәге Өлгөлө ҡурайсылар ансамбле етәксеһе, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының өҫтәмә белем биреү уҡытыусыһы Вәсил Баймырҙин; Өфө районы Шамонино ауылының "Дарман" өлгөлө халыҡ бейеүҙәре ансамбле етәксеһе Роберт Хәмиҙуллин; Баҡалы районы Н. Асанбаев исемендәге мәҙәниәт һарайының "Уралым" халыҡ бейеүҙәре ансамбле етәксеһе Рөстәм Ханнанов. Бүләкләү тантанаһынан һуң байрамға йыйылыусылар алдында Ханнановтарҙың ғаилә ансамбле сығыш яһаны. Фольклориадала ҡатнашҡан 15 йәшлек Азамат Ханнанов үҙенең музыкаль бүләген тәҡдим итте. Унын башҡарыуында ҡумыҙ моңо яңғыраны.

# КЕЙЕМЕНӘ МИЛЛИЛЕКТЕ ЛӘ ӨҪТӘ!

**Баш ҡалалағы Вуз-ара кампуста Өфө дәүләт нефть техник университеты студенттары - буласаҡ дизайнерҙар һәм иҡтисадсылар заманса технологиялар, ғәмәли бурыстар һәм милли мотивтарҙы дөйөм бер проект итеп берләштереп, үҙенсәлекле кейем коллекцияларын тәҡдим итте.**




Башҡортостан Республикаһының Фән һәм юғары белем биреү буйынса дәүләт комитеты рәйесе Светлана Мостафина диплом эштәрен кейем күрһәтеү рәүешендә яҡлау форматы Вуз-ара кампустың яңы эш логикаһын яҡшы сағылдыра, тип билдәләне. "Был - кампустың дисциплина-ара проекттар өсөн майҙансыҡҡа әйләнеүенең асыҡ миҫалы, бында модельерҙар, иҡтисадсылар һәм инженер-технологтар бергә эшләй, - тине ул. - Йәштәрҙең милли мотивтарға мөрәжәғәт итеүе, уларҙы заманса эшлекле контексҡа индереүе айырыуса ҡыуаныслы. Беҙ тап ошондай тәрән, ғәмәли, шул уҡ ваҡытта мәҙәни кодты һаҡлаған белем биреүҙе булдырабыҙ".

Иң сағыу өлгөләрҙең береһе - етәксе ҡатын-ҡыҙ өсөн милли стиль элементтары ҡулланылған кейем коллекцияһы. Уңайлы фасон, милли биҙәү элементтарын самалап ҡулланыу коллекцияла заманса эшлекле стилде һәм республика үҙенсәлеген берләштерергә ярҙам итә. Дизайн авторы - Айгизә Хәбирова, ә иҡтисади яҡтан нигеҙләү эшен Эмилия Шәйхетдинова башҡарған. "Был кейемдәр Башҡортостанда мәҙәни мираҫты хөрмәт иткән һәм быны үҙенең нескә зауығы аша күрһәткән заманса етәксе ҡатын-ҡыҙ образын тыуҙырырға мөмкинлек бирә", - ти авторҙар.

*ТЕЛ ТӨБӨ -ХАЗИНА*

# АТА-ӘСӘНДЕ БӘҪЛӘ

**Быуын сәскә.** Цикорийҙың башҡортса атамаһы ул быуын сәскә. *Быуын сәскә әрһеҙ үҫемлек. Быуын сәскәнең тамырын онтап, файҙалы эсемлек яһала.*

**Быуа.** Быуаның төп мәғәнәһе - быуып яһалған һыу һаҡлағыс. Был һүҙгә тағы ла "туҡтап ял алғанға тиклемге эш ваҡыты, һыуһын, тына" тигән йөкмәтке лә һалыныуы бар. *Бер быуа баҡса утау. Ике быуа ямғыр яуып үтте.*

**Бәҫләү. 1.** Бәҫләү, тимәк, хөрмәтләү. *Ата-әсәне бәҫләү. Бер-беребеҙҙе бәҫләйек.* **2.** Кейем-һалымды ҡәҙерләүгә бәйле лә "бәҫләү" тигән һүҙ килешә. *Әйберҙе бәҫләп тотоноу. Күлдәкте бәҫләп элеп ҡуй.*

**Бағана.** Бағана ла, төп мәғәнәһенән тыш, бүтәненә лә эйә. Әйтәйек, бағана шиғри әҫәрҙең рифма менән берләштерелгән бер нисә юллыҡ бер өлөшөн дә белдерә. Йәғни, куплет. *Йырҙың һәр бағанаһы бер төрлө башлана. Шиғыр бер нисә бағананан тора.*

**Бағланыш.** Ике арала булған ҡатнашлыҡ; бәйләнеш. *Ныҡлы бағланыш. Туғанлыҡ бағланышы бик көслө.*

**Шулай итеп, телебеҙҙе һаҡлауға, бәҫләүгә ҡағылышлы бағланышҡа тоғро ҡалайыҡ.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИР БУЛҒАН ИР...

## егерме биштә баш булыр

Кеше бәхете кешегә им булмай, кеше ире ир булмай.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Шундай "ҡоро" кешеләр була: уларҙы үҙеңдең шаяртыуҙарың менән ай буйы "һыулаһаң" да, тамсыһы ла уның тиреһе аҫтына үтеп инмәйәсәк.

**(Генри Бичер).**

Эгоистлыҡ мәнфәғәттәре - йыртҡыстың кешегә әүерелеү ваҡытында тороп ҡалған ҡалдығы. Кешелеклек кеше үҙ-үҙенән баш тартҡанда ғына башлана.

**(Анри Амиэль).**

Яҡшы балалар үҫтереүҙең иң яҡшы ысулы - уларҙы бәхетле итеү.

**(Оскар Уайльд).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер аҡыллы кешенән:**

**- Һин тормошта кемдәрҙән һабаҡ алаһың, ниндәй остаздарҙан аҡылға өйрәнәһең? - тип һорағандар.**

**- Һабаҡ биреүселәр аҙым һайын инде... - тип яуаплаған аҡыл эйәһе.**

**- Беҙҙең менән дә уртаҡлашһағыҙ ине бының серен, - тигән мөрәжәғәт итеүселәр.**

**- Сер бик ябай. Мәҫәлән, минең бер остаҙым эт булды. Мин бик ныҡ сарсап, йылға янына килгәндә унда бер эт тә бар ине. Ул да һыу эсергә теләне, әммә йылғала үҙенең шәүләһен күреп, уны икенсе бер эт тип уйлап, ситкә һикерҙе лә сабып китте. Ләкин уның сарсауы шул тиклем көслө булғандыр инде, кире боролоп килеп, бер нигә ҡарамай, һыуға һикерҙе. Бәй, баяғы шәүлә үҙенеке булып сыҡты бит! Мин беләм, был миңә Хоҙайҙан килгән аҡыл ине: ҡасан да булһа үҙеңдең ҡурҡыуыңды еңеп, боҙло һыуға ташланырға кәрәк.**

**Миңә тағы бер һабаҡ биреүсе бәләкәй бала булды. Мин ҡалаға ингәндә мәсеткә китеп барған ул бала ҡулына янған шәм тотоп алғайны. Мин малайҙы шаяртырға теләп, унан һорай ҡуйҙым:**

**- Ә һинең йөрәгеңдә шәм бармы?**

**- Эйе, бар.**

**- Шәмдең янған сағы ла, һүнгән сағы ла була. Ул уттың ҡайһы сығанаҡтан икәнен әйтә алаһыңмы?**

**Малай йылмайҙы, ҡулындағы шәмде өрөп һүндерҙе лә, шулай тине:**

**- Хәҙер һин күрәһең - ут китте. Ул ҡайҙа китте? Ошо һорауға яуап бирегеҙ, зинһар...**

**Малайҙың яуабына аптырауымдың сиге булманы. Шул мәлдә мин үҙемдең ахмаҡлығымды юғалттым. Ошо мәлдә мин үҙемдең бар кәрәкмәгән белемемде ситкә ырғыттым..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Башҡортостан Республикаһы буйынса Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт идаралығында теркәлде:
**ПИ №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.**

1 582218 911006 26026

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
**"Башҡортостан Республикаһы Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.**
**Тел.: 8 (347) 226-99-48.**
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 25.06.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 25.06.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 26.06.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2677
Заказ - 1152